ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

1-7 ноябрь (ҡырпағай) 2024

№43 (1136)

kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы ирекле

БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

"Көнбайыш ишек ҡағыр... һәм беҙ уға асырбыҙ" 3




Музейҙарыбыҙ... халҡыбыҙҙың тарихи-мәҙәни мирасын һаҡлай 8-9



Башҡорт рухын... аниме, комикстарҙа ла сағылдырырға ине 11



Бөрйән байлыҡтары 12-13




@KISKEUFA

Беҙҙең Телеграм каналға рәхим итегеҙ!

смартфон камераһын төбә

***Бер үк ваҡытта әфәнде лә, ҡол да булып булмай. Ҡол булғың килһә, кешеләрҙең һәр береһенә ялағайлан һәм ярарға тырыш, әфәнде булғың килһә инде үҙеңде ошо ҡылыҡтарҙан азат ит.***
***(Эпиктет).***

*ИҒТИБАР!*

# РУХИ АҘЫҠ КӘРӘКМЕ?



**Беҙ, ҡағыҙ баҫмалар редакцияларында эшләүселәр, йылына ике тапҡыр гәзит-журналдарға яҙылыу мәшәҡәттәре эсендә ҡайнайбыҙ. Аңлы, зыялы милләттәштәребеҙ ҙә һәр йылдың сентябренән киләһе йылдың тәүге яртыһы өсөн үҙ туған телендә нәшер ителгән баҫмаларға яҙылырға кәрәк икәнен белә. Был уның, ҡышҡылыҡҡа йылы кейем хәстәрләү, картуф-ит кеүек ризыҡтар менән запасланыу кеүек үк, ошо миҙгелдә атҡарыла торған, ғәҙәтенә һеңгән бер ғәмәлелер.**

Һәр хәлдә, шулай була торғайны. Әммә... Һуңғы тиҫтә йылдар самаһында ошо ғәмәлдәр рәтендәге "рухи аҙыҡ" тигәне, йәғни аҡ ҡағыҙ битенән уҡыу ғәҙәте онотола бара, онотола бара. Ә беҙ әйләнгән һайын был хаҡта - "Уҡыусылар зиһененә иң юғары ҡиммәттәр тураһында уй һалыусы, уларҙы аҡыллы фекергә ылыҡтырыусы, һығымталар яһатыусы, аңын уятыусы, рухландырыусы "Киске Өфө"гә яҙылмай ҡалмағыҙ, ауу-уу!" тип иҫкәртә торабыҙ, иҫкәртә торабыҙ.

Быны әле лә мөхтәрәм уҡыусыларыбыҙға шулай тип өндәшәбеҙ: һеҙ - 2025 йылдың беренсе яртыһы өсөн "Киске Өфө" (индексы ПР905) гәзитенә яҙылырға онотоп ҡуймағыҙ, ә беҙ һеҙҙе рухиәт менән һуғарыуҙы, кәрәкле мәғлүмәттәр еткереүҙе дауам итербеҙ, матур йөкмәтке менән танһыҡтарығыҙҙы ҡандырырға тырышырбыҙ.

Әйткәндәй, гәзитебеҙгә яҙылып, квитанцияларын редакцияға ебәргәндәр араһынан кемдәрҙер бүләккә бик шәп китаптар аласағы тураһында ла онотмағыҙ. Ул квитанцияларығыҙ артына тыуған көн даталарығыҙҙы ла теркәп ҡуйығыҙ. Бергә булайыҡ!

**МӨХӘРРИРИӘТ.**

*ИШЕТТЕГЕҘМЕ ӘЛЕ?*

## БАЛА ТӘМӘКЕ ТАРТМАҺЫН!

**Башҡортостан Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтай Рәсәй Хөкүмәтенең ыңғай баһаһын алған "Мәктәптәр һәм балалар баҡсалары биләмәһендә тәмәке тартҡан өсөн яуаплылыҡты көсәйтеү тураһында"ғы федераль закон проектын Дәүләт Думаһына индерҙе. Был хаҡта Башҡортостан парламентының матбуғат хеҙмәте хәбәр итте.**

"Балиғ булмағандарҙың тәмәке менән мауығыуы йәштәрҙең һаулығы өсөн борсолоу тыуҙыра, - тип белдерҙе Башҡортостан парламенты спикеры Константин Толкачев. - Мәғлүмәттәр буйынса, өлкән класс уҡыусыларының 60 процентҡа яҡыны тәмәке тарта".

Өлкән йәштәге тәмәкеселәрҙең яртыһынан ашыуы беренсе тапҡыр тәмәкене мәктәптә тартып ҡараған. "Шуға күрә балалар менән иҫкәртеү эшен көсәйтергә һәм мәктәптәрҙә, мәктәп яны биләмәһендә тәмәке тартыусыларға ҡарата ҡәтғи сара күрергә кәрәк", - тип өҫтәнеләр Дәүләт Йыйылышында.

Дәүләт Думаһына ҡарауға тәҡдим ителгән закон проекты бындай хоҡуҡ боҙоуҙарҙы икенсе төрлө квалификацияларға һәм күберәк штраф һалырға мөмкинлек бирергә тейеш. Ғәмәлдәге 500-1500 һум урынына - 2000-3000 һум.

*АЛДАЙҘАР!*

## ЙӘНӘҺЕ, ГАЗДЫ ТИКШЕРӘЛӘР



**Газсылар фатирҙағы плитәләрҙе даими тикшереп тора. Мутлашыусылар быны менән файҙалана башланы. Улар үҙҙәрен коммуналь хеҙмәткәр тип таныта.**

Аферистар аҡсаға газ анализаторҙары йәки башҡа приборҙар ҡуйырға тәҡдим итә. Шул уҡ ваҡытта ысынбарлыҡта булмаған закондарға һәм ҡарарҙарға һылтана. Ысын газсылар эш алып барһа, торлаҡ хужаларынан аҡса алмай - бөтә иҫәп-хисап торлаҡ-коммуналь хеҙмәттәр өсөн килгән айлыҡ квитанция аша үтә. Уларҙы нисек танып белергә: коммуналь хеҙмәткәрҙәр авария осрағында ғына иҫкәртеүһеҙ килә. Башҡа осраҡтарҙа йортта йәшәүселәргә подъезда иғлан ҡуйып булһа ла хәбәр итәләр. Шулай уҡ йортто хеҙмәтләндергән компания хат ебәрә йәки мәғлүмәтте үҙенең сайтында баҫтыра ала.

Газсы махсус кейем кейергә һәм таныҡлыҡ күрһәтергә тейеш. Әгәр уның формаһы һәм документтары юҡ икән, һеҙҙең алдығыҙҙа - мутлашыусы. Әммә кейеме һәм таныҡлығы булһа ла, уяу булығыҙ: ялған таныҡлыҡты - эшләтеп, ә махсус кейемде һатып алырға мөмкин.

Һеҙҙең алдығыҙҙа кем икәнен белер өсөн газ компанияһына шылтыратығыҙ. Телефондарын компанияның сайтында йәки газ ҡорамалдарына техник хеҙмәтләндереү килешеүендә табырға була. Шулай уҡ 104 һандарын йыйырға мөмкин. Бындай хеҙмәткәрҙең компанияла эшләүен һәм уны һеҙгә ебәреү-ебәрмәүҙәрен һорағыҙ. "Эйе" тиһәләр, барыһы ла яҡшы. Кире осраҡта мутлашыусыны фатирға индермәгеҙ.

12+

**✓ Ғилми етәкселек күпме ғалимдың Рәсәйҙе ташлап китеүе хаҡында бәхәсләшеүенә ҡарағанда, фән өлкәһен күтәрмәләү, инвестиция һалыу, ғилми хеҙмәткәрҙәргә эш хаҡын арттырыуу хаҡында һүҙ алып барырға тейеш түгелме ни?**



БЫЛ АЙҘА

**Ҡырпағай сәләмләй беҙҙе! Ҡарасай матур, сыуаҡ көндәре менән кинәндерһә лә, һуңғы көндәре ҡар һыуығы, иртәнге ҡырауҙары, төнгө минус температуралары менән алдан иҫкәртә килде: ҡыш ҡосағына барып инергә әҙер булһындар, сыныға торһондар, тигәндер инде, рәхмәт һиңә, ҡарасай, быйыл "илаҡ", йонсоу, эс бошоргос булмауың, матур көндәрең, ягымлылығың өсөн!**

# УЛДАР - ӘСӘЛӘР ТЕРӘГЕ



Ҡырпағай баҫты тупһабыҙға - ни хәл итмәк, риза булып ҡаршылайыҡ уны. Һыуығы ҡурҡытмаһа ла, ошо мәлдә тарала торған ОРВИ, грипп, тажзәхмәт ҡалдығы менән генә яфаламаһын берүк халыҡты. Бәлки, үҙенә күрә был айҙың да бәрәкәте, ҡыуаныстары күп булыр. Был ай көндәлегендә, мәҫәлән, Уландар көнө **(22)** Әсәләр көнө **(24)** менән юҡҡа ғына йәнәшә килмәгән: уландар тормошта ла һәр саҡ әсәләре янында, уға терәк һәм һөйөнөс килтереп йәшәргә тейештәр. Эйе, йәшәргә! Иң ҙур ҡыуаныс шуға ла ошо көндәрҙе именлектә бергә-бергә ҡаршылап, ниһайәт, күптән көтөлгән тыныслыҡ һүҙен ишетеү булыр ине.

Был айҙа хаҡһыҙ рәүештә онотола барған бер дата бар: планетаны тетрәткән, шанлы көндәре менән тарихта тороп ҡалған **7 ноябрь** - яңы стиль менән Бөйөк Октябрь социалистик революцияһы байрамы. Ерҙе ер биләүсе байҙар һәм помещиктарҙан - крәҫтиәндәргә, завод-фабрикаларҙы эшсе синыфҡа капиталистарҙан тартып алып биргән, халыҡҡа иркен һулап, үҙ мәнфәғәтенә генә түгел, илде аяҡҡа баҫтырыу, бөйөк держава итеү өсөн ирекле хеҙмәткә юл асҡан ай ул түгелме ни! Әмәлгә ҡалғандай, был ай календарында "тыныслыҡ, үҫеш, фән" тигән һүҙҙәр йыш осрай. Халыҡ-ара фән һәм тыныслыҡ аҙналығы **(9)**, Бөтөн донъя тыныслыҡ һәм үҫеш өсөн фән көнө **(10)** тигән даталар уйланырға мәжбүр итә. Фән ысынлап та бөгөн прогресс өсөн эшләйме әллә... тереклекте, кешелекте ҡыра торған яңынан-яңы зәһәр ҡорал уйлап табыу менән күберәк шөғөлләнәме?

Фән... Бармы ул беҙҙә бөгөн? Булһа, ни өсөн һаман да шул пневмония, диабет менән көрәштә **(12 һәм 14 ноябрь)**, Антибиотиктарҙы дөрөҫ ҡулланыуҙа **(13)** йәки булмаһа, исмаһам, әлеге яман шеш, тажзәхмәткә ҡаршы торорлоҡ саралар, дарыуҙар уйлап табылмай? Яңыраҡ ҡына мәғлүмәт киңлегендә шундай ҡыуаныслы хәбәр баҫылғайны: "Клиник тикшеренеүҙәр сиктәрендә меланома һәм үпкә яман шешенән яфаланыусы рәсәйҙәргә тиҙҙән яңы вакцина һалынасаҡ. Хәҙерге көндә меланома буйынса эшләйбеҙ, сөнки техник йәһәттән уның менән эшләү еңелерәк. Ул өҫтә һәм күренеп тора, ләкин башҡалар буйынса ла эш бара. Ҡаҙан нигеҙ медицина һәм биология институтында башҡа сирҙәр, мәҫәлән, донъяла йылына 1,2-1,3 млн кеше үлеүсе үпкә рағы буйынса ла тикшеренеүҙәр алып барыла. Был иң киң таралған яман шеш сире", - тип аңлатма бирә Гамалея исемендәге милли үҙәк етәксеһе Гинцбург. Ләкин әлегә "еңелерәк" төр сиргә өҫтөнлөк бирелә икән, иң киң таралған һәм нисә йылдар инде хәҙер тикшеренеүҙәр алып барылған яман шештәрҙе туҡтатыуға ҡасан сират етер һуң?

Ә тыныслыҡ һәм үҫеш хаҡына ниндәй ҡаҙаныштар менән килә бөгөн фән? РФ фән һәм юғары белем биреү министры В. Фальковтың былтырғы сығышындағы мәғлүмәттәр буйынса Рәсәй фән буйынса Ҡытай менән тығыҙ хеҙмәттәшлек итә. Был йәһәттән квант технологиялары өлкәһе иң мөһим йүнәлештәрҙең береһе иҫәпләнә, ләкин квант компьютер эшләү киберхәүефһеҙлек өлкәһендә фән алдына етди һынауҙар ҡуя, йәғни квант иҫәпләү машиналары ышаныслы һаҡланған хәрби һәм банк каналдарын да хатта "емереп" кәрергә һәләтле. Шуның өсөн бөгөн ғалимдар алдында квант бүлеү аҫҡыстары уйлап табыу проблемаһы тора. Шул уҡ ваҡытта ике ил физиктары наноматериалдарҙың яңы быуынын сығарыу, берлектә Айҙы өйрәнеү һәм унда уртаҡ станция төҙөү буйынса эшләй. Бөгөн шулай уҡ импортты алыштырыу йәһәтенән микроэлектрон технологиялар етештереү ҙә мөһим бурыс булып ҡала.

Интернет сығанаҡтарҙа 2016-2019 йылдарҙағы ҡайһы бер ҙур булмаған фәнни асыштар хаҡында һүҙ барһа ла, һуңғы өс-дүрт йыл эсендә өлгәшелгән ҙур ҡаҙаныштар хаҡында, үкенескә, ниндәйҙер мәғлүмәт уҡырға тура килмәне. 2021 йылда "Росатом" тарафынан ойошторолған "Фән тыныслыҡ һәм үҫеш өсөн" тигән халыҡ-ара форум-диалогта бөгөнгө фәнни асыштарҙың яҡшымы, әллә йәмғиәт өсөн хәүефме икәнлеге юҡҡа ғына дискуссия темаһы итеп алынмаған, күрәһең. Был форумда ғалимдар ядро технологияларын тыныс атом-энергетикала кешелек проблемаларын хәл итеү буйынса фекер алышты.

Рәсәйҙә фәндең үҫеш тотҡарлыҡтарына ғалимдарҙың сит илдәргә сығып китеүе лә сәбәпсе. Рәсәй Фәндәр академияһы вице-президенты Валентин Пармондың былтыр биргән мәғлүмәте буйынса һуңғы биш йылда ғына ла 50 мең (!) ғилми хеҙмәткәр Рәсәйҙән ситкә сығып киткән. Ошо уҡ мәғлүмәт былтыр ул ваҡыттағы Хәүефһеҙлек советы секретары Николай Патрушев ауыҙынан да ишетелде, әммә әлеге фән министры Фальков был мәғлүмәтте кире ҡағырға маташып, Статистик тикшеренеүҙәр институтына мөрәжәғәт итһә лә, әлеге һанға ҡаршы дәлил килтерә алманы. Уйлап ҡараһаң, был ҡот осҡос хәл. Бөгөн ғилми етәкселек күпме ғалимдың Рәсәйҙе ташлап китеүе хаҡында бәхәсләшеүенә ҡарағанда, фән өлкәһен күтәрмәләү, ил етәкселеге, хөкүмәт алдында фәнгә күберәк аҡса бүлеү, инвестиция һалыу, ғилми хеҙмәткәрҙәргә эш хаҡын арттырыу хаҡында һүҙ алып барырға тейеш түгелме ни?

Профессор Борис Шмелев быйыл апрелдә Рәсәй фәненең 300 йыллығын билдәләгәндә Премьер-министр Михаил Мишустин менән осрашыуҙа тап ана шул хаҡта һүҙ ҡуҙғатты һәм ғалимдарға эш хаҡын арттырыуҙы һораны һәм: "Әлеге эш хаҡына фән менән шөғөлләнеү мөмкин түгел, шуға ла ғилми хеҙмәткәрҙәр бизнес өлкәһен һайлай йәки ҡайҙа яҡшы түләйҙәр, шунда китәләр", - тине. Дөрөҫ һүҙгә яуап юҡ. Уның ҡарауы, Рәсәйҙә һуңғы йылдарҙа яһалма интеллект (ИИ) технологияларын үҫтереүгә ҙур иғтибар бирелә. 2019 йылда уҡ әле РФ Президенты Владимир Путин 2030 йылға тиклем яһалма интеллект үҫешенең милли стратегияһын раҫлағайны. Әлеге көндәрҙә илдә яһалма интеллект өлкәһендә алты яңы тикшеренеү үҙәген асыу, ИИ буйынса белгестәр уҡытыу эше бара. ИИ технологияларын төрлө йүнәлештәге сәнәғәт һәм бизнес компаниялары ғына түгел, бөтөн кимәлдәге дәүләт власы системаһы һәм ябай ҡулланыусылар ҙа үҙ эшендә файҙалана башланы

Был айҙағы күренекле көндәр: Бөтөн донъя ирҙәр көнө, Рәсәй халыҡтарының хоҡуҡтары Декларацияһы, Журналистарға ҡаршы башбаштаҡлыҡ һәм еңәйәтселекте халыҡ-ара бөтөрөү **(2)** көндәре, Халыҡтар берҙәмлеге, Бөйөк Октябрь революцияһы; 1941 йылда Октябрь социалистик революцияһының 24 йыллығына арнап, Мәскәүҙең Кремль майҙанында хәрби парад үткәрелгән көндәр **(7)**, Таптыҡҙар һәм зирәктәр **(8)**, Халыҡ-ара Фән һәм тыныслыҡ аҙналығы, Фашизмға, расизмға һәм семитизмға ҡаршы халыҡ-ара көн **(9)**, РФ Эске эштәр органдары хеҙмәткәрҙәре, Бөтөн донъя йәштәр **(10)**, Иҡтисадсылар, Халыҡ-ара энергияны һаҡлау **(11)**, Хәүефһеҙлек буйынса белгестәр, Һаҡлыҡ банкы, Пневмонияға ҡаршы көрәш **(11)** көндәре, Бөтөн донъя мәрхәмәтлек **(13)**, Диабетҡа ҡаршы бөтөн донъя көрәш **(14)**, Ойошҡан еңәйәтселеккә ҡаршы подразделениелар булдырылған, Икенсел эшкәртеү, Призывниктар **(15)** көндәре, Самбо көнө **(16)**, Студенттар көнө, Юл-транспорт ваҡиғаһы ҡорбандарын иҫкә алыу **(17)**, Ракета ғәскәрҙәре һәм артиллерия, Халыҡ-ара ирҙәр **(19)** көндәре, Транспорт эшсәндәре, Бөтөн донъя бала **(20)** көндәре, Бөтөн донъя сәләмләү, Хәрби ант, Бөтөн донъя телевидение, Халыҡ-ара тәмәкенән баш тартыу **(21)** көндәре, Уландар көнө **22)**, Әсә көнө **(24)**, Ҡатын-ҡыҙға ҡарата көс ҡулланыуҙы бөтөрөү өсөн халыҡ-ара көн **(25)**, Бө-

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓Радий Хәбиров Башҡортостан Башлығы призына ир-егеттәр араһында спорт көрәше буйынса Рәсәй кубогы ярыштарын ҡараны. Ярыштар Рима Баталова исемендәге Спорт әҙерлеге үҙәгендә дүртенсе тапҡыр үткәрелә. Унда Рәсәйҙең 27 төбәгенән 150 спортсы, шул иҫәптән Башҡортостандан 16 спортсы ҡатнаша. Республика етәксеһе көрәш буйынса олимпия чемпиондары һәм билдәле тренерҙар менән бергә көрәшселәрҙең алышын күҙәтте.

✓Стәрлетамаҡ ҡалаһының элекке мэры Рөстәм Гәзизов Башҡортостан Башлығы указы менән республика Хөкүмәте вице-премьеры вазифаһын башҡарыусы итеп тәғәйенләнде. Указ, уға ҡул ҡуйған көндән, 2024 йылдың 28 октябренән көсөнә инә. Рөстәм Гәзизов торлаҡ-коммуналь хужалыҡ, транспорт һәм төҙөлөш мәсьәләләре өсөн яуап бирә. Хәтерегеҙгә төшөрәбеҙ, 2021 йылдың ноябрендә Гәзизов Стәрлетамаҡ хакимиәте башлығы итеп тәғәйенләнгәйне.

✓Белорет районының Үрге Арша ҡасабаһынан капитан Максим Рыбаков үлгәндән һуң Рәсәй Федерацияһы Геройы исеменә лайыҡ булды. Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров республика Хөкүмәтенең оператив кәңәшмәһендә ошо турала әйтте. Махсус операция барышында хәрби бурысын үтәгәндә һәләк булған яугир шулай уҡ ике "Батырлыҡ өсөн", "Алтын йондоҙ" миҙалдары, Батырлыҡ ордены һәм башҡа наградалар менән бүләкләнгән.

✓Айнур Биргәлин ҡабатлан Башҡортостан мосолмандарының Диниә назараты рәйесе итеп һайланды. Уның кандидатураһы Өфөлә ойошманың съезы барған ваҡытта раҫланды, тип хәбәр итә Рәсәй мосолмандары Диниә назаратының матбуғат хеҙмәте. Хәтерегеҙгә төшөрәбеҙ, Айнур Биргәлин 2019 йылдың апрелендә Башҡортостан мосолмандарының Диниә назараты рәйесе итеп тәғәйенләнгәйне. 1992 йылдан был вазифаны биләгән Нурмөхәмәт Ниғмәтуллин отставкаға сыҡты. Республикала 1300 мосолман мәхәлләһенең 737-һе Башҡортостан мосолмандарының Диниә назаратына ҡарай.

✓"Ҡаршылыҡтарҙы емереп" форумының пленар ултырышы барышында Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров 2025 йылды республикабыҙҙа Махсус хәрби операцияла ҡатнашыусылар һәм уларҙың ғаиләләре йылы тип иғлан итеү хаҡында белдерҙе. Яҡын арала тейешле указға ҡул ҡуйылыр тип көтөлә. Әлегә ҡарарҙы ҡабул иткәндә яугирҙарҙың һәм генерал Шаймуратов ордены кавалерҙарының мөрәжәғәттәре иҫәпкә алынды, тип билдәләне Башҡортостан Башлығы. Тематик йыл сиктәрендә тейешле саралар планын әҙерләнә.

✓ ***Кешелек алдында өс проблема тора: аҙыҡ-түлек хәүефһеҙлеге, энергетика һәм климат мәсьәләләре. Көнбайыш был проблемаларҙы хәл итергә теләмәй икән, БРИКС эшкә тотонасаҡ.***

төн донъя мәғлүмәт **(26)**, Диңгеҙ пехотаһы **(27)**, Палестина халҡы менән халыҡ-ара теләктәшлек **(29)** көндәре, Химия ҡоралын ҡулланыу ҡорбандарын иҫкә алыу, Йорт хайуандары **(30)** көндәре.

**Ҡырпағайҙа тыуғандар:**

**1 -** күренекле шағир, Салауат Юлаев исемендәге Дәүләт премияһы лауреаты **Рәшит Назаровтың тыуыуына - 80 йыл** (1944-2006).

**-** тренер, Өфө фән һәм технологиялар университетының физик тәрбиә һәм спорт кафедраһы мөдире, спорт-һауыҡтырыу эштәре буйынса проректор, "Башҡортостан Республикаһы алдындағы хеҙмәттәре өсөн" һәм Салауат Юлаев ордендары кавалеры **Сәғит Аслаевҡа - 70 йәш** (1954).

**8 -** офтальмолог, медицина фәндәре докторы, профессор, "Оптимедсервиз" акционерҙар ойошмаһының генераль секретары **Булат Аҙнабаевҡа - 60 йәш** (1964).

**23 -** Башҡортостандың һәм Рәсәйҙең халыҡ артисы, М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры актеры, Салауат Юлаев исемендәге Дәүләт премияһы лауреаты, Дуҫлыҡ һәм Салауат Юлаев ордендары кавалеры **Хөрмәтулла Үтәшевҡа - 65 йәш** (1959).

**25 -** дәүләт һәм партия эшмәкәре, 1995-2000 йылдарҙа БР Президенты Хакимиәте етәксеһе, Рәсәйҙең атҡаҙанған ауыл хужалығы хеҙмәткәре, "Почет билдәһе" һәм Салауат Юлаев ордендары кавалеры **Исмәғил Ғәбитовтың тыуыуына - 85 йыл** (1939).

**26 -** дәүләт эшмәкәре, 1994-2006 йылдарҙа БР урман хужалығы, тәбиғәт ресурстары һәм тирә-яҡ мөхит министры, Башҡортостандың һәм Рәсәйҙең атҡаҙанған урмансыһы **Риф Ҡаҙаҡҡоловҡа - 75 йәш** (1949).

**29 -** күренекле ғалим-төркиәтсе, сәйәси эшмәкәр, яҙыусы, 1918 йылда "Башҡорт" гәзите мөхәррире, 1925-1964 йылдарҙа Анкара университетының төркиәт институты уҡытыусыһы, Төркиә Хөкүмәтенең Дин буйынса департаменты хеҙмәткәре, сығышы менән Силәбе өлкәһенән булған **Әбделҡадир Инандың** (Фәтхелҡадир Сөләймәнов) **тыуыуына - 125 йыл** (1899-1976).

**Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА.**

*ДОНЪЯ ШАНДАУЫ*

# "КӨНБАЙЫШ ИШЕК ҠАҒЫР...

## һәм беҙ уға асырбыҙ"

**Халыҡ-ара БРИКС берекмәһенең 22-24 октябрҙә Ҡаҙанда үткән XVI саммиты, дөрөҫөн әйткәндә, бөгөнгө донъя хәлдәренә битараф булмаған һәр кемдең иғтибарын йәлеп итте һәм, "Татаринформ" яҙып сығыуынса, "бөтөн донъяны шаулатҡан өс көн" булды. Ҡаҙан саммиты үткән аҙнаның ғына түгел, бәлки, быйылғының да күренекле йыл сараһы тип нарыҡланырлыҡ ваҡиға булғандыр, сөнки, кемдер әйтеүенсә, уның әһәмиәтен беҙ бер-ике көн эсендә түгел, ә әкренләп, йыл буйына анализлай һәм баһалай аласаҡбыҙ. Күп һанлы рәсми даирәләр вәкилдәре, сәйәсмәндәр, шулай уҡ киң мәғлүмәт саралары белдереүенсә, был саммит донъя тарихында, һис һүҙһеҙ, лайыҡлы урынын аласаҡ.**




Мәғлүм булыуынса, был берләшмә 2006 йылда Санкт-Петербург халыҡ-ара иҡтисади форумында Бразилия, Рәсәй, Һиндостан һәм Ҡытай илдәренең иҡтисад министрҙары тарафынан ойошторолғайны. Күп тә үтмәне, уға Көньяҡ Африка килеп ҡушылды һәм шул ваҡыттан алып БРИКС-тың популярлығы арта бара. Быйыл Рәсәй ойошма рәйесе вәкәләтен биләгәс, уның нигеҙе Египет, Эфиопия, Иран, Берләшкән Ғәрәп Әмирлектәре һәм Сәғүд Ғәрәбстаны иҫәбенә тағы ла нығына төштө. Рәсәй Президенты Владимир Путин әйтеүенсә, халыҡ-ара был ойошма кешелектең байтаҡ өлөшөнөң мәнфәғәттәрен яҡлай: бөгөн БРИКС өлөшөнә донъялағы ҡоро ерҙең 33 проценты һәм планета халҡының 45 проценты тура килә. Шуға күрә лә уның сираттағы йыйынына 36 ил вәкиле, шуларҙың 24-енең дәүләт башлыҡтары һәм хөкүмәт етәкселәре, шулай уҡ алты халыҡ-ара ойошма делегациялары килде. Был ойошманың нығына барыусы абруйы хаҡында һөйләй, әлбиттә.

Хатта ки Украинала буласаҡ "тыныслыҡ саммитына" саҡырыуҙы ҡабул итмәйенсә, Зеленскийҙың асыуын ҡабартып, Ҡаҙанға, БРИКС йыйынына Берләшкән милләттәр ойошмаһының генераль секретары Антониу Гутерриш үҙе лә килеп еткән. Быға үс итеп, Зеленский БМО хужаһын Украинала ҡабул итеүҙән... баш тартҡан! Уның ҡарауы, саммит ултырышында сығыш яһап, БМО етәксеһе Украиналағы конфликтты ойошма уставы нигеҙендә тыныс юл менән яйға һалырға саҡырған. В.Путин менән шәхсән осрашыуында ла генсек ошо уҡ теманы ҡабатлап күтәргән. Ә бына саммиттың эшендә, РФ Президентының матбуғат секретары Дмитрий Песков әйтеүенсә, Украина мәсьәләһе мөһим булһа ла, үҙәк тема булып тормаған. БРИКС илдәре араһында Украина конфликтына төрлөсә ҡараш йәшәй, ләкин БРИКС ойошмаһы башҡа маҡсаттарҙа ойошторолған, тип билдәләй эксперттар.

Ниндәй маҡсаттар һуң улар һәм был йыйында ниндәй мәсьәләләр ҡаралған? Ҡабул ителгән декларацияның төп темаһы "санкцияларҙың донъяла финанс-иҡтисади көрсөккә килтереп тереү ихтималлығы һәм БРИКС-тың быға юл ҡуймаясағы". Кешелек алдында өс проблема тора: аҙыҡ-түлек хәүефһеҙлеге, энергетика һәм климат мәсьәләләре. Көнбайыш был проблемаларҙы хәл итергә теләмәй икән, БРИКС эшкә тотонасаҡ. Ошо маҡсаттарҙан сығып, БРИКС-тың иген биржаһын булдырырға ҡарар ителә. Әйткәндәй, был ойошмаға иген продукцияһы етештереүселәрҙең 40 проценты һәм шул тиклем үк кимәлдә ҡулланыусылар инә. Икенсенән, Халыҡ-ара валюта фондына (МВФ) альтернатива булараҡ, БРИКС-ты үҫтереү банкы эшкә ҡушыласаҡ. Быны, тимәк, берҙән-бер халыҡ-ара резерв валюта булып торған долларҙан китеү, тип аңларға кәрәк. Киләһе мөһим бурыс - Ойошма ағзалары булып торған илдәр иҡтисадына ярҙам һәм Глобаль көньяҡ һәм көнсығыш дәүләттәрен финанс ресурстары менән тәьмин итеү маҡсатында БРИКС-тың инвестиция платформаһын булдырыу. Шул уҡ ваҡытта яһалма интеллект өлкәһендә берекмә альянсын ойоштороу мәсьәләһе лә мөһим тема булараҡ, Ҡаҙан декларацияһы исемлегенә ингән.

Рәсәй Президенты БРИКС йомғаҡтары буйынса 24 октябрҙә матбуғат конференцияһы үткәрҙе. Ул берекмәгә ингән дәүләттәрҙең демократик нигеҙҙә һәм күп полярлы донъя тәртибен төҙөү бурысын аңлап, бөгөнгө көн өсөн мөһим тип ҡарауҙарын һәм шул уҡ ваҡытта законһыҙ санкцияларға, беҙҙең традицион әхлаҡ ҡиммәттәрен емерергә маташыуҙарға бергәләп ҡаршы торорға әҙер булыуҙарын иң мөһиме тип атаны. "БРИКС дәүләттәре финанс өлкәһендә хеҙмәттәшлекте нығытырға теләй һәм беҙ милли валюталарҙа үҙ-ара иҫәп-хисап механизмын тышҡы хәүефтәрҙән азат булған банк-ара берҙәмлек төҙөйбөҙ. БРИКС-тың түләүҙәр системаһы цифрлы платформаға нигеҙләнәсәк. Шул уҡ ваҡытта беҙ ойошма дәүләттәренең артабанғы иҡтисадын үҫтереү маҡсатында инвестицияларҙы көсәйтергә теләйбеҙ. Был иһә Яңы үҫеш банкы ярҙамында атҡарыласаҡ", - тине Путин. Әйткәндәй, Бразилиялағы был банктың президенты Дилма ханым Роуссефф шулай уҡ саммитта ҡатнашты, сөнки киләһе йыл БРИКС саммитына Бразилия етәкселек итәсәк. Шулай итеп, "үҙ проблемаларыбыҙҙы беҙ үҙебеҙ хәл итәсәкбеҙ", тине Путин һәм БРИКС майҙанының ағза һәм партнер илдәргә үҙ-ара тигеҙ хоҡуҡтар биреүе, үҙ-ара мәнфәғәттәрҙең яҡланыуы хаҡында ла әйтте. Шулай уҡ, сит ил матбуғат саралары һәм күҙәтеүселәренең, "Путин долларҙы еңеү ниәте менән янай" тип яр һалыуына ҡарата: "БРИКС сиктәрендә хеҙмәттәшлек бер кемгә лә - долларға ла, башҡа төр валюталарға ла ҡаршы түгел, ә фәҡәт ойошмалағы дәүләттәрҙең мәнфәғәттәре өсөн альтернатив саралар эҙләү", - тип ҡат-ҡат ҡабатланы. Тик шулай ҙа, эксперттар фекеренсә, долларҙан тыш иҫәп-хисап системаһы буйынса эшләү ҡапыл ғына һәм еңелдән булмаясаҡ, БРИКС-тың берҙәм милли валютаһын булдырыу мәсьәләһе лә әле ҡаралмай. Икенселәр әйтеүенсә, БРИКС илдәренең Үҙәк банктары цифрлы платформала уңышлы идара итә аласаҡтар, сөнки Рәсәй менән Ҡытайҙа, мәҫәлән, цифрлы валюталарҙы һынап ҡарау тәжрибәһе уңышлы бара.

Дөрөҫ, төрлө даирәләрҙә саммиттың әһәмиәтенә ҡараш һәм баһалар ҙа төрлөсә. Сәйәсмән Николай Миронов уны "донъя тәртибе тарихында һынылыш яһаусы ваҡиға" тип баһа бирһә, икенселәр БРИКС-ты "кеше йөҙлө ойошма" тип атаны. Күҙәтеүсе эксперттар һәм сит ил журналистары белдереүенсә, был ваҡиға бар донъяла "Рәсәйҙе бер яңғыҙын ҡалдырыу сәйәсәтенең ҡаҡшауы" , "Рәсәйҙең дипломатик еңеүе" тип баһаланды. Ошо урында билдәле сәйәсмән, эксперт-аналитик Николай Мироновтың: "Ҡасан да булһа Көнбайыш БРИКС ишеген ҡағыр, һәм беҙ уға асырбыҙ", - тигән һүҙҙәре иҫкә төшә. Был ошо ойошманың һәр кемгә, һәр дәүләткә асыҡ, хеҙмәттәшлеккә әҙер булыуы хаҡында һөйләй.

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА.**

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓Рәсәй банкының директорҙар советы төп ставканы 19 проценттан 21 процентҡа тиклем арттырыу тураһында ҡарар ҡабул итте. 21 октябргә ҡарата йыллыҡ инфляция 8,4 процент тәшкил иткән һәм 2024 йыл йомғаҡтары буйынса 8-8,5 процент тирәһе булыр тип көтөлә. Рәсәй банкы Директорҙар советының киләһе ултырышы 20 декабрҙә була. Унда төп ставканың кимәле тураһында мәсьәлә ҡарала. Рәсәй банкы киләһе ултырышта ставканың йәнә артыуы ихтималлығын фаразлай.

✓Өфөлә биш һәм унан күберәк бала тәрбиәләгән әсәйҙәр "Әсәлек даны" миҙалы менән бүләкләнде. Бүләкләнеүселәр араһында Благовар, Благовещен, Дәүләкән, Дыуан, Дүртөйлө, Ейәнсура, Иглин, Илеш, Ҡырмыҫҡалы, Ҡыйғы, Күгәрсен, Кушнаренко, Көйөргәҙе, Тәтешле, Туймазы, Учалы, Хәйбулла, Саҡмағош райондарынан һәм Салауат ҡалаһынан 30 гүзәл зат бар. Башҡортостанда "Әсәлек даны" миҙалы 1998 йылдан башлап биш һәм унан күберәк бала тәрбиәләгән ҡатын-ҡыҙҙарға тапшырыла.

✓Башҡортостандан "көмөш" йәштәгеләр Үзбәкстанға сәйәхәткә юллана. Туризм министры вазифаһын башҡарыусы Зөһрә Гордиенко әйтеүенсә, пилот сәфәрҙәре ведомство менән "ТТ-Трэвел" туроператоры араһында ҡул ҡуйылған хеҙмәттәшлек тураһында килешеүгә ярашлы бойомға ашырыла. Билдәле булыуынса, республика пенсионерҙары яҡын арала юлға сығырға тейеш. Шулай уҡ төбәккә Рәсәй һәм сит ил туристарын йәлеп итеү өсөн яңы төбәк-ара һәм халыҡ-ара маршруттар ойоштороу планлаштырыла.

✓Башҡортостанда 91 йәшлек Талха Яҡупов үҙенең "Урал" мотоциклын Махсус хәрби операцияла ҡатнашыусыларға ебәргән. Ишембай районының Этҡол ауылында йәшәгән яҡташыбыҙҙың ошо аҙымы тураһында муниципалитет хакимиәтенән хәбәр иттеләр. "Минең әле тик торған ауыр һәм ҡеүәтле ике тәгәрмәсле техникам Донбастың фронт юлдарында башҡорт яугирҙарына нығыраҡ кәрәк", тип иҫәпләй аҡһаҡал. "Үҙем Ватанға хеҙмәт итә алмайым инде, әммә уны һаҡлаусыларға ярҙам күрһәтерлек мөмкинлегем бар!" - тип билдәләне Талха Яҡупов.

✓Бөрйән районының "Шүлгәнташ" тарихи-мәҙәни музей комплексы янында модулле ҡунаҡхана төҙөү проекты республиканың өҫтөнлөклө инвестиция проекттары исемлегенә индерелде. Компания-инвестор проектҡа яҡынса 80 миллион һум аҡса һалырға ниәтләй, тип хәбәр итә Башҡортостан Хөкүмәтенең матбуғат хеҙмәте. Проектты өҫтөнлөклөләр исемлегенә индереү инвесторға һалым льготаларына дәғүә итергә, шулай уҡ ер участкаһын сауҙаһыҙ ҡуртымға алырға мөмкинлек бирә. Инвестор 20 урынлыҡ модулле ҡунаҡхана һәм административ блок төҙөргә йыйына. Проект 2026 йылда тормошҡа ашырыласаҡ.

*✓ Башҡортостанда Ислам динен тотоусылар быуаттар буйына күп милләтле илебеҙҙең ҡеүәтен нығытыуға, уның мәнфәғәттәрен яҡлауға тос өлөш индерә.*



ҠЫҪҠАСА

# УРЫНДАРҘА - ЯҢЫ ЕТӘКСЕЛӘР

**Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров белдереүенсә, Башҡортостандың 30 муниципалитетында хакимиәт башлыҡтарын тәғәйенләү буйынса конкурс процедуралары тамамланды.** Федераль ҡануниәттә үҙгәрештәр булды, шуға күрә ҡала округтары һәм муниципаль район депутаттарын һәм хакимиәт башлыҡтарын һайлауға бәйле ҡайтанан тәғәйенләүҙәр оҙаҡ ваҡыт бара. Шуға ҡарамаҫтан, 30 муниципаль районда һәм ҡала округтарында конкурс комиссиялары тамамланды. Уларҙың күпселегендә яңы хакимиәт башлыҡтары тәғәйенләнде. Республика Башлығы Бөрйән районының яңы етәксеһе Рәмил Абдуллин менән таныштырҙы. Билдәләнеүенсә, Рәмил Миңлеәхмәт улы Бөрйән районында тыуып үҫкән, юридик белемле, суд рәйесе булып эшләгән. Һуңғы йылдарҙағы эш урыны - Ишембай районы башлығының беренсе урынбаҫары.

✓ **Башҡортостан ҡышҡы туристик миҙгелгә әҙерләнгән. Ҡыш көнө республика биләмәһендә 14 тау саңғыһы үҙәге эшләйәсәк.** Был хаҡта республиканың эшҡыуарлыҡ һәм туризм министры вазифаһын башҡарыусы Зөһрә Гордиенко хәбәр итте. Әлеге ваҡытта барлыҡ тау саңғыһы үҙәктәре лә тиерлек техник хеҙмәтләндереү үтте, канат юлдары һәм күтәргестәр файҙаланыуға әҙер. Илеш районының "Ал рауза янында", Нуриман районының "Ҡыҙыл шишмә" һәм Учалының "Родео" тау саңғыһы үҙәктәрендә ҡышҡа яңы трассалар сафҡа индерелә. Бынан алдараҡ "Башинформ" йәйгеһен Башҡортостанға 900 мең туристың килеүе хаҡында хәбәр иткәйне. Туризм өлкәһендә түләүле хеҙмәттәр күләме ағымдағы йылда 13,7 миллиард һумға еткән, ә май айынан августа тиклем ул 8,7 миллиард һум тәшкил иткән.

✓ **25-29 октябрҙә Ҡаҙағстандың Шымкент ҡалаһында уҡтан атыу буйынса донъя чемпионаты үтте.** Dala mergeni - 2024 ("Дала мәргәне") ярышында Рәсәй, Таиланд, Үзбәкстан, Ҡырғыҙстан, Франция, Әзербайжан, Иран, Монголия, Тажикстан, Төркиә, АҠШ һәм Һиндостандан 100-ҙән ашыу уҡсы ҡатнашты. "Мәргән уҡсы" ойошмаһы рәйесе Юлай Ғәлиуллин "Башинформ"ға һөйләүенсә, халыҡ-ара ярыштарҙа Рәсәй исеменән Башҡортостандың дүрт уҡсыһы сығыш яһаны. "Бөрйән районынан Наилә Ишкилдина ҡаҙаҡ сәбенә (жамбы) атыуҙа алтын миҙал яуланы, Әбйәлил районынан Гүзәлиә Дәүләтоваға ла уңыш йылмайҙы. Ул "көмөш" һәм "бронза" алды. Шулай уҡ беҙҙең командала Баймаҡ районынан Тимур Өмөтбаев һәм Бөрйән районынан Азат Ишкилдин сығыш яһаны", - тип билдәләне Юлай Ғәлиуллин. Еңеүселәргә беренсе урын өсөн - 500 мең тәңкә, икенсе һәм өсөнсө урындар өсөн 400 һәм 150 мең тәңкә тапшырылды.

✓ **2022 йылда Радий Хәбиров һәм Донецк Халыҡ Республикаһы башлығы Денис Пушилин хеҙмәттәшлекте үҫтереү тураһында коммюникеға ҡул ҡуйғайны.** Әле Башҡортостан Донецк Халыҡ Республикаһы менән хеҙмәттәшлек тураһында килешеү төҙөй. "Башҡортостандың Донецк Халыҡ Республикаһы менән хеҙмәттәшлеген үҫтереү маҡсатында Башҡортостан Республикаһы Тышҡы иҡтисади бәйләнештәр һәм конгресс эшмәкәрлеге министрлығының Башҡортостан Республикаһы менән Донецк Халыҡ Республикаһы араһында сауҙа-иҡтисади, фәнни-техник, социаль һәм мәҙәни хеҙмәттәшлек тураһында Килешеүгә ҡул ҡуйыу тураһындағы тәҡдимен ҡабул итергә", - тиелә 2024 йылдың 22 октябрендә Радий Хәбиров ҡул ҡуйған бойороҡта.

ТӨРЛӨҺӨНӘН

# ҠАТЫН-ҠЫҘ ЯРҘАМЫ ЛА КӘРӘК

**Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров госпиталдәрҙә Махсус хәрби операция яугирҙарына ярҙам күрһәтеү өсөн ҡатын-ҡыҙҙар отряды ойоштороrға ҡушты.**

Республика ҡатын-ҡыҙҙары үҙҙәре төбәк етәксеһенә ошондай тәҡдим менән мөрәжәғәт иткән. Бында һүҙ медицина ярҙамы тураһында түгел, ә яугирҙарҙы ҡарау хаҡында бара. "Минә ҡатын-ҡыҙҙар мөрәжәғәт итә. Мәҫәлән, егетте госпиталгә килтерәләр. Кейеме ҡанлы, бысраҡ. Был табиптарҙың эше түгел, ә ҡарарға кәрәк. Табиптар өлгөрмәй. Беҙгә бик күп мөрәжәғәттәр килә, туғандары ла һорай. Улар өйҙә түҙеп ултыра алмай. Уларҙы отрядҡа тупларға, Оборона министрлығының баш медицина идаралығына, ЛНР хөкүмәтенә сығырға кәрәк. Оҙатыу буйынса сығымдарҙы үҙебеҙгә алабыҙ. Был дөрөҫ эш. Был тап унда барырға теләгәндәр өсөн. Бәлки, уларҙы ебәрер алдынан медицина белеме бирергәлер?" - тип белдерҙе республика етәксеһе.

Башҡортостан Башлығы был эште системаға һалырға, ҡатын-ҡыҙҙар отрядтарын ойоштороrға ҡушты. Һуңынан улар Махсус хәрби операция ветераны статусын алырға мөмкин.

# ХАЛЫҠ КӘСЕБЕ ЙӘНЛӘНӘ

**Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров IV Халыҡ-ара этнотуризм форумы барышында Өфөнөң "Торатау" конгресс-холында асылған халыҡ художество кәсептәре күргәҙмәһен ҡараны.**

Радий Хәбиров "Кирач" ижади студияһы етәксеһе, Ауырғазы күп профилле колледжы уҡытыусыһы Зәки Нагаев менән аралашты. Республика етәксеһе килеп киткәндән аҙаҡ оҫтахана яңы кимәлгә күтәрелде, тип билдәләне ул. Башҡортостандың халыҡ оҫтаһы һүҙҙәренсә, уларҙың керамиканан эшләнгән фольклор әҫәрҙәре геройҙары һындарын, шулай уҡ республика тарихы һәм мәҙәниәте объекттарын хәҙер Ауырғазы районының ғына түгел, тотош республиканың туристик бренды тип атарға мөмкин. Хәҙер был изделиеларҙы республиканың байтаҡ визит-үҙәктәрендә һатып алырға мөмкин.

Башҡортостан Башлығы баш ҡалабыҙҙың 450 йыллығы уңайынан сығарылған "Өфөнө өйрән" балалар өҫтәл уйынын ҡараны. Авторҙар әйтеүенсә, быдай уйындарҙа милли-төбәк компоненты бар. Шулай уҡ күргәҙмәлә Архангел районы фермеры Андрей Алексеев тәҡдим иткән продукция менән дә танышты. Уның хужалығы үлән сәйҙәре, еләкле эслектәр, киптерелгән емешеләк етештереү менән шөғөлләнә.

# МОСОЛМАНДАР ЙЫЙЫНЫНДА

**Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров республика мосолмандары Диниә назаратының IX съезы эшендә ҡатнашты.**

"Рәсәй - миллионлаған мосолман өсөн тыуған йорт. Беҙҙең илдә православие менән бергә Ислам - дәүләтте барлыҡҡа килтереүсе дин. Республикабыҙҙа бөгөн ике миллиондан ашыу мосолман йәшәй. Башҡортостанда Ислам динен тотоусылар быуаттар буйына күп милләтле илебеҙҙең ҡеүәтен нығытыуға, уның мәнфәғәттәрен яҡлауға тос өлөш индерә. Республикабыҙ мосолмандары Диниә назаратының быуаттан ашыу тарихы бар. Бөгөн унда 856 ойошма иҫәпләнә һәм илдәге иң ҙур ойошмаларҙың береһе булып тора. Башҡортостан мосолман өммәһенең эшмәкәрлеге Исламдың күп быуатлыҡ традицияларын, халыҡтар дуҫлығын нығытыуға, йәш быуынды тәрбиәләүгә йүнәлтелгән. Рухи лидерҙарыбыҙ ил етәкселегенең тарихи ҡарарҙарын яҡлай, республиканың йәмәғәт проекттарында әүҙем ҡатнаша.

Башҡа традицион конфессия вәкилдәре менән бергә һеҙ экстремизм һәм ксенофобия идеяларына, классик Исламға ят булған дини ағымдарға ҡаршы тораһығыҙ. Барығыҙға ла традицион ғаилә ҡиммәттәрен һаҡлауға, йәштәргә патриотик тәрбиә биреүгә лайыҡлы өлөш индергәнегеҙ өсөн рәхмәт белдерәм. Һеҙҙең тырышлыҡ менән бөгөн мәсеттәр ауылдарҙың һәм ҡалаларҙың рухи остаздың абруйлы һүҙе яңғыраған йәмәғәт тормошо үҙәктәренең береһенә әүерелде. Һеҙҙең ихлас вәғәздәрегеҙ йәмғиәтебеҙҙе әхлаҡи яҡтан һауыҡтырыуға булышлыҡ итә.

"Әр-Рәхим" мәсетендә төҙөлөш эштәре бара, ул Өфөнөң биҙәге һәм ғорурлығы булырға тейеш. Ошонда, һеҙҙең алда тағы бер тапҡыр әйтәм - беҙ уны мотлаҡ төҙөп бөтөрбөҙ. Бының өсөн бөгөн бөтә шарттар булдырылған, тейешле ҡарарҙар ҡабул ителгән", - тип тә билдәләне республика етәксеһе Радий Хәбиров.

# ЭШЛЕКЛЕ ҺӨЙЛӘШЕҮҘӘР



**Өфөнөң ВДНХ-Экспо майҙансығында Рәсәй энергетика форумын һәм 30-сы "Урал энергетикаһы" махсуслаштырылған күргәҙмәһен асыу тантанаһы булды. Тантанала Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров ҡатнашты.**

"Бында энергетика өлкәһенең әйҙәүсе эксперттары, сәнәғәтселәр, илебеҙ энергетикаһы үҫешен тәьмин иткән предприятиеларҙың етәкселәре йыйылды. Башҡортостан был йәһәттән алдынғы төбәк. Беҙ йылдан-йыл етештереүҙе лә, ҡулланыуҙы ла арттырабыҙ. Был мөһим иҡтисади үҫеш күрһәткестәре булып тора. Шуға күрә беҙ иң яҡшы тәжрибәләр менән алмашырға һәм бергәләп үҫешергә шатбыҙ. Белоруссиянан, Ҡытай Халыҡ Республикаһынан, Үзбәкстандан килгән коллегаларыбыҙҙы сәләмләйем. Беҙҙә шундай изге йола бар: йыл һайын форумда яңы объекттарҙы сафҡа индерәбеҙ, яңы төҙөлөш эштәрен башлайбыҙ. Бөгөн дә ике ҡыуаныслы ваҡиға көтә. Беҙ ошо предприятиеларҙың етәкселәренә бик рәхмәтлебеҙ. Президент программаһы сиктәрендә Ҡарман ДРЭС-ының 1-се энергетика блогын яңыртыуға старт бирәбеҙ. Был мөһим ваҡиға. Благовещен районында иһә "Юлдаш" ярҙамсы станцияһын файҙаланыуға тапшырабыҙ", - тине Радий Хабиров форумды асыу тантанаһында.

Әйткәндәй, Башҡортостан генерациялау компанияһының генераль директоры Анатолий Дубровский һүҙҙәренсә, Президент программаһы сиктәрендә энергетика системаһын яңыртыуға 150 миллиард һумға аҡса тотоноу планлаштырыла. Ә "Башкирэнерго"ның генераль директоры Анатолий Пискунов әйтеүенсә, компания йыл һайын электр селтәрҙәрен үҫтереүгә яҡынса 7 миллиард һум инвестициялай һәм яңы ярҙамсы станциялар төҙөүгә аҡса йүнәлтә.

## Б А Ш   Ҡ А Л А   Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

✓Өфөлә тыуып үҫкән опера йырсыһы Илдар Абдразаҡов Рәсәй Федерацияһы Президенты ҡарамағындағы Мәҙәниәт һәм сәнғәт буйынса совет составына инде. Советты Рәсәй Президенты Владимир Путин етәкләй. Совет составында шулай уҡ Карен Шахназаров, Владимир Мединский, Владимир Спиваков, Юрий Башмет, Денис Мацуев, Валерий Гергиев һәм башҡа бик күп күренекле ижади шәхестәр бар. Шулай уҡ бынан алда Асҡар Абдразаҡовтың Рәсәй мәҙәниәт министрлығы ҡарамағындағы Йәмәғәт советы составына инеүе хаҡында хәбәр ителгәйне.

✓Был аҙнала Өфөнөң Нестеров музейына Третьяков галереяһынан 49 картина килтерҙеләр, тип хәбәр итә ҡала хакимиәтенең матбуғат хеҙмәте. Өфөләр һәм баш ҡала ҡунаҡтары Исаак Левитан, Илья Репин, Валентин Серов, шулай уҡ Иван Шишкин һәм башҡа оҫталарҙың сәнғәт әҫәрҙәрен ҡарай ала. "Академизмдан экспрессионизмға" тигән экспозиция 31 октябрҙә асылды.

✓Республикала Башҡортостандың халыҡ шағиры, прозаик, журналист, педагог, йәмәғәт эшмәкәре Рауил Шаммасовтың тыуыуына 95 йыл тулыуҙы билдәләргә әҙерләнәләр. Башҡортостан Башлығы указы үтәлешен республика Хөкүмәте Премьер-министрының беренсе урынбаҫары вазифаһын башҡарыусы Урал Килсенбаев контролдә тота. Билдәле булыуынса, Рауил Шаммасов 94-се йәшендә арабыҙҙан китте. Ул тыуған төйәге Стәрлебашта ерләнгән.

✓Өфө рапирасыһы, өс тапҡыр Европа чемпионы, Олимпия уйындары еңеүсеһе Тимур Сафин Гран-при серияһының бишенсе этабында бронза призер булды. Башҡортостандың Спорт министрлығынан хәбәр итеүҙәренсә, өлкәндәр турниры Мәскәү өлкәһенең Новогорск ҡалаһында үтте. Өсөнсө урын өсөн алышта Тимур Сафин Мәскәүҙән Алексей Ивановты 15:9 иҫәбе менән еңде.

✓Баш ҡала аэропортының матбуғат хеҙмәтенән хәбәр итеүҙәренсә, 28 октябрҙә Nordwind Airlines "Икар" авиакомпанияһы менән берлектә Өфө - Ҡаҙан маршруты буйынса беренсе рейсын башҡарҙы. Ул Embraer 190 самолеттарында дүшәмбе һәм йома көндәрендә аҙнаһына ике рейс башҡара. Бынан тыш, Utair авиакомпанияһы "Өфө" аэропортынан көн һайын урындағы ваҡыт менән көндөҙгө 2 тула 5 минутта Ҡаҙанға рейстар башҡара.

✓Өфө спортсыһы Семён Елистратов конькиҙа тиҙлеккә йүгереү спорты буйынса Рәсәй кубогының икенсе этабында ике тапҡыр призер булды: ул 500 һәм 1000 метр арауыҡта бронза һәм көмөш миҙалдар яуланы. Шорт-трек буйынса Рәсәй кубогының икенсе этабы Санкт-Петербургта үтте.

**"БАШИНФОРМ" материалдары файҙаланылды.**

КӨН ТЕМАҺЫ

# ҺАУЛЫҠ СИКЛӘНҺӘ ЛӘ...

## хоҡуҡтары сикләнмәһен

**Әҙәми заттарҙың һаулығы бер иш түгел, уның торошо бик күп факторҙар менән бәйле. Кеше йәшәгән мөхиттең бысраныуы, экология талаптарының үтәлмәүе, сифатһыҙ аҙыҡ-түлек менән тукланыу, тәбиғәт катаклизмдары, технологик катастрофалар, локаль һуғыштар, енәйәтселек һәм башҡа бик күп төрлө сәбәптәр арҡаһында ауыр сирләләр, зәғифләнгән кешеләр, инвалидтар һаны арта бара. Ер йөҙөндә йәшәгән барса халыҡтың 15 проценты - 1 миллиардтан ашыу кеше инвалидлыҡтың теге йәки был формаһына дусар булған, уларҙың 80 проценты - үҫешеүсе илдәр граждандары.**

Иң үкенеслеһе - донъяла инвалид балалар һаны ла йылдан-йыл арта бара. Берләшкән Милләттәр Ойошмаһының балалар хоҡуҡтарын һаҡлау һәм уларға ярҙам итеү маҡсатында ойошторолған ЮНИСЕФ ойошмаһының Башҡарма директоры Генриетта Фор 2021 йылдың 10 ноябрендә БМО ултырышында махсус доклад менән сығыш яһай. Уның белдереүенсә, донъяла 240 миллионға яҡын инвалид бала теркәлгән. Докладта балалар именлегенең төп күрһәткестәре буйынса, һау-сәләмәт балалар менән сағыштырғанда, инвалид балаларҙың хәле күпкә насарыраҡ булыуы билдәләнә. "Яңы тикшеренеүҙәр беҙ элегерәк тә белгәндәрҙе раҫлай: мөмкинлеге сикләнгән балалар үҙҙәренең хоҡуҡтарын бойомға ашырғанда күп һанлы һәм киҫкенләшә барған проблемаларға осрай. Һүҙ уларға белем алыу мөмкинлеген тәьмин итеү йә иһә китаптар уҡыу тураһында барһынмы - теләһә ниндәй күрһәткес буйынса инвалид балаларҙы иҫәпкә алыу ихтималлығы ғәмәлдә нык түбән, уларҙың тауыштары ишетелмәй тиерлек. Ошондай балалар бик йыш ҡына онотолоуға дусар... Уларҙың күҙгә салынып бармауы социаль изоляция сәбәбе булып тора. Бик оҙайлы ваҡыт дауамында беҙҙә инвалид балаларҙың дөйөм иҫәбе хаҡында ышанысты мәғлүмәттәр булманы. Беҙ, ошондай балаларҙың күпме икәнен һанап сығара алмаған хәлдә, уларҙың мәнфәғәттәрен иҫәпкә ала алмайбыҙ һәм улар менән кәңәшләшеүҙән мәхрүмбеҙ, беҙ уларҙың ҙур потенциалын асыуға булышлыҡ итә алмайбыҙ", - тип белдерҙе Генриетта Фор.

**Ҡайһы бер тикшеренеүселәр яҙғанса, донъя кимәлендә балаларҙың 5 проценты билдәле бер сәбәптәр арҡаһында зәғиф булып тыуа, унан башҡа байтаҡ ҡына балалар, тыуғандан һуң һаулығы үтә насарайып, инвалидҡа әйләнә. Тыуасаҡ баланың ағзалары эмбриональ үҫеш барышында формалаша, әгәр уға ата-әсәһенән бирелгән гендар теүәл һәм тәҙөк булһа, ул иҫән-һау донъяға килә, таҙа һәм сәләмәт булып үҫә. Унан һуң, бәпестең һаулығы әсәһенең сәләмәтлеге менән дә бәйле: ҡарындағы бала организмына әсә кешенең сирләүе, төрлө дарыуҙарҙы күпләп ҡулланыуы, алкоголле эсемлектәрҙән баш тартмауы кире йоғонто яһауы мөмкин. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, байтаҡ ҡына бәпестәр нәҫел сирҙәренә дусар була, шулай уҡ тыуған мәлендә алынған травмалар, насар экология тәьҫире һәм башҡа сәбәптәр арҡаһында зәғифләнгән йә иһә тыумыштан инвалид булған балалар социумдың бер өлөшө булып тора.**



Төрлө сирҙәргә тиҙ бирешеүсәнлек, иммун системаһының тейешле кимәлдә эшләмәүе һөҙөмтәһендә ғәрип балаларҙың һаны арта бара. Росстат мәғлүмәттәре инвалид балалар һанының уҙған быуаттың 80-90-сы йылдарында ныҡ артыуын күрһәтә: уларҙың дөйөм иҫәбе 1981 йылда 53 мең бала булһа, 1991 йылда - 155 мең, 1999 йылда - 597 меңгә етә, 2001 йылда 675 мең тәшкил итә. Бик ҡыҙғаныс күренеш: 2023 йыл башына илебеҙҙә 722 мең бала инвалид статусында теркәлә, был 18 йәшкә тиклемгеләрҙең 2,4 проценты. Нисек кенә үкенесле булмаһын, 2023 йылдың 31 декабренә Рәсәйҙең 146 150 789 кешеһенән 11 040 864-е инвалид. Бер илгә 11 миллиондан ашыу ғәриплләнгән кеше - артыҡ күп түгелме һуң? 2020 йыл менән сағыштырғанда, уҙған 3 йыл эсендә инвалидтар һаны 35 671 кешегә арта.

**Шуныһын һыҙыҡ өҫтөнә алыу фарыз: 4,2 млн инвалид эшкә яраҡлы йәштә, әммә уларҙың күбеһе бер ҡайҙа ла эшкә урынлаша алмай. Былдай кешеләрҙең айырым статусы, йәғни һаулыҡтарының торошо арҡаһында физик яҡтан сикләнгән булыуы хеҙмәт баҙарында, башҡа граждандар менән сағыштырғанда, уларҙың конкурентлыҡ мөмкинлектәрен дә сикләй. Ысынбарлыҡта инвалидлыҡҡа дусар булыусылар дәүләт тәьминәтендә генә йәшәргә теләмәй: улар, физик мөмкинлектәре һәм һәләттәренә ярашлы, хеҙмәт функцияларын үтәргә әҙәр.**

Әйтергә кәрәк, һуңғы йылдарҙа Рәсәй һәм уның субъекттары кимәлендә инвалидтарҙың эшкә хоҡуҡтарын бойомға ашырыу буйынса байтаҡ эшлекле саралар күрелде. 2012 йылдың 3 майында Рәсәйҙең Федераль Йыйылышы "Инвалидтар хоҡуҡтары Конвенцияһын ратификациялау тураһында" тигән Федераль закон ҡабул иткәйне. Ошо законға ярашлы, власть органдары зәғиф һәм ғәриплләнгән граждандарҙың илебеҙҙә башҡа граждандар менән тиң хоҡуҡлы булыуын тәьмин итергә тейеш. Бында иң элгәре уларҙың дөйөм урта һәм төрлө кимәлдәге һөнәри белем алыу мөмкинлеге һәм билдәле бер өлкәлә эшкә урынлаша алыуы күҙ уңында тотола. Әммә, ҡыҙғанысҡа ҡаршы, ошо йәһәттән ижтимағи йөгөбөҙ урынынан бик әкрен ҡуҙғала: 2023 йылға эшкә яраҡлы йәштә булған инвалидтарҙың дүрттән өс өлөшө һаман да эшһеҙ ҡала бирә. Был өлкәлә проблемалар хәттин ашҡан: эш менән тәьмин итеү органдары тәҡдим иткән вакансиялар инвалидтарҙың күбеһе өсөн яраҡлы түгел, уларҙы һөнәри яҡтан әҙерләү юлға һалынмаған, улар өсөн махсуслаштырылған яңы предприятиелар асылмай, эш биреүселәр, бизнес өлкәһе уларға битараф булып ҡала. Хәтта ки, эшкә урынлашҡан хәлдә лә, инвалидтар хеҙмәтенә тейешле иғтибар етеңкерәмәй, улар хеҙмәт коллективтарында "аҡ ҡарға" булып ҡала, шунлыҡтан, үҙ хеҙмәтенән эмоциональ ҡәнәғәтләнеү тапмай.

Һаулыҡ мөмкинлектәре сикләнгән кешеләрҙең хеҙмәт хоҡуҡтарын тәьмин итеү проблемаһы һына түгел, уларҙың белем алыуға, ялға, дауаланыуға, социаль яҡлауға ҡарата булған ихтыяждарын, барса мәнфәғәттәрен иҫәпкә алыу күп аспектлы, күп яҡлы ҡатмарлы ижтимағи һәм дәүләти проблема. Уға ведомство-ара комплексты ҡараш булдырыу, эш биреүселәрҙе, бизнес әһелдәрен, ғилми, мәғрифәти, мәҙәни ойошмаларҙы, инвалидтарҙың йәмәғәт ойошмаларын, һаулыҡ һаҡлау органдарын, ғөмүмән, барса йәмәғәтселекте йәлеп итеү фарыз.

**Башҡортостанда һуңғы йылдарҙа зәғиф һәм ғәриплләнгән граждандарҙың мәнфәғәттәрен яҡлау буйынса байтаҡ ҡына эштәр башҡарылды. Республика Башлығы Р.Ф. Хәбиров ағымдағы 2024 йылды Һаулыҡ мөмкинлектәре сикләнгән кешеләр тураһында хәстәрлек күреү йылы тип иғлан иткәйне.** Ошоға ярашлы, Башҡортостан ҡалаларында һәм райондарҙа инвалидтар проблемаларын хәл итеү буйынса байтаҡ саралар күрелде һәм, иң мөһиме, улар урындағы властарҙың һәм йәмәғәтселектең иғтибарын ихлас ҡабул итте, үҙҙәрен ситкә тибелгәндәр итеп тойоп, көмһенеү комплексынан азат булыу мөмкинлегенә эйә булды.

Баш ҡалабыҙ Өфөлә 24-25 октябрҙә "Торатау" конгресс-холлында "Каршылыҡтарҙы емереп" тигән III Бөтөн Рәсәй форум-күргәҙмәһе уҙғарылды. Форумдың пленар ултырышында Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров, Рәсәйҙең оборона министры урынбаҫары - статс-секретары, "Ватанды һаҡлаусылар" дәүләт фонды рәйесе Анна Цивилёва һәм Стратегик башланғыстар агентлығының генераль директоры Светлана Чупшева ҡатнашты. Форум-күргәҙмәнең төп маҡсаты - һаулыҡ мөмкинлектәре сикләнгән граждандарҙы комплексты реабилитациялау юлдарын билдәләү, уларға белем биреү, хеҙмәткә хоҡуҡтарын тәьмин итеү, башҡа төрлө ярҙам ойоштороу мәсьәләләрен ҡарау, Башҡортостанда һәм илебеҙҙең төрлө тарафтарында тупланған тәжрибә менән уртаҡлашыу. Форумда ҡатнашыусыларға БР Башлығы Радий Хәбиров тәбрикләү һүҙе менән мөрәжәғәт итте, форумдың эшлекле һәм уңышлы булыуына ышаныс белдерҙе:

- "Каршылыҡтарҙы емереп" форумы төбәк башланғысы булараҡ барлыҡҡа килде, ләкин уның темаһы шул тиклем актуаль, бөгөнгә сара Стратегик башланғыстар агентлығы булышлығында үтә мөһим федераль фекер алышыу майҙансығына әүерелде. Был залда "үҙенсәлекле" кешеләрҙең тормошон яҡшыраҡ итергә тырышҡан фекерҙәштәр йыйылған. Тап форум ваҡытында яңы идеялар тыуа. Әйтәйек, 2024 йылды беҙ Һаулыҡ мөмкинлектәре сикләнгән кешеләр тураһында хәстәрлек күреү йылы тип иғлан иттек, - тине Радий Хәбиров. - Бөгөн иһә Махсус хәрби операция шарттарында ҡаты яраланған яугирҙарға ярҙам итергә кәрәк. Уларҙы тулы ҡанлы тормошҡа яраҡлаштырыу өсөн мөмкин булғандың барыһын да эшләү зарур. Шуға күрә киләһе йыл Махсус хәрби операцияла ҡатнашыусылар һәм уларҙың ғаиләләре йылы була.

Республика етәксеһе "үҙенсәлекле" кешеләргә тулы ҡанлы тормошҡа кире ҡайтырға мөмкинлек биргән комплексты эш хаҡында һөйләне:

- Төрлө реабилитация изделиеларын эшләү тармағы беҙҙең ярҙамға мохтаж ине. Профилле предприятиеларға етештереү ҡоралдары һәм материалдар һатып алыуҙы субсидиялау өсөн икенсе йыл инде республика бюджетынан аҡса бүленә. Был программа үҫешә. Етештереүселәрҙән беҙ сифатлы һәм заманса изделиелар көтәбеҙ... Үҙенсәлекле" балаларҙың атаәсәләре менән һөйләшкәндән һуң Өфөлә "Салют" реабилитация комплексын төҙөү идеяһы тыуҙы, ул үҙ эшен башланы ла инде. Бөгөнгө фекер алышыуҙан һуң һаулыҡ мөмкинлектәре сикләнгән кешеләргә ярҙам сараларын үҫтереү йәһәтенән яңы тәҡдимдәр булыр тип уйлайбыҙ", - тип билдәләне республика етәксеһе.

**Бәҙри ӘХМӘТОВ.**

# Х А Л Ы Ҡ  Д А У А Һ Ы



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, аныҡ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.**

## Мәтрүшкә

Күп йыллыҡ был үлән июнь-августа сәскә ата. Унда дуплау матдәләре, эфир майы, спирттар, геранилацетат, аскорбин кислотаһы күп. Уны сәскә атҡан осоронда йыялар. Халыҡ дауаһында киң ҡулланыла. Мәтрүшкә тынысландырыу, тирләтеү, һыуыҡты сығарыу, ҡаҡырыҡты сығарыу, тартышыуға, елһенеүгә ҡаршы һәм ауыртыныуҙы баҫыу көсөнә эйә. Ашҡаҙан-эсәк юлы эшмәкәрлеген яҡшырта, күңел болғаныу, үкшыуҙы баҫа, күрем килеүҙе яйға һала. Мәтрүшкә тәнәтмәһен нервы ҡуҙғығанда, йоҡоһоҙлоҡтан эсәләр. Ауыҙ ҡыуышлығы инфекцияларынан ярҙам итә. Ҡайһы берҙәр уны өйәнәк тотҡанда эсергә кәңәш итә. Иғтибар: бик ҡаты яһалған мәтрүшкә сәйе ир-егеттәрҙең енси әүҙемлеген кәметеүе ихтимал. Ул йөклө ҡатындарға ла ярамай.

❖ Аллергиянан 2 балғалаҡ вакланған мәтрүшкә үләненә 1 стакан ҡайнар һыу ҡойоп, 20 минут тәнәтергә һәм һөҙөргә. Көнөнә 3 тапҡыр ашарҙан 15 минут алда яртышар стакан эсергә.

❖ Бронхиттан 0,5 литр үҫемлек майына 3 ҡалаҡ вакланған мәтрүшкә үләнен һалып, төнгөлөккә ҡалдырырға, иртәнсәк һөҙөргә. Ошо майҙың 2-5 тамсыһын көнөнә 3-4 тапҡыр ҡабул итергә.

❖ Ҡурылдай астмаһынан 1 ҡалаҡ вакланған мәтрүшкәгә 1 стакан ҡайнар һыу ҡойорға. Көнөнә 3 тапҡыр ашарҙан 30 минут алда эсергә. Тәнәтмә ҡаҡырыҡты сығарырға һәм тирләргә ярҙам итә.

❖ Йоҡоһоҙлоҡтан 2 балғалаҡ вакланған мәтрүшкәгә 1 стакан ҡайнар һыу ҡойорға, 20 минут тәнәтергә, һөҙөргә. Йоҡлар алдынан ярты стакан эсергә.

❖ Ҡан баҫымы күтәрелгәндә аллергиянан дауаланғандағы ысулды ҡулланырға.

❖ Неврозлар, өйәнәк тотҡанда (эпилепсия) 100 грамм вакланған мәтрүшкә үләненә 1 стакан араҡы ҡойорға һәм ауыҙы ныҡлы ябылған һауытта 1 аҙна тәнәтергә. Көнөнә 3 тапҡыр ашарҙан 20-30 минут алда 1-әр балғалаҡ эсергә.

**Ғәлиә ШӘМСИЕВА әҙерләне.**

✓ *Шулай ҙа квадробер тигән күренеш беҙҙең йәмғиәттә тамырланып китмәҫтер. Ул беҙҙең халҡыбыҙҙың мәҙәни ҡараштарына ла тап килмәй, диндә лә һәр хайуанға ҡарата анығ талап билдәләнгән.*



ЗИҺЕН КИҢӘЙТЕП...



# КӨНЬЯҠ УРАЛ ҠОШТАРЫ

**Биҙгәләк**
**(Стрепет)**



Тауыҡ ҙурлыҡ. Ата биҙгәләктең муйыны йөйен ҡаралы-аҡлы. Кәүҙәһенең өҫкө яғы буй һыҙыҡлы һорғолт, аҫты - аҡ. Тәсө һарғылт, үлән араһында йәшенеү өсөн бик уңайлы. Тиҙ оса, осҡан саҡта ҡанатын йыш һелтәй һәм тауышланып бара. Биҙгәләк сағыштырмаса тын ҡош, "пуль-пуль-пуль" тип һирәк кенә тауыш бирә. Ҡош туйы мәлендә ата ҡош "трррр" тип таҡылдай.

Бөгөнгө көндә биҙгәләктең ареалы тигеҙ түгел, Дондан Уралға тиклем һирәк кенә осрай. Башҡортостанда юҡ тиерлек. Ҡайһы бер йылдарҙа Хәйбулла, Баймаҡ, шулай уҡ Федоровка һәм Ейәнсура районында тап булған.

Рәсәйҙең һәм Башҡортостандың Ҡыҙыл китабына ингән.

Биҙгәләк йәшәү өсөн ҡылғанлы даланы һайлай. Оя ҡорған ерендә баҫыуҙар һәм бейек үлән булмаҫҡа тейеш. Икенсе шарт - урын туҡланыу өсөн үләнгә бай булһын. Рационында үҫемлектәр ҙә, бөжәктәр ҙә бар. Йылы мәлдә бөжәктәрҙе күпләп ашай. Көҙөн ужым баҫыуҙарына ла бара. Иртә таң менән ризыҡ эҙләп сыға. Әҫәлә иртән һәм кисен генә ашай. Ҡош оҙаҡ ваҡыт һыуһыҙ йәшәй ала, һыулы үлән уға ябай һыуҙы ла алыштыра.

Дала ҡарҙан тулыһынса асылғас осоп килә. Кистәрен ата ҡоштар уйын үткәрә: ҡойроғон йәйә, ҡанаттарын төшөрә, асыҡ урында һикереп йөрөй, өҙөп-өҙөп тауыш бирә. Бындай уйындар киске эңерҙә йәки төндә була. Ата ҡоштар үҙ-ара һуғышып та китә.

Айырым йәшәһәләр ҙә, ояны парлап ҡоралар. Ерҙә бер аҙ соҡоп, ябай ғына оя яһайҙар һәм ҡоро үлән түшәйҙәр. 3-4, һирәк кенә 9-11 йомортҡа һала. Инә ҡош ҡына баҫа. Бәпкәләр май аҙағына сыға, уларҙы тәрбиәләүҙә ике ҡош та ҡатнаша. Август аҙаҡтарына бәпкәләр оло ҡоштарҙан бер ере менән дә айырылмай.

Сентябрь аҙағы-октябрь башында йылы яҡтарға осоп китә. Ҡырымдың дала өлөшөндә, Ҡара диңгеҙҙә ҡышлай.

Дөйөм һаны күп түгел. Күп төбәктәрҙә һирәк осрай торған ҡоштар рәтендә. Уларҙың һаны кәмеүҙең төп сәбәптәре - һунар итә торған ҡош булыуы һәм ерҙәрҙең баҫыуға әйләнеүе. Төрлө сәбәптәр арҡаһында йомортҡаларҙың 90 проценты юҡҡа сығып тора.

**М. Баянов, Ә. Мәмәтов,**
**"Көньяҡ Урал ҡоштары" китабынан.**
**(Дауамы бар).**

БЫНАҒАЙЫШ!

**Берәй хәбәрҙе - яҡшымы ул, насармы - күберәк кеше белһен тиһәң, ул турала туҡтамай һөйләргә, яҙырға, таратырға кәрәк икән. Бына быға тиклем "квадробер", "квадробинг" тигән һүҙҙәрҙе ишеткәнегеҙ бар инеме? Ике ятып, бер төшөбөҙгә ингәне лә юҡ ине. Аҙаҡҡы ике ай буйына шул турала төрлө "яңылыҡ"тар уҡый торғас, хәҙер урамда бесәй йә этте эләкләп, битлек кейеп, яһалма ҡойроҡ эләктереп, дүрт аяҡлап йөрөүсе малай-ҡыҙҙы күреп: "Ә, был квадробер ҙа инде", - тип әйтерлек булдыҡ былай.**

# БАЛА УЙЫНЫМЫ,

## әллә атай-әсәй хатаһымы?



Күберәк мәктәп уҡыусылары, тимәк, үҫмерҙәр араһында киң билдәләлек алған был бик үҙенсәлекле субкультура - квадроберҙар ҡаҡындағы яңылыҡтар йышыраҡ социаль селтәрҙәрҙә урын ала. Бына бер әләсәй этҡә оҡшатып ологан квадробер ейәнен сылбырға бәйләп, урамда йөрөй; бына Стәрлетамаҡ паркында квадробер ҡыҙҙар һикерешә; бына күрше Екатеринбургта бер үҫмер-квадробер бесәйгә оҡшатып, сәйер тауыштар сығарып, йәмәғәт транспортында кешеләрҙең аяҡтарына һырпалана; бына Надымда концерт мәлендә сәхнәгә бесәй битлеге кейеп сыҡҡан 8 йәшлек квадробер-ҡыҙға, "Аллам һаҡлаһын, һин квадробермы әллә?" тигәне өсөн уның ата-әсәһе йырсы Миа Бойконың өҫтөнән полицияға ғариза яҙып һала: йәнәһе, кеше алдында үҙенең хоббийы тураһында негатив һүҙ ишеткәс, ҡыҙҙары үҙенә йомола һәм уға хатта психолог ярҙамы кәрәк була. Ул ҡыҙҙы яҡлап, әллә күпме блогер сығыш яһаны әле.

Бесәй, эт һәм башҡа хайуан-йәнлек булып кейенеп, урамда йөрөүсе 10 йәшкә тиклемге балалар өсөн был ваҡытлыса мауығыу булып торалыр, улар өсөн был ысынында ла уйын ғына. Өлкәнерәк йәштәгеләре өсөн бары тик һеҙҙең һәм минең иғтибарыбыҙ, заманлаштырғанда, лайктар, ҡараусылар һанын арттырыу өсөн генә кәрәк. Бөгөн социаль селтәрҙәр һабантуй майҙаны кеүек, шағир әйтмешләй, унда һөнәрләһе - һөнәрен, һөнәрһеҙе үҙен күрһәтә. Күрһәтә, сөнки енел аҡса табырға теләй. Күрһәткәс инде, тамашаһын ла кәрәк. Ошо тамашаһы, йәғни беҙ, уның статусын күтәрәбеҙ, беҙҙең күнелдә уның "ижады" тыуҙырған һәр хистойғо уға матди килем килтереүгә булышлыҡ итә, шуға ла ул беҙҙе нығыраҡ аптыратырға ынтыла. Берҙә, әйтәйек, күрше Мөглифә йәки Маша инәйгә ярҙам итеп, йәки берәй шәп нәмә уйлап табып, олимпиадала енеп һ.б. танылыу яуларға теләмәй йәш кеше, ә еңелерәк юл эҙләй, был осраҡта иһә эт-бесәйгә "әйләнеп", бөтөн ғәмгә уларҙың магазиндарҙа һатылған махсус ризығын ашауын видеоға төшөрөп һалырға ла ғәрләнмәй.

Шулай ҙа квадроберҙарҙың был юҫыҡта алып барған ярышы хәҙер уйын сиген үтте, ахыры. Был йүнәлешкә депутаттар ҙа иғтибар итте - РФ Дәүләт Думаһы балаһы квадробинг менән шөғөлләнгәне өсөн ата-әсәләрҙе яуаплылыҡҡа тарттырырға, хатта ата-әсә хоҡуғынан мәхрүм итергә тигән тәҡдим менән сығыш яһай. Балаһын дүрт аяҡлатып йәки бауға бәйләп урамға алып сыҡҡан өсөн - 5 меңгә тиклем, социаль селтәрҙәрҙә квадробингты пропагандалаған өсөн шулай уҡ 5 меңгә тиклем штраф һалырға кәрәк, тигән фекерҙә улар.

Дәүләт Думаһының Мәғлүмәти сәйәсәт буйынса комитет рәйесе урынбаҫары Андрей Свинцовтың: "Балаһын тәрбиәләй алмай икән, штраф түләһен!"- тиеүендә дөрөҫлөк тә бар һымаҡ. Бөгөнгө һымаҡ, ғаиләләрҙә балаға батша итеп ҡарап, бер туҡтауһыҙ уның күнелен асып йәшәүгә ҡоролған тәрбиәнең һөҙөмтәһе түгелме был күренеш тә? Хәҙерге балаларға ниндәйҙер һүҙ әйтеү түгел, ҡырын ҡарарға ла ярамай - сит ил психологтары беҙҙә инде нисә йыл шулай тип өйрәтә, өйҙә эш эшләтеү түгел, мәктәптә япраҡ йыйҙырһалар ҙа ата-әсә лә тауыш ҡуптарырға әҙер. Бәпләп, һәр теләген үтәп, тәмле-татлы ашатып ҡына үҫтергән бала үҙенә яңынан-яңы ҡыҙыҡ эҙләйәсәк тә. 4-5 йәшлек балаһын, бесәй бул, тип, бер ата-әсә лә бауға тағып алмай, ул быны балаһын енә, тимәк, дөрөҫ тәрбиәләй алмағандан эшләргә мәжбүр. Аҡсалар түгеп, әрмәнен алып ҡалған малайың да бесәй булып мыраулап, урамға сығып китмәҫ тип әйтеп ҡара шунан, тәүбә-тәүбә...

Шуға ла квадроберҙарҙы йәлләргә лә, быны улар ата-әсә наҙы, иғтибары етмәгәндән эшләй, тип әлеге лә баяғы ата-әсәне ғәйепләргә лә кәрәкмәйҙер. Яңыраҡ Өфө үҙәгендә 20 йәште күптән үткән ике ирҙең бесәй булып кейенеп йөрөүен дә оҙон-оҙаҡ һөйләргә кәрәкмәй - уларҙың ошо "уйын" өсөн атрибутика һатыусыларға хеҙмәт итеп, ошо рәүешле улар тауарына реклама яһауы көн кеүек асыҡ. Интернетта 100 һумлыҡ ойоҡтар ҙа, 6-7 меңлек битлектәр ҙә күптән һатыла инде.

Шулай ҙа квадробер тигән күренеш беҙҙең йәмғиәттә тамырланып китмәҫтер. Ул беҙҙең халҡыбыҙҙың мәҙәни ҡараштарына ла тап килмәй, диндә лә һәр хайуанға ҡарата анығ талап билдәләнгән. Шуға ла был ваҡытлыса хәлгә артыҡ иғтибар итмәҫкә һәм уларҙың тирмәненә һыу ҡоймаҫҡа ғына кәрәктәр.

**Ләйсән НАФИҠОВА.**

ТЕМАНЫ ДАУАМ ИТЕП...

***Өфө ҡалаһының "Үҫеш" психологик-педагогик, медицина һәм социаль ярҙам үҙәге директоры, психолог Гүзәл ФӘЙЕЗОВА һөйләй:*** Ҡасандыр был йүнәлеш изге уй-ниәттәр менән барлыҡҡа килгән, йәғни хайуан-йәнлектәрҙе яҡлау проблемаһына кешенең иғтибарын йүнәлтергә тейеш булған. Әммә сит илдәрҙә таралыу алған был хәрәкәт балалар, айырыуса үҫмерҙәр араһында башҡараҡ юҫыҡҡа боролоп китеп, улар тышҡы ҡиәфәте менән генә түгел, ә холоҡ-ҡылығы менән дә ошо хайуандарға оҡшарға тырыша башлай - үҙе һынландырған хайуан ашаған ризыҡты ашай, уның кеүек мыяулай, өрә, үҙен агрессив тота: тырнаша, тешләшә һ.б. Әлбиттә, былар барыһы ла йәмғиәт ҡанундарына ла, кешелеклелек нормаларына ла һыймай.

Үҫмерҙәр, йәштәр араһында төрлө хәрәкәттәр булып тора инде ул тип уйлаусылар хаҡ, тик бала уға башкөләй бирелеп, уйын менән ысынбарлыҡ араһындағы сикте үтмәҫкә тейеш. Йәғни ул быны уйын тип кенә ҡабул итә һәм был шөғөлә уның үҙенең һәм эргә-тирәһендәгеләрҙең сәләмәтлегенә, ғүмеренә зыян итмәҫкә тейеш. Шулай ҙа үҫмер улы йәки ҡыҙы квадробер булырға теләй икән, ата-әсәгә уның күнел торошона, ҡылыҡтарына иғтибар итергә кәрәк. Бәлки, ул ниндәйҙер сәбәп менән агрессия кисерә һәм хайуан булып, эсендәге ошо асыуҙы сығарырға тырышалыр? Мәҫәлән, кеше башҡа кешене тырнай алмай, был тәрбиәһеҙлек тип һанала, ә бесәйҙе асыуландырһаң, ул һине тырнаҡтары менән эләктереп алырға ла тартынмай.

Ата-әсәләргә гел әйтәм, балаға үҙенең тойғолары менән идара итергә өйрәтергә кәрәк, ул кире булһынмы, әллә ыңғаймы - кисерештәренең ҡоло түгел, хужаһы булһын. Тыйыуҙар, баланың тойғоларын аңламау, уға яратыуыңды күрһәтмәү, уны гел бала итеп ҡабул итеп, үҙеңдең ҡараштарыңды көсләп тағыу үҫмерлек осорон үтеүҙе нык ҡатмарлаштыра. Шуға ла квадробинг менән шөғөлләнеп киткән үҫмерҙе иғтибарҙан ысҡындырмаҫҡа кәңәш итер инем. Ул уйын сиген уҙа икән, ярҙамға килергә кәрәк. Квадробер булараҡ нимәне эшләргә ярай, нимәне ярамай икәнен дә балаға ата-әсә аңлатырға бурыслы. Был хәрәкәт ҡасан һәм ниндәй маҡсатта барлыҡҡа килгән - ошо турала ла һөйләшергә кәрәк. Әгәр ҙә ата-әсәнең үҙенең көсөнән килмәй икән, белгестәргә мөрәжәғәт итеү ҙә мотлаҡ.

ТАРИХИ ХӘҠИҠӘТ

# ЫРЫМБУР ГУБЕРНАТОРҘАРЫ ҺӘМ БАШҠОРТТАР

## (Генерал-майор И.В. Чернов яҙмаларынан)



**Граф В.А. Перовский**

**(1833-1842 йылдарҙа Ырымбур губернаторы булған).**

Сухтелендың вафатынан һуң хәрби губернатор һәм корпус командиры вазифаһына тәүҙә генерал-адъютант Головнин тәғәйенләнә, әммә ул бында килмәй, Кавказға ебәрелә, ә Ырымбурға генерал-адъютант, генерал-майор Василий Алексеевич Перовский килә.

Ырымбурҙа хеҙмәте буйынса унан күпкә өлкәнерәк булған генерал лейтенант, 18-се пехота дивизияһы начальнигы Жемчужников йөшәй, ул бында оҙаҡ йылдар буйына хеҙмәт итә; әммә ул хәрби тәртип буйынса үҙенән кесерәк званиелы һәм үтә йәш генерал Перовскийҙың ҡул аҫтында эшләргә мәжбүр: был саҡта Перовскийға 36 -38 йәш тирәһе була.

Перовский батша ғаилә йәнәптәре тарафынан тулыһынса хупланған граф Сухтелендың тәҡдимдәрен тиҙ арала һәм кәрәгенән артыҡ һынылышһыҙ ғәмәлгә ашырыр өсөн барса сараларҙы күрергә тырыша. Вазифаһын үтәй башлаған мәлдән үк ул үҙе янына йәш, һәләтле һәм яҡшы белемле хеҙмәткәрҙәрҙе йәлеп итеү маҡсатын ҡуя, кемдәр бындай шарттарға тура килмәй, отставкаға ебәрелә: корпус штабы начальнигы, генерал-майор Мистров, дежур штабофицер Матерн вазифаларынан бушатыла, тәүгеһе генераль штаб полковнигы Рокосовский, ә Матерн икенсе бер офицер менән алмаштырыла.

Кизильский ҡәлғәһендә түбәнге чинда 20 йыл хеҙмәт иткән, шунда фатиры булған генерал Дренякин фиҙаҡәр хеҙмәте өсөн Изге Анна билдәһенә лайыҡ була, артабан прапорщик чинын, һуңынан гарнизон буйынса генерал-майор званиеһын һәм бригада командиры дәрәжәһен ала. Әүәл уны тимерсе һәм яҡшы хужа булған, тип һөйләйҙәр. Отставкаға сыҡҡас, ул үҙенең тыуып үҫкән ягына - Тамбов губернаһына 150 аты егелгән ылау менән тәрлә мөлкәтен ҡайтара, ылауҙа тоҙланған һарыҡ ите тултырылған мискәләр ҙә була - улар хеҙмәтселәр өсөн алдан әҙерләп ҡуйыла. Уның ике бер туған ағай-энеһе император Павел гвардияһында хеҙмәт итә, улар ҙа шулай уҡ генерал була, хеҙмәттәре өсөн поместье менән бүләкләнә.

Линияларҙағы бригада командирҙары, вазифаларына ярашлы туранантура бурыстарынан башҡа, кордон һағы начальниктары ла була, ул йәй көндәрендә линияны ҡырғыҙҙарҙың (ҡаҙаҡтарҙың. - **Тәрж. иҫк.**) һөжүменән һаҡлау өсөн ебәрелә. Уларға башҡорттар һәм ҡырғыҙҙарҙың башҡа эштәре менән дә шөғөлләнеү йөкмәтелә, һәм улар барыһынан килем ала. Перовский килеү менән ике бригада генералы һәм тик Орск менән Илек һағынан башҡа линия ҡәлғәләренең барса комендантары вазифаларынан бушатыла, дүрт линия батальоны һалдаттары казактар составына индерелә. Ырымбур сик комиссияһына яңы рәйес, полковник, ә һуңынан генерал-майор Генс йөҙөндә аҡыллы, әүҙем һәм төбөктә яҡшы кимәлдә белгән начальник тәғәйенләнә. Генсты Перовский һәр саҡта ла хөрмәт итә.

Земство исправниктарына буйһонған кантон начальниктары булған башҡорт халҡы казактар өлгөһөндә айырым идаралыҡ ала, сөнки уның бурыстарына казактар менән бергә хәрби хеҙмәттә булыу ҡаралған ине. Уларҙың начальниғы башҡорт ғәскәре командующийы тип атала башлай һәм ул Ырымбурҙа торорға тейеш була.

Әйткәнемсә, Ырымбурҙа иң юғары вазифаларға ҡарт генералдар тәғәйенләнә ине, уларҙың армияла хеҙмәт итеүенән файҙа булманы.

Перовскийҙы ҡуйған саҡта генерал-майор Гельд Ырымбур казак ғәскәре менән идара итә ине. Уның хәрби һәләттәре һәм ҡаҙаныштары аҙ билдәле, тәүге мәлдәрҙән бирле ул үҙен күрһәтә алманы.

Ғәскәрҙә 1835 йылда халыҡты аҙыҡ-түлек менән тәьмин итеү маҡсатында йәмәғәт ерен һөрөп эшкәртеү индерелә. Был нигеҙҙә һәйбәт сара, әммә ул казактарҙың ерҙә мотлаҡ эшләүен талап итә, улар араһында аңлатыу эштәре лә йүнләп алып барылмай. Казактар бындай яңылыҡтың барщинаны хәтерләтеүен күрә, улар, батша ғаилә йәнәптәренең, хәрби хеҙмәткә өҫтәп, уларҙан мотлаҡ эш талап итеүенә ышанмай, шуға күрә буйһонмайҙар һәм ашлыҡ сәсеүҙән баш тарталар. Әйтергә кәрәк, баш тартыу Ырымбурға яҡын урынлашҡан станицаларҙан, Черноречинскийҙан башлана шикелле. Станица начальнигы ошо хаҡта Нижнеозерный ҡәлғәһендә йәшәгән кантон начальнигына хәбәр итә; уныһы үҙенең донесениеһын киреғә ғәскәр канцелярияһына ебәрә. Унда тиҙ генә ҡарар ҡабул ителмәй, бер аҙнанан күберәк ваҡыт уҙып китә; ахырҙа хәрби губернаторҙың үҙенә хәбәр ебәрелә. Рапортты алғас, был эштең башта уҡ һүндерелмәүенә, ҡул аҫтындағыларҙың аҡрын ҡуҙғалыуына һәм эшләй белмәүенә Перовскийҙың асыуы ҡабара. Ул шундуҡ юлға сығыр өсөн экипаж әҙерләргә, Ырымбурҙа урынлашҡан бер батальонға үҙе артынан Черноречинскийға барырға, унда яҙма бойороҡ алырға ҡуша. Ырымбурҙан сыҡҡанда Перовский генерал Гельдтың фатирына инеп сыға, ә ул нисектер юғалып ҡалғандай була һәм казактарҙың сығышын туҡтатыу өсөн бер нәмә лә эшләмәй. Перовский генералдың казактар тынлашмай һәм бунт күтәрә тигән һүҙҙәренә былай тип яуап ҡайтара: "Мин һинә генерал түгелһең, ә ...һың тип әйтер өсөн индем". Ер эшкәртеүҙе ҡаты саралар менән индерәләр: шпицрутендар һәм ҡамсылар менән һуҡтыралар, һалдат итеп ебәрәләр һәм алыҫта урынлашҡан ерҙәргә күсерәләр (Новоорская һәм Кумацкая станицалары буйһонмаған казактарҙан хасил була), буйһонорға теләмәгәндәрҙе шулай йүгәнләйҙәр. Генерал Гельд Ырымбурға комендант урынына күсерелә, ә Ырымбур казак ғәскәре командующийы итеп генерал-майор Щуцкий ҡуйыла, ул, ҡырыҫ, ҡаты һәм талапсан кеше булараҡ, бер нәмәне лә ситтә ҡалдырмай, ә түбән чиндарға ҡарата бик уҫал була. Ул ғәскәргә барған саҡта казактар дер ҡалтырап тора. Шыйыҡ сыбыҡтар һәм нагайкалар даими ҡулланыла. Администратор булараҡ, Щуцкий үҙен бер нисек тә күрһәтә алмай, ә Перовский, казак эшмәкәрҙәренең һәләтһеҙ һәм йүнһеҙ булыуына инанып, ғәскәрҙәге иң мөһим эштәрҙе, атап әйткәндә: йәмәғәт ерҙәрен эшкәртеүҙе, Орскийҙан Уй йылғаһындағы станицаларға тиклем яңы линия төҙөүҙе һәм казактарҙы эске станицаларҙан яңы линияға күсереү буйынса барса әҙерлек эштәрен үҙенең етәкселеге аҫтында махсус булдырылған учреждениелар аша башҡара.

Йәмәғәт ерҙәрен эшкәртеү эштәре менән тәүҙә инженер-капитан Агапьев шөғөлләнә, уға Ырымбурҙа хужалыҡ буйынса ҡаҙна биналарын төҙөү ҙә йөкмәтелгән була, ошо маҡсатта уның ҡулы аҫтында эшсе башҡорттарҙан торған ҙур команда эшләй. Агапьев ғәскәрҙәр өсөн ҡаҙнаға тапшырылған ашлыҡ иҫәбенән үҙе өсөн 10 - 12 мең һум ассигнациялар ала; ошо үтә ҙур килеме менән генә сикләнмәй, үҙенә ҡаҙна материалдарынан өй һалдырыу өсөн башҡорттарҙы файҙалана.

Перовский, ошо хаҡта белеп ҡала һәм, башҡаларға әйтеп тормайынса, уны үҙенең ышанысынан сығара, ә Агапьев ул саҡта юғары наградаларҙан һаналған, муйынға тағыла торған изге Станислав ордены өсөн уға рәхмәт белдерергә килгәс, Перовский уны: "Кәбәхәт кеше икәнһең, лайыҡ булмаған наград өсөн түгел, ә һине намыҫлы кеше тип иҫәпләп, яңылышҡаным өсөн рәхмәт әйтергә тейешһең, йәнең менән һәр саҡта ла әшәке булғанһың", - тип битәрләй. Һуңынан үҙенең бойороғонда Агапьевтың барса ҡара эштәрен билдәләп үтә.

**Арыҫлан ТАЙМАСОВ тәржемәһе.**

**(Дауамы бар).**

БӨЙӨК ЕҢЕҮГӘ - 79



# ҠАҺАРМАНЛЫҠ ТАРИХЫ

## Көнсығыш Померания һөжүм итеү операцияһында

7-се гв. атлы корпусы командирының 1945 йылдың 20 апрелендәге бойороғо менән 16 февралдә Браллентин ауылы эргәһендәге алышта күрһәткән яугир фиҙаҡәрлеге һәм батырлығы өсөн I дәрәжә Ватан һуғышы ордены менән бүләкләнделәр: гв. ефрейторы, артиллерист-разведчик Әминев Ғәликарам Хисмәт улы, Маҡар (хәҙерге Ишембай районынан); гв. ефрейторы, 148-се гв. артминполкының 1-се батареяһы ездовойы Нурмуханов Джаналы, ҡаҙаҡ, Аҡтүбә өлкәһенән. Улар икеһе лә алышта һәләк булған; Ҡыҙыл Байраҡлы 32-се Томашув танк полкының уртаса танк командиры, лейтенант Назаров Василий Тимофеевич, (Горький өлкәһенең Ляхов районынан). 16 февралдәге алышта лейтенант Назаров ҡылыссылар эскадроны менән бергә дошманды Делитц тораҡ пунктынан бәреп сығара. Ауыр яраланған көйө батыр танкист немецтарҙың 4 пулемет нөктәһен юҡ итә; шул уҡ полктың уртаса танк командиры, кесе лейтенант Нефедов Василий Федорович, (Владимир өлкәһенең Гусь-Хрустальный ҡалаһынан). 14 - 20 февралдә Петцник ауылы янындағы алыштарҙа, танкыһынан мәргән атып, немецтарҙың пушкаһын һәм пулеметын расчеттары менән юҡ итә. 16 февралдә, танкыһынан снаряд яуҙырып, дошмандың контратакаһын тотҡарлап тора, эскадрондарҙың яңы рубежға юғалтыуҙарһыҙ күсеүенә булышлыҡ итә; 60-сы гв. атлы полкының 1-се эскадронының станковый пулемет расчеты командиры, гв. серженты Петух Александр Васильевич, белорус, (Полоцк өлкәһенән), элегерәк III дәрәжә Дан ордены менән бүләкләнгән. 15-16 февралдә Райхенбах тораҡ пункты районында немецтарҙың ҙур бер төркөмө Арнсвальде ҡалаһында ҡамауҙа ҡалған частарына ярҙамға йүнәлә. Дошман пехотаһына, танкыларына һәм бронетранспортерҙарына беҙҙең бер эскадрон яугирҙары ҡаршы сыға. Гв. серженты Александр Петух үҙенең пулеметынан ут яуҙырып, бер үҙе немецтарҙың 40-ҡа яҡын һалдатын һәм офицерын ҡырып һала. Ул үҙе лә ошо тинһеҙ алышта батырҙарса һәләк була.

Әйтеп үтелгән бойороҡта II дәрәжә Ватан һуғышы орденына лайыҡ булыусылар ҙа билдәләнгән: 148-се гв. артминполкының 1-се батареяһының орудие командиры, гв. старшинаһы Арыҫланов Фәтхулла Арыҫлан улы (Асҡын район, Ташлыкүл ауылынан). 16 февралдә Браллентин районында контратаканы кире ҡаҡҡан саҡта дошмандың штурм орудиеһын сафтан сығара, тура тоҫҡап атып, күперҙе емертә, шуның һөҙөмтәһендә немец подразделениеларының хәрәкәт итеүе тотҡарлана; 148-се гв. артминполкының взвод командиры ярҙамсыһы, гв. старшинаһы Бикташев Нурислам Рәжәп улы, Йомағужа районының Әбит ауылынан. Томашув, Лодзь, Калиш ҡалаларын алғанда һәм Померанияларғы февраль бәрелештәрендә Бикташев үҙен ҡыйыу һәм тәүәккәл командир итеп таныта. Взвод яугирҙарының бер төркөмө, төп колоннанан артта тороп ҡалғас, уларҙы немецтар ҡамап ала. Командир ҡуласа оборона тоторға бойора, үҙе пулеметтан мәргәндәрсә ут асып, немецтарҙы сигенергә мәжбүр итә; 148-се гв. артминполкының ДШК пулеметы пулеметсыһы, рядовой Ғәйетбаев Мөхтәр Бәгзетдин улы, Баймаҡ районының Буранбай ауылынан. 16 февралдә Браллентин ауылы өсөн барған алышта полкты эскадрон менән тоташтырған телефон линияһы 4 тапҡыр өҙөлә, Мөхтәр дошман уты аҫтында уны ялғай. Урам һуғышында яраланған пулемет тоҫҡаусыһын алыштыра, пулемет уты менән 13 немец һалдатын юҡ итә; 58-се гв. атлы полкының пулемет взводы командиры ярҙамсыһы, старшина Сәлимшин Мирғәли Сәлимша улы, Саҡмағош районының Аблай ауылынан. 16 февралдә Браллентин эргәһендә дошман пехотаһы һәм танкылары контратакаға ташлана. Браллентин ауылы янындағы юлдар киҫешкән урында Сәлимшин пулемет уты менән дошманды бер ротаға тиклем һалдаттарын кире сигенергә мәжбүр итә, улар яныынан атакаға күтәрелгәс, мәргәндәрсә атып, 40 һалдат һәм офицерын сафтан сығара.

**Вәли ИҘРИСОВ әҙерләне.**

**(Дауамы бар).**

*✓ Халыҡтың рухы ситтән хәүеф тыуғанда ныҡый. Икенсе бер шарт - халыҡтың менталитетына тәбиғәт шарттары көслө йоғонто яһай. Башҡорттарҙың йөрәгендә Урал, тыуған ил-ере ята.*



# МУЗЕЙҘАРЫБЫҘ...

## халҡыбыҙҙың тарихи-мәҙәни мираҫын һаҡлай

**Бөгөн археологтар - "Ирәндек" тарихи-археологик һәм ландшафт музей-ҡурсаулығы мөдире Рәмил НАСРЕТДИНОВ һәм Күсмә халыҡтарҙың Евразия музейы хеҙмәткәре Илшат ДӘҮЛӘТБАЕВ менән әңгәмә ҡорабыҙ.**

**▸ Әңгәмәбеҙ башында Нияз Абдулхаҡ улы Мәжитовты иҫкә алып китәйек. Ул олуғ тарихсы, билдәле археолог. Археология боронғо тарихты өйрәнә, ә Н.А. Мәжитовты Башҡортостан археологияһына нигеҙ һалыусы, тип ышаныслы рәүештә әйтергә була...**

**Р. Насретдинов.** Бына беҙгә археологик разведкаларға, экспедицияларға күп йөрөргә тура килә. Һәр географик урынды тикшереү өсөн иң элгәре белешмәләр кәрәк. Бындай белешмәләр Н.А. Мәжитов етәкселегендә төҙөлгән. Уйлауымса, ул беҙҙең барса археологтарыбыҙҙан да алдынғыраҡ булды, гелән алғараҡ ҡарап йәшәне һәм эшләне. Уның етәкселегендә бер миҙгелдә генә 10 - 20 ҡомартҡы ҡаҙып асыла торғайны. Ул экспедицияларҙа ла гел алданыраҡ бара. Уның менән эшләгән олораҡ археологтар әйтә торғайны: беҙ бер тауҙы артылғансы, ул инде икенсе тауҙың башын ҡарап йөрөй. Нияз ағайыбыҙҙың Башҡортостан археологияһына индергән өлөшө бик ҙур, шуға күрә уның иҫтәлегенә беҙҙә Н.А. Мәжитов исемендәге археологик экспедиция эшләй башланы. Унда М. Аҡмулла исемендәге педуниверситет, Өфө фән һәм технологиялар университеты тарихсылары, ирекмәндәр ҡатнаша.

**▸ Нияз Мәжитов Башҡортостан тарихи археологияһын донъя кимәленә күтәрҙе. Геродотты тарих атаһы тип атағандар, ә Нияз Мәжитовты Башҡортостан тарихының атаһы, тип нарыҡлаһаҡ та, һис артыҡ булмаҫ ул...**

**И. Дәүләтбаев.** Рәмил Ринат улына өҫтәп, бына ни тиер инем. Н.А. Мәжитов Башҡортостан археологияһының атаһы. Нияз Абдулхаҡ улы етәкселегендә экспедицияларҙа студент сағымдан эшсе булып йөрөп, уның отчеттары менән танышып, ғилми эштәрен уҡып, ул Башҡортостан археологияһының фәнни нигеҙен булдырҙы, тип һығымта яһай алам. Хәҙер ошо оло ғалимыбыҙ хөрмәтенә халыҡ-ара Мәжитов уҡыуҙары уҙғарыла, экспедициялар ойошторола.

**Р. Насретдинов.** Н.А. Мәжитов башҡорт халҡының этногенезы проблемаһына ҙур иғтибар бүлде. Башҡортостан территорияһында бронза быуатынан бирле ҡалған ҡомартҡылар байтаҡ, шулай уҡ иртә урта быуаттар менән бәйле мәҙәниәттәр ҙә өйрәнелде, ошо проблемаларҙы тикшереүҙә олуғ ғалимыбыҙҙың роле ҙур булды.

**▸ Нияз Абдулхаҡ улы Көньяҡ Урал мәҙәниәттәрен өйрәнгәндә киң билдәле бер артефактҡа иғтибар итә. Ул да булһа, ҡатын-ҡыҙ биҙәүестәре, алҡалар, сулпылар, түшелдеректәр. Шуныһы мөһим: бындай биҙәүестәр, артыҡ ныҡ үҙгәрмәйенсә, хәҙерге заманға тиклем һаҡланып ҡалған. Бында бронза быуаты мәҙәниәттәре менән сағыштырыу бик урынлы тип табылмаһа ла, иртә урта быуаттар мәҙәниәттәре һәм халҡыбыҙҙың (шулай уҡ Көньяҡ Уралдың һәм Волга буйының башҡа халыҡтарының да) хәҙерге мәҙәниәттәре менән билдәле бер бәйләнеш булыуын инҡар итеп булмай.**



***Халҡыбыҙҙың ырыу-ҡәбилә составы ҡатмарлы. Бына Өфө-II ҡаласығында турбаҫлы мәҙәниәтенә ҡараған кешеләр йәшәгән. Әлбиттә, уларҙы ултыраҡ тормошта көн иткән, тип әйтеп була.Ырыу-ҡәбиләләрҙең күсеп йөрөүе йәшәгән урындары, географияһы менән бәйле. Далала йәшәүселәрҙең үҙҙәренә генә хас хужалыҡ итеү ысулдары формалаша. Унда ҡоролоҡ башлана икән, улар ямғырлы, дымлы ерҙәргә күсеп китә. Ә бына таулы-урманлы зонала көн иткән башҡорттар күсеп йөрөмәгән. Шулай булғас, был проблемаға ҡараш бер яҡлы ғына булыуы мөмкин түгел.***

**Р. Насретдинов.** Халҡыбыҙҙың байтаҡ өлөшө Көньяҡ Уралда формалаша, шуға күрә ул урындағы боронғо мәҙәниәттәрҙе үҙ эсенә алған, быуаттар дауамында һеңдерә барған. Бына беҙ райондарға сығып йөрөйбөҙ, халыҡ менән аралашабыҙ. Бөтөнөһө лә үҙҙәрен башҡорт тип атай, әммә йөҙҙәре күп төрлө. Тимәк, халҡыбыҙҙың төрлө ырыу-ҡәбиләләрҙән формалашыуы ысынбарлыҡҡа тап килә.

**▸ Беҙҙә билдәле генә ғалимдар башҡорттарҙың күсмә халыҡ булмауы, күсмә тормошта йәшәмәүе хаҡында яҙа. Ваҡытлы матбуғатта ла "Беҙ күскенселәр түгел!" тип яр һалыусылар етерлек. Шуға күрә Күсмә халыҡтарҙың Евразия музейын бөтөнләйгә ҡабул итмәүселәр ҙә бар. Һеҙ быны нисек аңлатыр инегеҙ?**

**И. Дәүләтбаев.** Алдараҡ әйткәнебеҙсә, халҡыбыҙҙың ырыу-ҡәбилә составы ҡатмарлы. Бына Өфө-II ҡаласығында турбаҫлы мәҙәниәтенә ҡараған кешеләр йәшәгән. Әлбиттә, уларҙы ултыраҡ тормошта көн иткән, тип әйтеп була. Кушнаренко мәҙәниәтен алһаҡ, улар ярым күсмә тормошта йәшәгән, Көньяҡ Уралға ҡасандыр күсеп килгәндәр. Ырыу-ҡәбиләләрҙең күсеп йөрөүе йәшәгән урындары, географияһы менән бәйле. Далала йәшәүселәрҙең үҙҙәренә генә хас хужалыҡ итеү ысулдары формалаша. Унда ҡоролоҡ башлана икән, улар ямғырлы, дымлы ерҙәргә күсеп китә. Ә бына таулы-урманлы зонала көн иткән башҡорттар күсеп йөрөмәгән. Шулай булғас, был проблемаға ҡараш бер яҡлы ғына булыуы мөмкин түгел.

**▸ Көньяҡ Уралды боронғо цивилизация үҙәктәренең береһе тип иҫәпләргә мөмкинме?**

**И. Дәүләтбаев.** Цивилизация үҙәге тип әйтеү арттырыу булыр. Әммә таш быуатында бында кешеләр йәшәгәнен беләбеҙ, шул уҡ Шүлгәнташ мәмерйәһендәге һүрәттәр ошо хаҡта һөйләй. Ә бына бронза быуаты дәүерендә бында ысынлап та үҙенсәлекле цивилизация формалаша. Шул уҡ Арҡайым тибындағы ҡаласыҡтар барлыҡҡа килә, улар Көньяҡ Уралдан Урта Азияға тиклем ҙур зонаны биләй. Ат ҡулға эйәләштерелә, ат арбаһы яһала.

**▸ Н.А. Мәжитов ҡырағай атты эйәләштереүҙе цивилизацион феномен тип атай.**

**Р. Насретдинов**. Ә ҡырағай аттар урман-тауҙарҙа түгел, далаларҙа йәшәй, шунда үрсей. Тимәк, аттарҙы эйәләштереү процесы ла далаларҙа башланған, һуңынан эйәр яһаусы оҫталар, йүгән, теҙген, өҙәңге, ауыҙлыҡ кеүек кәрәк-яраҡты, арба, дуға, ҡамыт, ыңғырсаҡ етештереүселәр ҙә дала кешеләре булғандыр, тип һығымта эшләргә була.

**И. Дәүләтбаев.** Эйе, аттарҙы кеше торағында үрсетә башлау яңы мөмкинлектәр бирә. Бейә һөтөнән ҡымыҙ әсетелә, ит тә етерлек була, аттарҙа һыбай йөрөй башлау, арбаға егеү яңы географик арауыҡтарҙы үҙләштереү мөмкинлеген бирә. Дала цивилизациялары үҙенсәлекле, Башҡортостандың байтаҡ өлөшө шулай уҡ дала зонаһына инә. Күсмә халыҡтарҙың Евразия музейында ана шул дала цивилизациялары проблемалары өйрәнеләсәк.

**Р. Насретдинов.** Көньяҡ Урал яғын Евразия йөрәге тип тә атайҙар. Башҡортостанда Ырымбур, Силәбе өлкәләренә, Пермь крайына, Татарстанға ҡарағанда ҡомартҡылар байтаҡҡа күберәк - 4 мең тирәһе ҡомартҡы билдәле. Ни өсөн шулай? Көньяҡ Уралда ҡаҙылма байлыҡтар күп, ҙур ғына йылғалар булыуы сауҙа алып барыуҙы еңелләштерә. Йәнә малсылыҡ өсөн шарттар уңайлы. Шулай булғас, был яҡтарға күсеп килеүсе ырыу-ҡәбиләләр ҙә байтаҡ булған. Тап шуға күрә беҙҙең Урал яғын цивилизация уртаһы тип атап була.

**▸ Н.А. Мәжитов бронза быуатында йәшәгән кешеләрҙең үҙҙәрен нисек атауҙарын белеү мөмкин түгел, тип яҙа. Ә милләт нисек ойоша һуң, бының өсөн ниндәй сәйәси шарттар булырға тейеш?**

**И. Дәүләтбаев.** Нияз ағай Мәжитов иртә урта быуаттар мәҙәниәттәрен ентекләп тикшерҙе. Турбаҫлы, бахмут, кушнаренко, ҡара яҡуп мәҙәниәттәре йәшәгән һәм ҡушылған географик зонала бер аҙ һуңыраҡ башҡорт атамаһы ла пәйҙә була. Әлбиттә, төрлө мәҙәниәттәргә ҡараған ҡәүемдәр матди һәм мәҙәни яҡтан бер-береһенән айырылып тора. Улар берләшһен өсөн билдәле бер шарттар тыуыуы фарыз. Милләт төшөнсәһе кешеләрҙең аңында формалаша, ул рухи күренеш. Кешеләрҙең төҫ-ҡиәфәттәре төрлөсә булһа ла, ҡан-ҡәрҙәшлектәре булмаған хәлдә лә, улар бер милләткә ойоша ала. Тарихта шундай ситуациялар килеп сыға, ырыу-ҡәбиләләрҙең берләшеүе генә уларҙы ҡол ителеүҙән йә иһә дошмандары тарафынан ҡырылып бөтөүҙән ҡотҡара.

**▸ Милләт - ул рухи берләшмә, уны фәлсәфәүи феномен тип тә нарыҡларға була. Башҡорт рухы хаҡында ни әйтер инегеҙ? Башҡорт халҡының тарихы һәм рухи берлеге араһында бәйләнеш бармы?**

**И. Дәүләтбаев.** Бер милләт булып ойошоу өсөн халыҡтың берҙәмлеге булыуы фарыз. Бындай берҙәмлек, башлыса, ситтән баҫымдың көсәйеүе, халыҡтың йәшәйешенә хәүеф янауы шарттарында барлыҡҡа килә. Көньяҡ Урал - бай төбәк, уның байлыҡтарына ҡанығыусылар етерлек була. Тыуған ил-еренде дошмандарҙан һаҡлай алырға кәрәк. Берләшеү - бергә ойошҡан ҡәүемдәрҙең һаҡланыу реакцияһы ул, был ижтимағи күренеш. Хәүеф янағанда хатта яҡында йәшәгән башҡа халыҡ вәкилдәре лә ярҙамға ашыға. Беҙҙә йәшәгән башҡа халыҡтар ҙа башҡорт милләте менән быуаттар дауамында аралашып көн иткән. Шул уҡ Башҡортостан рустары, мәҫәлән, үҙҙәрен, образлы итеп әйткәндә, аҙмы-күпме башҡорт итеп иҫәпләй, сөнки улар беҙҙең мәҙәниәтебеҙҙе оҡшата, һирәгерәк булһа ла башҡортса белгән рустар бар.

**Р. Насретдинов.** Илшат әйткәнсә, халыҡтың рухы ситтән хәүеф тыуғанда ныҡый. Икенсе бер шарт - халыҡтың менталитетына тәбиғәт шарттары көслө йоғонто яһай. Башҡорттарҙың йөрәгендә Урал, тыуған ил-ере ята. Башҡорт фольклорында тыуған тәбиғәт образы беренсе урында тора, тип әйтһәк тә була. Юҡҡа ғына шулай тип йырламаған халҡыбыҙ: "Түккән ҡанын, биргән йәнен, һис бирмәгән башҡорт Уралын".

**▸ Халҡыбыҙ XVI быуат урталарында Рус дәүләтенә ҡаршы сыҡмай, килешеүҙәр нигеҙендә уның составына инә. Башҡорт тарихы ҡатмарлы, ҙур Рәсәй иле менән дә аралар үтә боҙолошоп китеп, халҡыбыҙ ихтилалдарға сыҡҡан. Шул уҡ ваҡытта Себер ханлығы, ҡаҙаҡтар, ҡалмыҡтар рус ерҙәренә байтаҡ йылдар буйына һөжүм итеп тора...**

**И. Дәүләтбаев.** Тарихи ваҡиғаларҙың объектив сәбәптәре була. Алтын Урҙа тарҡалған осорҙа башҡорт ерҙәре бер нисә өлөшкә бүленә - Себер, Ҡаҙан, Нуғай ханлыҡтарында башҡорттарға тормош көтөү еңел булмай. Унан башҡа ҡалмыҡтар йыш бимазалай, ҡаҙаҡтар башҡорт ерҙәренә барымтаға йөрөй. Көсһөҙлөк замандарында кем менән булһа ла сәйәси союзға инеү халыҡты һаҡлау өсөн иң ҡулай сара икәнен аңлай ата-бабалар. Беҙҙең ата-бабаларыбыҙ уйлап эш иткән, Рус дәүләтенән яҡлау тапҡан, ул үҙенә күрә арбитр ролен башҡарған.

**▸ Йәнә бер һорау. Ә.-З. Вәлиди Туған яҙғанса, башҡорттар һис бер йыһангирға баш эймәҫ, ҡурҡыу белмәҫ ғәййәр бер халыҡ була. Яугирлыҡ - башҡорт ҡанында. Ә бына X быуат башында хәлиф Мөҡтәдирҙең илселеге Булғарға юлланған саҡта илселек сәркәтибе Ибн Фаҙлан башҡорттарҙан ныҡ ҡурҡыуҙары хаҡында яҙа. Йәнәһе, улар сит ил кешеләрен илдәренә индермәй, үлтереп китә. Был ул заман башҡорттарының бер дипломатик алымы**

***✓ Башҡорт кешеһенең 1000-әр баш аты булыуы теркәлгән. Хәҙерге ауыл кешеһе көс-хәл менән бер нисә баш һыйыр йә иһә ат аҫрап көн итә. Шунан, күп атлы ата-бабаларыбыҙ күскенсе булған, тип оялыу, кәмһенеү урынлымы икән?***

**булманымы икән? Йә иһә ҡурҡытыу юлы менән үҙ илендә һаҡлаумы?**

**Р. Насретдинов.** Беҙ, тарихсылар, сығанаҡтарға тәнҡит күҙлегенән ҡарайбыҙ. Уларҙа яҙылғандарҙың барыһы ла ысынбарлыҡҡа тура килмәй. Ғәрәп сәйәхәтселәре Төньяҡ Евразия халыҡтарына кәмһетеп ҡарай, сөнки улар үҙҙәре уҡымышлы кешеләр, мосолмандар, ҙур мегаполистарҙа йәшәйҙәр. Беҙҙең яҡтағы халыҡтарҙы улар ҡырағайыраҡ итеп һүрәтләй, сөнки бында башлыса мәжүсилек хөкөм һөргән була.

**Ибн Фаҙлан башҡорттарҙың 11 аллаһы бар тип яҙа: ел илаһы, урман илаһы, һыу илаһы һ.б. Иң ҙур илаһ Күктә йәшәй. Быны нисек аңлатырға була?**

**Р. Насретдинов.** Был Исламға тиклемге осорға ҡарай, мәжүсилек башҡорттар араһында ла киң таралған була.

**И. Дәүләтбаев.** Ибн Фаҙлан алла тип әйткән нәмәләр - улар төрлө күренеш-фөләндең эйәләре. Башҡорттар үҙҙәре уларҙы илаһ тип атамаған. Мәҫәлән, өй эйәһе, һыу эйәһе, ямғыр эйәһе һ.б. Әлбиттә, ошондай эйәләрҙең кеше аңында булыуы мәжүсилек менән бәйле. Башҡорттарҙың бер генә аллаһы була - ул Күк аллаһы, йәғни Тәңре.

**Тарихи Башҡорт иленең Урта Азия менән бәйләнештәре хаҡында ла әйтеп үтһәгеҙ ине.**

**Р. Насретдинов.** Көньяҡ Урал - Урта Азияла Төркөстан тип йөрөтөлгән территорияның төньяҡ өлөшөн биләй. Урта быуаттарҙағы Көньяҡ Урал - Урта Азия бәйләнештәре хаҡында Н.А. Мәжитов ентекле тикшеренеүҙәр уҙғарған. Быны Урта Азия ҡомартҡыларына хас булған артефакттарҙың Башҡортостанда ла табылыуы раҫлай. Сауҙа итеү, каруан юлдары була, күрәһең, Урта Азия сауҙагәрҙәре лә Көньяҡ Уралға үҙ тауарҙарын килтерә алған. Яңыраҡ Подымалово ауылы янында урта быуаттар ҡомартҡыһы асылды, бында Азияла киң таралған Кашин технологияһын ҡулланып эшләнгән көршәктәр күп табылды, бында көршәк яһау кругтары ла булған. Шулай уҡ яҫы төплө һауыт-һаба ла эшләнгән, мәҫәлән, былау һалып биреү өсөн. Урта Азияла быңдай һөнәрселек юғарыраҡ кимәлдә була, ундағы сауҙагәрҙәр Ҡытай менән дә алыш-биреш итә. Көршәк - көнкүрештә даими ҡулланыла торған бик кәрәкле әйбер, шуның өсөн уны етештереү тиҙ үҫешә. Ҡомартҡыларҙа иң күп табылған артефакттар - керамика киҫәктәре. Уларҙы сағыштырып, анализлап, ниндәй ҡәбиләләрҙең ҡайҙа йәшәгәндәрен, көршәктәрҙең ҡайҙа эшләнгәндәрен дә белеп була.

**Ә хәҙер Күсмә халыҡтарҙың Евразия музейы, уның әһәмиәте тураһында ла бер нисә һүҙ.**

**И. Дәүләтбаев.** Евразия музейы үҙенең хаҡлы урынында тора. Беҙҙең башҡорт тарихын да дала цивилизациялары призмаһы аша күрһәтергә кәрәк. Беҙҙең Тарихи Башҡортостан, Көньяҡ Урал далалар цивилизацияһының төньяҡ өлөшөн биләй, һәм бында иртә урта быуаттарҙан бирле Төркөстан ҡәүемдәре килеп-китеп йөрөй, уларҙың ҡайһылары Уралға ерегеп китеп, бында төпләнә, урындағы халыҡ менән бәйләнешкә инә, туғанлаша. Далалар цивилизацияһы ғәйәт ҙур территорияны биләп тора: Дунайҙағы Паннониянан башлап Ҡытайҙың Һары диңгеҙенә тиклемге ерҙәрҙә күсмә ҡәүемдәр көн итә. Урта быуаттарҙа ла, унан алдараҡ та Көньяҡ Урал халыҡтары дала халыҡтары менән тығыҙ бәйләнештә була. Тап ошо территорияла Евразия этностары формалаша башлай. Икенсенән, тарихи дөрөҫлөк һәм ғәҙеллеккә кире ҡайтарыу бурысы ла бар.

1944 йылда Совет Хөкүмәте "Алтын Урҙа мираҫын һәм татарҙар тарихын өйрәнеүҙе тыйыу тураһында" тип аталған ҡарар ҡабул итә. Бында татарҙар тип төркиҙәрҙең дөйөмләштереп әйтелгән атамаһы күҙ уңында тотола. Һөҙөмтәлә Алтын Урҙа осорон систематик рәүештә ғилми яҡтан тикшереү мөмкин булмай. Әлбиттә, археологтар ҡаҙыныу эштәрен алып бара, әммә ошо дәүер әлегә тиклем тейешле кимәлдә тикшерелмәне, был тарихтың аҡ таптары байтаҡ әле. Ошо йәһәттән Ҡаҙағстан, Әзербайжан тарихсылары алда бара, беҙгә лә, далалар цивилизацияһының айырылғыһыҙ бер өлөшө булараҡ, ошо юҫыҡтағы ғилми тикшеренеүҙәребеҙҙе әүҙемләштереү фарыз. Беҙҙең музейыбыҙҙа төҙөлөш барған саҡ, әлегә визит үҙәге генә асылды. Шулай ҙа беҙгә булышлыҡ итергә байтаҡ ҡына ерҙәрҙән ғалимдар килеп йөрөй.

**Тимәк, Күсмә халыҡтарҙың Евразия музейы аша халҡыбыҙ тарихын киңерәк ареалда танытыу, ниндәйҙер ғилми табыш-асыштарға юлығыу мөмкинлеге асыла. Төрки-монгол халыҡтары булышлығы менән беҙ халҡыбыҙҙы, Башҡортостан Республикаһын күтәрмәләйбеҙ. Был да музей алдында торған ҙур маҡсат тип әйтергә булалыр?**

**Р. Насретдинов.** Беҙҙә "күсмә халыҡ" терминын әллә нисек ҡабул итәләр, әллә ояլалар, әллә кәмһенәләр. Һәр бер цивилизация халыҡтан башлана, күсмә халыҡтарҙың да донъя цивилизацияһына индергән өлөшө баһалап бөткөһөҙ. Тап күсмә халыҡтар киң далаларҙа мал көтөп, ҡырағай аттарҙы эйәләштереп, арба, эйәр, ҡамыт, дуға, өҙәңге, йүгән, теҙген һәм башҡа шундай аттарҙы транспорт сараһы итеп ҡулланыу мөмкинлеген биргән әйберҙәрҙе уйлап таба, күпләп етештерә башлай. Унан һуң, ҡаласыҡтар төҙәп, ярым ултыраҡ тормошҡа күсеү өсөн мөлкәт, билдәле кимәлдә байлыҡ, аҡса талап ителә. Быларҙы күсмә халыҡтар үҙҙәре туплай алған. Әүәлге тарихи сығанаҡтарҙа ҡайһы бер башҡорт кешеһенең 1000-әр баш аты булыуы теркәлгән. Хәҙерге ауыл кешеһе көс-хәл менән бер нисә баш һыйыр йә иһә ат аҫрап көн итә. Шунан, күп атлы ата-бабаларыбыҙ күскенсе булған, тип оялыу, кәмһенеү урынлымы икән? Ә мең баш атты урманлы-таулы ерҙәрҙә ҡарап тотоу мөмкин түгел, йылҡы өйөрҙәрен шул тиклем күләмдә тик далала ғына үрсетеп була.

**И. Дәүләтбаев.** Тарихи күҙлектән фекер йөрөткәндә, халҡыбыҙҙа бик күптән түгел кәмһенеү комплексы барлыҡҡа килгән. "Күсмә халыҡ" тигәндән оялыу - шул уҡ кәмһенеү комплексынан хасил. Шундай тағы ла бер комплекс бар - башҡорттарҙың, ҡаҙаҡтарҙың, ҡырғыҙҙарҙың бер өлөшө монголоид сифаттарынан - ҡарағусҡыл йөҙлө, ҡыҫыҡ күҙле булыуҙарынан да кәмһенеп, тарихта булмаған нәмәләрҙе уйлап сығара башлай: йәнәһе, уларҙың боронғо ата-бабалары аҡ йөҙлө, зәңгәр күҙлө, һары сәсле булған, имеш. Ә билдәле башҡорт антропологы Ринат ағай Йосопов башҡорттар араһында бер юлы 5 раса тибы булыуын ғилми яҡтан дәлилләгәйне бит. Ғөмүмән, башҡорттарҙың антропологик сифаттары күп төрлө.

**Йәнә бер һорау. Беҙ, башҡорттар, йыйылма халыҡ. Бынан да кәмһенергә буламы икән?**

**Р. Насретдинов.** Башҡорт халҡының этник составында 40-тан ашыу ырыу бар икәне билдәле. Мин шул тиклем күп этник ҡатламлы башҡа бер халыҡты ла белмәйем. Халҡыбыҙҙың тарихи хәтере бар, ул быуындан-быуынға тапшырыла килгән. Фольклорҙа ла сағылыш тапҡан



ул: әйләләр Урта Азиянан, Амударъя-Һырдаръя буйҙарынан килгән, Алтай тауҙарынан күсеп килгән ырыуҙар ҙа була, билдәле бер тарихи дәүерҙәрҙә Каспий һәм Ҡара диңгеҙ буйҙарын төйәк иткән башҡорт ҡәүемдәре булыуы билдәле.

Боронғо төркиҙәрҙең Алтай сығышлы булыуы хаҡында мәғлүмәт бар. Алтайлыларҙың төрки халыҡтарына йоғонтоһо урта быуаттарҙа ла көслө була.

**И. Дәүләтбаев.** Һәр ырыуҙың үҙ тарихы бар. Ҡыпсаҡтар ҡасандыр Көнсығыш Европала йәшәгән, үҫергәндәрҙе Арал диңгеҙе буйҙарынан килгән икән тип тә һөйләйҙәр.

**Р. Насретдинов.** Көнбайыш башҡорттары араһында булғар сығышлылар ҙа бар. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, улар бөгөн булғарлығын да, башҡортлоғон да күптән онотоп бөткән.

**Евразия киңлектәрендә байтаҡ ҡына төрки халыҡтары йәшәй, дөйөм алғанда, телдәр берлеге (килеп сығышы буйынса) бар, фольклор мотивтары бик оҡшаш. Беҙҙең Евразия музейы туғандаш төрки, ғөмүмән, Евразия халыҡтарын яҡынлаштырыуға, хеҙмәттәшлекте үҫтереүгә булышлыҡ итәсәк, тип ышаныслы рәүештә һығымта эшләргә ерлек бармы?**

**Р. Насретдинов.** Музейҙың визит үҙәге асылғас, беҙгә төрлө яҡтарҙан, төрлө илдәрҙән ҡунаҡтар килә башланы: Ҡаҙағстандан, Әзербайжандан, Ҡырғыҙстандан, Монголиянан, Саха-Яҡут республикаһынан. Ике этносимпозиум уҙғарылды. Беҙгә килгән тарихсылар үҙҙәренең тәжрибәһе менән уртаҡлаша, ғилми хеҙмәттәре менән таныштыра. Ирандан рәссамдар килгәйне, улар ғалимдар һөйләгәндәргә таянып, картиналар төшөрҙө һәм музейға бүләк итте. Киләсәктә музейҙың картина галереяһы буласаҡ. Визит үҙәгенә инеү менән эйәрҙәргә тап булаһың. Уларҙы беҙгә Ҡаҙағстан, Үзбәкстан, Ҡырғыҙстан, Монголия вәкилдәре алып килгәйне. Бына ошо эйәрҙәрҙе беҙ Евразия халыҡтары берлегенең символы итеп күрәбеҙ.

***Һәр бер цивилизация халыҡтан башлана, күсмә халыҡтарҙың да донъя цивилизацияһына индергән өлөшө баһалап бөткөһөҙ. Тап күсмә халыҡтар киң далаларҙа мал көтөп, ҡырағай аттарҙы эйәләштереп, арба, эйәр, ҡамыт, дуға, өҙәңге, йүгән, теҙген һәм башҡа шундай аттарҙы транспорт сараһы итеп ҡулланыу мөмкинлеген биргән әйберҙәрҙе уйлап таба, күпләп етештерә башлай. Унан һуң, ҡаласыҡтар төҙәп, ярым ултыраҡ тормошҡа күсеү өсөн мөлкәт, билдәле кимәлдә байлыҡ, аҡса талап ителә. Быларҙы күсмә халыҡтар үҙҙәре туплай алған.***

**И. Дәүләтбаев.** Музей төрлө илдәрҙән килгән ғалимдарҙы таныштыра, йәнле аралашыу бара, ә был ғилми бәйләнештәрҙе үҫтереү йәһәтенән бик файҙалы. Унан һуң, Евразия халыҡтарының тарихын ентекләп өйрәнеү өсөн яңы мөмкинлектәр асыла.

**Артабан ғилми форумдар планлаштырыламы?**

**Р. Насретдинов.** Мәжитов уҡыуҙары дауам итәсәк. Быйыл беҙ Ҡырғыҙстанда Мәжитов исемендәге археологик экспедицияла булып ҡайттыҡ. Унда Дәүләт Эрмитажы вәкилдәре, Ҡырғыҙстан Фән академияһы ғалимдары ла ҡатнашты. Беҙ археологияла үҙебеҙ ҡулланған алымдарҙы күрһәттек, ҡырғыҙ коллегаларыбыҙҙы ошо алымдарҙы ҡулланырға өйрәттек. Ваҡытында Нияз Абдулхаҡ улы ла Ҡырғыҙстанда экспедицияла ҡатнашҡан, беҙгә фотоһүрәттәрен күрһәттеләр. Борондан килгән бәйләнештәр дауам итер, тип ышанабыҙ. Бына Подымалово ҡомартҡыһында табылған материалдар урта быуаттарҙа Көньяҡ Урал һәм Ебәк юлы илдәре, Урта Азия менән тығыҙ сауҙа бәйләнештәре булыуына дәлил.

Әйткәндәй, ҡырғыҙҙарҙың атаҡлы "Манас" эпосының иң тулы вариантын оҙаҡ йылдар Ҡырғыҙстанда йәшәгән бер зыялы мишәр (тыумышы менән Салауат районының Нәсибаш ауылынан) яҙып ала. Ул - Ҡәйүм Ғайнан улы Мифтахов, иң емешле эшләгән күренекле төркиәтсе-ғалимдарҙың береһе. Ҡ.Ғ. Мифтахов алты телдә иркен аралашҡан. Донъя мәҙәниәте шедевры булған ҡырғыҙ халҡының "Манас" эпосының поэтик текстарын йыйыу һәм тәртипкә килтереүгә бөтә ғүмерен бағышлаған. Ошо ғалим йыйған баҫма - 788 бит күләмендәге "Манас" эпосы өлгөләренең төп нөсхәһе Ҡырғыҙстан Республикаһы баш ҡалаһы Бишкәктә Фәндәр Академияһының Тел һәм әҙәбиәт институтында һаҡлана. Ғалим ҡырғыҙ фольклоры, тарихы һәм этнографияһы буйынса 1 000 биттән артыҡ күләмдә мәғлүмәттәр йыйып баҫтыра.

**И. Дәүләтбаев.** Ҡырғыҙҙар үҙҙәре лә әйтә, башҡорттар электән Ҡырғыҙстанға килеп йөрөгән, күп нәмәгә өйрәткән, тәжрибәләре менән бүлешкән, тип. Унан һуң, башҡорттарҙың ырыуҙар номенклатураһында ҡырғыҙ ырыуы булыуы ике халыҡ араһындағы бик күптәнге бәйләнештәргә дәлил ул.

**Башҡортостанда музейҙар күп, дәүләт музейҙары ла, шәхси музейҙар ҙа бар. Әңгәмәбеҙҙе тамамлап, хәҙерге заман музейҙарының әһәмиәте хаҡында әйтеп үтһәгеҙ ине.**

**Р. Насретдинов.** Тәүҙә Ҡырғыҙстанды телгә алайым әле. Ҡырғыҙҙарҙың үҙҙәренең тарихи-мәҙәни мираҫы ҙур түгел. Әммә төрлө тарихи осорҙарҙа бында сактар, скифтар, һундар, караханидтар, тимуридтар йәшәгән. Улар ошо халыҡтарҙың тарихи мираҫын өйрәнә, музей комплекстары юҡҡа иҫәп. Мин Башҡортостан музей комплекстары, Милли музей, шул уҡ "Шүлгәнташ" комплексы, төҙөлөп ятҡан Евразия музейы тураһында һөйләгәндә һоҡланыу белдереп тә, көйөнөп тә ултыралар, үҙҙәрендә ошондай кимәлдәге музейҙары булмауына. Беҙҙең музейҙарыбыҙ халҡыбыҙҙың мәҙәни мираҫын, тарихын һаҡлау сараһы. Башҡортостанда 4 000 тарихи-мәҙәни ҡомартҡы бар, был беҙҙең ошо өлкәлә үтә ҙур потенциалыбыҙ булыуына дәлил.

**И. Дәүләтбаев.** Беҙҙең музейҙың визит үҙәге эшләй башлағанға 3-4 ай ғына. Шул арала бында 70 - 80 меңләп кеше килеп ҡайтты, тарих буйынса күп мәғлүмәттәр алды. Музейҙар финанслауҙы ла талап итә, әммә улар киләсәгебеҙ өсөн кәрәк. Музейҙарыбыҙ ағартыу, белем-тәрбиә биреү инструменттарийы булараҡ та ҙур әһәмиәткә эйә.

**Вәлиәхмәт БӘҘРЕТДИНОВ**
**әңгәмәләште.**

***✓ Сталин үлеп киткәс, Бибиәсмә инәйең: "Яҡын-тирәләге ауылдар буйлап эшлекле кешеләрҙе теүәлләп сыҡтым, ил башлығы булып Мәскәүҙә Ниғәмәт кенә эшләрлек, башҡа кешене күрмәйем!" - тип әйткән, ти.***






Ишеткән айырым һүҙҙәрҙе генә аңлайым, ә бына улар бергә ҡушылһа, башым бутала ла китә, шуға төшөнгәнгә һалышып, шымып ҡалдым. Әсәйем көрһөнөп ҡуйҙы:

- Улым, һинең бит атайың бар...

- Атайым?

- Ниңә улай гәжәпләнеп киттең әле?

- Буһа, ҡайҙа у?

- Бынан егерме саҡрым алыҫлыҡтағы Ҡәнзәфәр ауылында.

- Алыҫ ара түгел, ҡасып-боҫоп яткансы, быҒаса килеп күренһә, беҙҙең хәлде белһә, һинең хәстәреңде хәл итһә, минең хәсрәтте таратһа, була инде.

- Нишләп күренмәй, тиһәң дә, килде ул яңыраҡ, ҡатын-ҡыҙҙар байрамы алдынан беҙҙең ауылға йомош менән һуғылды. Һиңә ирҙәр көнөнә тип, шунан тыуған көнөңә бағышлап, еңһеҙ аҡ күлдәк, миңә байрам бүләге итеп кешмир яулыҡ ҡалдырҙы...

- Яулыҡ сағыу буһа, ябынһансы.

- Ауыл ҡатындары әллә нимә һөйләп сығарырҙар тағы, тип һандыҡ төбөнә һалдым да ҡуйҙым.

- У саҡта ништәп миңә тигән күлдәкте күрһәтмәнең?

- Йәйге кейем булғанлыҡтан, көндәр йылынғас кейҙерермен, тигәйнем дә, тағы һин бит төпсөнөргә, төбөнә төшөргә әүәҫһең.

- Бапаҡ ише ҡасып-боҫоп килгән атай атай бумай!

- Ҡасманы ла, боҫманы ла шыпа, эш буйынса һуҡ ғына килгәнлектән, йоҡлаған сағыңда һинең янына ултырып, әллә күпме башыңдан һыйпаны.

- Һиҙгәйнем дә шул, ул һин икән тип, күҙҙәремде асмай, йоҡомһорап яткайным, ят еҫ тә танауыма бәрелгәйне.

- Ана бит, атайыңды күрмәһәң дә, һыйпауын шәйләп, еҫен һиҙеп ятканһың.

- Атайҙарҙың еҫе башҡасараҡ була икән у...

- Ниндәйерәк инде?

- Әсәйҙәрҙеке наҙлыраҡ, яҙғы ҡояштай йылыраҡ, атайҙарҙыҡы ҡышҡы селлә һалҡынылай ҡатыраҡ. Миңә шул атай еҫе етмәгәнгә йомшаҡмын, ҡыйпысыҡ, ҡылтым ҡыҙҙар һымаҡмын.

- Ҡалайтайым, хислеһең шул бигерәк, һиҙгерһең, бер ҡатлыһың.

- Атайым сит-ят ауылда ни эшләй, ҡайтһын беҙгә?

- Уның унда икенсе ғаиләһе, балалары бар.

- Улай ярамайы инде у, ә?

- Ярайҙыр күрәһең...

- Баланың бер атаһы, бер әсәһе буһын, улар гел бергә йәшәһен!

- Шулай тейеш тә бит, барыһына ла ҡәһәрле һуғыш гәйепле, ике, хатта өс ҡатынлы ирҙәр күп хәҙер.

- Улайһа, минең атайһыҙ үҫеүемдә теге нимес Гитлер гәйеплеме?

- Ул һуғышта күпме ир-егет башын һалды, тотош ил емерелде, халыҡ миктәне, һаман да булһа шуның сарпыуында көн итәбеҙ. Балаларҙың үкһеҙ етем, йә ярты етем үҫеүендә яҙмыш гәйепле, балам, маңлайға яҙылған яҙмыш.

- Ә атайым төҫ-башҡа ниндәйерәк кеше?

- Атайың оҙон буйлы, мыҡты кәүҙәле кеше, төҫкә-башҡа ла һуйған да ҡаплаған һин инде! - Әсәйем ҡараңғы юкта миңә текәлгәндәй итте. - Аҡыллы етәксе, оҫта һүҙле яҡшы ойоштороусы булараҡ, беҙҙәге колхозда рәйес булып эшләне һуғыштан һуң, емерелгән калхузды аяҡҡа баҫтырҙы, район алдынғылар рәтенә сығарҙы, хәҙер әле мин әйткән ауылда силсәүит рәйесе. Коммунист булараҡ, партия ҡайҙа ҡуша, ул шунда бара. Сталин үлеп киткәс, түбәнге оста йәшәгән Бибиәсмә инәйең: "Яҡын-тирәләге ауылдар буйлап эшлекле кешеләрҙе теүәлләп сыҡтым, ил башлығы булып Мәскәүҙә Ниғәмәт кенә эшләрлек, башҡа кешене күрмәйем!" - тип әйткән, ти. Атайыңдың һыбай йөрөүе үҙе бер ҡабатланмаҫ тамаша була торғайны, эйәргә ҡойоп ҡуйғандай һылашып ултыра, ә аҫтындағы колхоз айғыры урынында бейеп, ажғырып тора. Ҡайҙа ла, хатта районда үткән йыйылыштарға ла һыбай сығып китер ине.

- Ҡәһәрле һуғыш, тинең, атайым шу ҡәһәрле һуғышта һуғышҡанмы?

- Һуғышҡан, Шайморат дивизияһында эскадрон командиры ла булған, ордены ла бар, шул орденын юғары наградалай күреп, гелән кителенә тағып йөрөнө.

- Улайһа, батыр буған?

- Әйттем дә баһа, орденды бит кем етте шуға бирмәйҙәр.

- Орденлы, маҡтаулы кеше балаһын ташлай аламы у саҡта, баланы ташлау батырлыҡмы? Ун бер бала әсәһе Мәғүҙә апайҙың "Герой-Әсә" тигән ордены бар, үҙ күҙҙәрем менән күрҙем, ҡулыма алып, тотоп та ҡараным, ә у балаларының береһен дә ситкә таратмаған, типмәгән, себештәрен ҡанаты аҫтына йыйған тауыҡтай, һәр береһен йылытып янында тота.

- Минең йылым етмәйме ни һиңә?

- Атайҙың йылыһы, уның ҡырыҫ еҫе башҡараҡтыр, моғайын, унан көсгәйрәт аңҡып торорға тейеш.

Кире урынына яткан әсәйем мине йылытырға теләгәндәй, юрғанымды төҙәтеп япты, башымдан һыйпаны.

- Тағы шуны уйлап ятам әле, әсәй, әгәр ҙурайғас мин Лидаға өйләнә ҡалһам, яҡшы булырмы икән, әллә насармы?

- Нишләп улай тип һорап ҡуйҙың әле?

- Ни тиһәң дә, ҡап яртыһы кафыр ҙаһа!

- Иң мөһиме, һәйбәт кеше булһын, ә ул итәғәтле, тыйнаҡ, әҙәпле ҡыҙ.

- Килештек улайһа, иң яйлыһы шул, ҡоҙаң менән ҡоҙағыйың күршелә генә йәшәйәсәк, ҡатнашабыҙ, унда-бында ҡунаҡҡа саҡырышабыҙ тиһәң дә. Йәнә бер ҡулай яғын әйтмәксемен... - Тыйылып ҡалдым.

- Бер башлағас әйтеп бөтөр.

- Холоҡ-фиғелдәребеҙ килешмәй Лиданы айыра ҡалһам, эрәхәт тә баһа, үҙе менән күтәреп күсергән бирнәһенән баһыу аша тырым-тырағай ырғыттың-ҡуйҙың...

- Белмәгәйнем уҫал икәнлегеңде, әйберҙәрҙе үткәндәгеләй талаҡ әйтеп быраҡтырырһыңмы?

- Ул һүҙҙе әйтергә ашығырға, ҡабаланырға ярамай һис тә, хикмәтле һүҙ ул талаҡ! Өс тапҡыр талаҡ, тип ҡыскырһаң, эш ғәләмәт ҙурға китә, бисәм кейемдәрен күтәреп, ҡайтымһаҡланып кире ҡайта ҡалһа, өр-яңынан бата уҡытыу мәшәҡәте килеп тыуа. Ә Әбдрәхим мулла бата уҡыған өсөн батмусҡа һалырға егерме биш тәңкә аҡса, шунан һимеҙҙән бер һарыҡ талап итәсәк, унһыҙ ла осто саҡ осҡа ялғап көн иткәндә өҫтәмә сығым...

- Айҙар, әйҙә, йоҡлайыҡ, йәме, һинең менән һөйләшә башлаһаң, әллә ниндәй баш ҡатырғыс миҫалдар килтереп, зиһенде бутап бөтөрәһең.

Йоҡлап киткәнгә һалышып, апаруҡ ҡына һүҙһеҙ яткас, күптән телемдә ҡыскан һорауымды бирҙем:

- Ә ул Ҡәнзәфәр ауылы ҡайһы тирәләрәк? - Һағайыулы тынлыҡ.

- Нимәгә ул һиңә?

- Былай ғына, һүҙ араһында ғына һораным.

- Беҙҙән өс саҡрымда Шәмсетдин ауылы, ары Бараҡал йылғаһына төшһәң, элекке Һыҙғы ауылының урыны, тауға үрмәләгән ат юлынан күтәрелеп, әҙерәк барһаң, Һаҡтау утары, шунан күп тә ҡалмай Ҡәнзәфәр ауылы.

- Былай, йәйәүләһәң, алыҫ ара түгел икән.

Әсәйем нишләп әйттем әле, тигән көнгә төшеп, шикле ҡарап тәҙәтте:

- Нишләп алыҫ булмаһын, алыҫ, хәҙер бит юлдар өҙөлгән ваҡыт, йәнә Бараҡал йылғаһынын боҙо китеп, яман ташҡан мәле. Ул яҡҡа юл төшөп, һуҡмаҡ һурыҡҡансы ике аҙна тирәһе үтер әле.

- Юлдар өҙөлмәй у, бер өҙөлһә, бер ялғана.

- Юлдар ялғана ла ул, аймылышҡан яҙмыштар ғына һис ҡасан бергә килеп ҡушылмай, эш бына нимәлә...

Ята торғас әүелйей төштөм, һәм йоҡо аралаш һорай ҡуйҙым:

- Таня апай һуңғы осорҙа нишләптер миңә кейәү тип өндәшмәйсе...

- Ошоғаса шуны ишетһәң, үсегә инең дә баһа, әле килеп, ни сәбәптән ормаһарҙан кейәү булғың килеп китте?

- Лида ҙурайғас, ҙур ҡалаға китеп, билдәле әртис булам, тине, нисек тә эргәбеҙҙән ебәрмәскә инде.

- Һине аңламаҫһың, мунсала уның менән йыуыныуҙан ҡырҡа баш тартҡтың, бергә йоҡларға ла саҡырмайһың хәҙер, ҡыҙҙарға һәр саҡ йылы ҡараш, иғтибар етмәй, шуға үпкәләп китәләр.

- Гел генә йылы итеп ҡарап та бумай, тормош бит у.

- Ҡуй инде, һинең тормошоңдоң аңлылыҡтарын, һөйләп килештерерлек түгел! - Әсәйем шым ғына көләп ҡуйҙы.

- Анһат һиңә, көлгән була, Лиданы нисек тә ебәрмәй тотоп ҡалғы килә. Әсәһе һымаҡ духтыр буһын, бик теләһә, уҡытыусыға уҡыһын, юҡ тигәндә фермаға һауынсы булып сығырға ла мөмкин. Һауынсы Зәлифә апай беҙ ҙурайғансы пенсияға китә бит инде, Нурислам ағай хәҙерҙән бүлексәнең управы менән һөйләшеп-килешеп ҡуйһа, мәсьәлә хәл ителде тигән һүҙ.

- Етте, йоҡла, тим, бытылдаҡ, иртәгә таң һарыһынан миңә эшкә...

Ашнаҡсы булып эшләгән әсәйемдең эше саманан ашҡан ауыр; тирә-яҡ ауылдарҙан килеп, дауаханала яткан ауырыуҙарҙы көнөнә өс тапҡыр ашатырға, һауыт-һабаларын йыуырға, тау аҫтынан көйәнтәләп һыу ташырға, трактор менән һөйрәтеп килтерелгән утынды ҡул бысҡыһы менән бысыпярып, урыҫ мейесен һүндермәҫкә бурыслы. Унан башҡа ваҡ-төйәк мәшәҡәттәре лә башынан ашҡан. Эшкә лә таң ҡараңғыһында сығып китә лә энер төшкәс, арып-талып ҡайтып инә, шуға өйҙә берҙән-бер ир кеше булараҡ, кәртә-ҡура тирәһен ҡараштырырға, ишек алдын тәртиптә тоторға тырышам. Ни тиклем генә орсоҡтай өйрәлеп, тилбер ҡыланһам да, унаһы-быныһы һиңгайы бер ҡыйшайып-салшайып бара, уларға ир ҡулым тейә, төҙәтә, әммә дөйөм хужалыҡҡа атай ҡулы, атай ҡарашы, атай хәстәре етмәй. Шулар хаҡында уйлап, уйҙарымдан уйылып, әллә күпме йоҡлап китә алмай яттым.

Гөнаһ шомлоғона ҡаршы, төшөмә янынан Хәлимә инде, ул, һимеҙ аяҡтарын тарбайтып баҫҡан да, имеш, сөйөртмәктән минең яҡҡа ҡара хәрефтәр менән "атайһыҙ" тип яҙылған таш ата. Йомро таштар маңлайыма, күкрәгемә, аяҡтарыма килеп тейеп ауырттыралар, ҡотолорға итәм дә һаҡланыр мөмкинлегем юҡ, бары устарым менән бер маңлайымды, бер түшемде, бер балтырҙарымды ҡапларға тырышам. Атылған таштарҙан ҡотолоу ҡайҙа, улар килеп тейәләр лә тотош күҙәмә "атайһыҙ" мөһөрөн баҫалар, алыр ерем юҡ, тәнемдең асыҡ ерҙәре шул ямаҡай һүҙҙәр менән сыбарланды. Ҡайҙандыр яныма Лида килеп етеп, аҡ ҡульяулығы менән бит-йөҙөмдө һөртөргә, таҙартырға итә, ҡайҙа инде, минең ыңғайға ул да тапланып, бысранып бөттө...

Уянып китеп, тороп ултырҙым, төшөмдәген өнөмдәме икән әллә, тигәндәй, ҡул һыртым менән еүешләнгән маңлайымды, тымбаҙаған биттәремде һыпырҙым. Ныҡ иртә әле, һәр хәлдә, тәҙрә өлгөһөнә таң ойотҡоһо әлегә ҡунмаған. Мейес артында өй синерткәһе соролдай, бар тереклек ял иткәндә туҡтап торһа ни булған, юҡ бит, уға кемделер өҙләкһеҙ маҙалыҫларға, ялынан ҡалдырырға кәрәк. Екһендергес тауыш ҡолаҡҡа үтеп инә. Һәрмәнеп, сатин ыштанымды, күлдәгемде табып кейеп, көнө бөркәнеп, солан тупһаһына сығып бөршәйҙем. Шуны ғына көткәндәй, аяҡтарыма Алғыр килеп һыйынды, үрелеп, биттәремдән ялап алды. "Хәйерле иртә, хәлдәрең нисек?" тип, ялбыр йөнлө баштан һыйпаным. Этем күнелле сыйнап яуап бирҙе. Эт әйәһенә оҡшай, тигәндәй, өрә, тешләшә белмәгән йыуаш эт ул Алғыр. Таң саткыһы яңы тыуаһы көндә һиҙелер-һиҙелмәҫ имшетә генә башлаған, болотһоҙ йондоҙло күктә ҡыйыҡ ай, ул тулы булмағас, тирә-яҡты һиуҙай яҡтырта алмай, әммә ҡаршы урамдағы өйҙәрҙе, яҡындағы урман шәүләһен төҫмөрләтә. Алыҫта, ауылдан ике-өс саҡрым тау аҫтынан аҡҡан, әле боҙо киткән Һаҡмар йылғаһының шауын ишеттем, уның боҙло ҡоршауынан арынып шашынған, ҡоторонған мәле, хас та йүгәнһеҙ уйнаҡлаған ҡырҡмыш тай. Йоҡоноң башы түгел, аҙағы тәмле, таң моронлағанда кешеләр генә түгел, тотош ауыл, әтәстәр, тынғыһыҙ эттәр етенсе төшөн күрә. Тынлыҡ. Өй эсендә синерткәнең тауышынан ҡолағым тонһа, ярылһа, бындағы тынлыҡтан һаңрауландым һымаҡ. Ауылға терәлеп тиерлек ҡалҡҡан ҡайын урманы яғынан иҫкән екәт ел танауыма тулышҡан бөрөләр, иреү тупраҡ еҫен килтереп бәрҙе.

**(Дауамы. Башы 41-42-се һандарҙа).**

✔ *Бәләкәй саҡта мин тик башҡортса ғына һөйләшә инем, балалар баҡсаһында, артабан ауыл мәктәбендә уҡығанда башҡортса аралашыу мөхите булманы, рус телле булып киттем.*



ИЖАДСЫҒА ӨС ҺОРАУ

**Баймаҡ районы Күлтабан ауылы ҡыҙы Азалия МӨХӘМӘТЙӘНОВАның Губкин исемендәге Рәсәй дәүләт нефть-газ университетын тамамлап, үҙаллы эш башлауына бер генә йыл. Төп эшенән тыш, ул ижад менән шөғөлләнә: башҡорт халыҡ ижадын тәрәндән өйрәнеп, уны ҡағыҙға төшөрә һәм... "Аниме, комикс" тигән терминдар менән танышһығыҙмы? Был йәш быуынға нығыраҡ билдәле. Тап ошо йәш быуын менән үҙаллы бәйләнеш урынлаштыра Азалия Ринат ҡыҙы һәм уларҙы үҙенең ижад емештәре менән социаль селтәрҙәге төркөмдәрендә таныштыра.**

# БАШҠОРТ РУХЫН...

## аниме, комикстарҙа ла сағылдырырға ине

**➔ Телеграм-каналда һинең Kanatly тип аталған үҙеңдең каналың бар. Әлбиттә, унда халҡыбыҙҙың миф-легендаларына бәйле бик ҡыҙыҡ һүрәттәр, сюжеттар менән танышырға була. Үҙеңдең эҙләнеүҙәрең, уйланыу-борсолоуҙарың менән дә ихлас бүлешәһең. Һине белмәгән кеше: "Азалия һынлы сәнғәт буйынса уҡыған һәм шул өлкәлә эшләй икән", - тип уйлаясаҡ. Рәсем - һинең мауығыу, яратҡан шөғөлөң. Фольклорға, тарихыбыҙға һөйөү ҡайҙан килә?**

- Боронғо ҡомартҡыларға, тарихҡа һөйөү ғаиләлә һалына, тип уйлайым. Минең әсәйем Виләү Бикмырҙа ҡыҙы уҡытыусы булып эшләне, боронғо тарихыбыҙ тураһында ул һөйләй торғайны. Унан, атайым легендаларҙы ярата, шуларҙы бик күп белә. Эйе, каналым Kanatly тип атала. Каналдың исемен үҙгәртергә тип уйлайым. Ҡайһы саҡ "Ҡарағош" тип тә ҡуям ҡултамғамды. Сөнки Ҡарағош - Бөрйән ырыуы ҡошо. "Канатлы" тип әйтеү ошо ҡошҡа ишара булып тора.

Беҙҙең затты Алдар батыр тоҡомонан килә, тиҙәр. Быны ошо рух беҙгә һалынған да инде. Башҡортостанға ниндәй ҙә булһа файҙа килтерәйем, тигән маҡсат менән йәшәйем һәм ижад итәм. Беҙ шул тиклем бай фольклорлы халыҡ, легенда, риүәйәт, әкиәттәребеҙҙең иҫәбе-хисабы юҡ. Ә бит шулар онотолоп бара. Икенсе халыҡтарҙың мәҙәниәтән өйрәнәбеҙ, үҙләштерәбеҙ, уларҙың ауыҙ-тел ижады ҡомартҡыларын беләбеҙ, хатта ки үҙебеҙҙеке һымаҡ ҡабул итәбеҙ. Беҙҙең иһә ысын рухи байлығыбыҙ ситтә ҡала бирә. Уларҙы ата-бабаларыбыҙ менәр йылдар буйы юҡҡа ғына һаҡламаған бит!

Ҡомартҡыларыбыҙға һалынған фәлсәфә, хикмәт һәр ваҡытта ла актуаль булып ҡала. Улар милләтте йәшәтеү көсөнә эйә, тип уйлайым. Мин йәш быуын вәкиле булараҡ, шулай тип әйтәм, замандаштарымдың күбеһе матди байлыҡты өҫтөн күреп, рухиәткә иғтибарҙы кәметкән, ҡулланыусылар идеологияһына бирелгән быуын. Башҡорт фәлсәфәһе икенсе төрлөрәк бит ул, бер-береңде ҡәҙерләү, туғанлыҡ, ярҙам ҡулы һуҙыу кеүек ундағы бөйөк төшөнсәләр берләшеп, ойошоп йәшәргә ярҙам иткән. Бына ошо ҡараштарҙы бәләкәстәргә күрһәтергә, аңлатырға тырышам, шуға ла мультипликацион стилдә ижад итәм. Балалар тик-токта йыш ултыра, шуға ҡыҫҡа йәнһүрәттәр эшләп, уларҙы әүрәтергә, үҙебеҙҙең тылсымлы донъябыҙға иғтибарын йүнәлтергә тырышам. Улар минең йәнһүрәттәрҙә күреп-ҡарап, үҙебеҙҙең легендаларыбыҙ менән ҡыҙыҡһынырҙар, тигән инаныуҙамын. Уларға йүнәлеш биреү мөһим. Беҙгә тарих һәм легендалар бергә ҡушылған комикстар эшләргә кәрәк.



**➔ Тарихи яҡҡа һуҡтырғанда, шәхсән үҙеңә ниндәй ваҡиғалар тәьҫир итә һәм ижадҡа рухландыра?**

- Күсәк бей менән Бабсаҡ бей тураһындағы эпос мине уйға һала. Шуға нигеҙләнеп, улар һәм уларҙан һуңғы быуындар тураһында комикс эшләгем килә. Бөрйән менән ҡыпсаҡ ырыуҙарының алышы бер төрлә генә һүрәтләнмәй. Һәр бер ырыуҙың үҙ версияһы бар. Минең комикстың төп идеяһы - талаш, ығы-зығы бер ҡасан да яҡшылыҡҡа алып килмәй, ә татыулыҡты һаҡлай белеү, берҙәмлек башҡорттар өсөн төп ынтылыш булырға тейеш.

Комиксҡа килгәндә, уны мин оҙон сюжетлы итеп, йәғни бөтә белгән легендаларымды һәм тарихи ваҡиғаларҙы бергә ҡушып төҙөгөм килә. Иң мөһиме, шул легендаларға, ваҡиғаларға, ҡайҙан нисек табып уҡырға була, тигән йүнәлеште күрһәткән һылтанмаларҙы мотлаҡ ҡуйып эшләргә. Һәр теләгән кеше төп сығанаҡтарҙан ҡарап, улар менән таныша алаcаҡ. Быны башҡорттоң рухи донъяһына, мәҙәниәтенә үҙенсәлекле сәйәхәт һымаҡ ҡабул итергә кәрәктер.

Хәҙер донъя кимәлендә йәштәр китаптарҙы әҙерәк уҡый. График романдар, манга тигән яңы стилдәр барлыҡҡа килде. Классик әҙәбиәтте лә график роман итеп сығаралар, улар хәҙер китапханаларҙа бар. Ә беҙ ниндәй матур әҙәбиәткә эйә халыҡ! Бына шул байлыҡҡа иғтибар артһын өсөн график романдар эшләй башларға ваҡыт. Мин үҙем башҡорт әҙәбиәтен уҡыйым. Текстар оҡшай, тик биҙәлеше ғына бик ҡыҙыҡһыныу уятмай, заманса һүрәттәр етешмәй.

Ноғман Мусиндың Алдар батыр тураһындағы романы нык оҡшаны. Дөрөҫөн әйткәндә, мин әлегә мәлдә бөтә материалдарға ла - легендаларға, тарихҡа, аниме, комиксҡа - ҡыҙыҡһынып барып тотонам. Нығлап ҡына ҡайһыныһын төп йүнәлешем итеп һайларға белмәй китәм.

**➔ Комикс, анимелар эшләргә ҡасан тотоноп киттең?**

- Бәләкәй саҡта бөтәһе кеүек үк һүрәт төшөрһәм дә, был эшкә бик етди ҡараным, тип әйтә алмайым. Башта бер нисә рәссамдың төркөмөнә яҙылып, уларҙың ижадын күҙәтеп барҙым. Шунан планшет һатып алдым. Дөрөҫөн әйткәндә, Мәскәүгә уҡырға ингәс, был ят мөхиткә күнегеүе енел булманы, шул нығлап һүрәт төшөрә башлауыма сәбәп булды. Башҡортостанда булһам, бәлки, улай уҡ мауығмаҫ та инем. Яҡындарымды, тыуған яҡты һағыныу күңелдә рәсем булып тыуҙы. Һүрәт төшөрә башлағас, күңелгә еңеллек килде, һағыныуҙы шулай баҫа инем. Ул саҡта күберәк башҡорт ҡыҙҙары һүрәттәрен төшөрә торғайным, 22 йәштә инде һүрәт төшөрөү менән нығлап шөғөлләнеп киттем.

Ҡарап барғас, беләм - башҡа милләт рәссамдары легендаларға бәйле бик күп комикстар тыуҙыра. Ҡаҙаҡтарҙа ул бик нык үҫешкән. Рус рәссамдары тураһында әйтергә лә түгел, фольклорҙарын ошо стилдә күпләп сағылдыралар. Башҡортостанда был йүнәлештә эшләгәндәрҙе күргәнем юҡ. Аниме фильмдар күп ерҙә популяр. Тап шул аниме арҡаһында япон мәҙәниәтен бөтөн донъя белә.

Рухи ҡомартҡыларыбыҙҙы, мәҙәниәтебеҙҙе һаҡлау буйынса беҙҙә иһә ауыл ағинәйҙәре генә шөғөлләнә һымаҡ. Мәҫәлән, улар милли кейемдәр тегә, биҙәүестәр һаҡай. Йәштәр араһында ла бындай юҫыҡта ҡыҙыҡһыныусылар күбәйә бара, ләкин ул мәҙәниәтебеҙҙең бер генә өлкәһе бит. Бай фольклорыбыҙ һүрәттә лә, йәнһүрәттә лә кескәйҙәр күңеленә үтеп инеп ултырырға тейеш. Минең үҙемә шәхсән "Ете ҡыҙ" легендаһы нык тәьҫир иткәйне, уны бәләкәйҙән ишетеп үҫтем, сөнки Яугул күле эргәһендә тыуғанмын. Йырын да беләм.

Бәләкәй саҡта мин тик башҡортса ғына һөйләшә инем, балалар баҡсаһында, артабан ауыл мәктәбендә уҡығанда башҡортса аралашыу мөхите булманы, рус телле булып киттем. Ә бына Сибай гимназия-интернатына килгәс, нығлап башҡорт телен иҫемә төшөрҙөм. Башҡорт теле буйынса ТДИ һәм БДИ ла бирҙем.

Башҡорт әҙәбиәтен уҡырға яратам. Айыруса, мәҡәл-әйтемдәребеҙ һоҡландыра, ҡыҫҡа ғына итеп, ниндәй тапҡыр һәм мәғәнәле әйтә белгән халҡым! Мәҫәлән, "Ятып ҡалғансы, атып ҡал" - тормош ҡулланмаһы түгелме ни? Ул бит аңлаған кешене эшкә дәртләндерә, маҡсатлы итә. Мин кешеләрҙе бөтөн һорауҙарға яуапты үҙебеҙҙең башҡорт мәҙәниәтенән эҙләргә саҡырам. Кемдер күңел төшөнкөлөгөнә бирелгәнме, икеләнәме, йәшәү мәғәнәһе тураһында уйланамы - башҡорт халыҡ ижадында бөтәһенә лә яуап бар. Бына ошо көстә, рухты аниме, комикстарҙа ла сағылдырырға тырышыу - минең маҡсатым булып тора.

**Фәрзәнә АҠБУЛАТОВА**
**һорау бирҙе.**

---

БЕР КӘЛИМӘ ФЕКЕР

# ЙӘШӘЙЕШЕҢДЕ...

## сәғәткә яраҡлаштырма!



**Ваҡыт ул яһалма үлсәм һәм абстракт төшөнсә. Ғәмәлдә, ваҡыт - кешенең йәшәү мәле. Йәшәү мәлендә кешегә көн менән төндө айыра белеү ҙә етә, ә ҡалған ваҡытты - сәғәт теленең циферблат буйлап хәрәкәт итеүе тип кенә ҡабул итеү дөрөҫтөр.**

Сәғәт ваҡыты көндөң йәки төндөң ҡайһы төшө: башы, уртаһы, аҙағымы икәнен белеү өсөн һәм шул арауыҡтарҙа кеше үҙенең эштәрен, ғәмәлдәрен маҡсатына күрә үтәү мәлен тәғәйенләү өсөн кәрәк. Башҡаса сәғәттең кеше ғүмере, йәшәйешенә бер тәьҫире лә, әһәмиәте лә юҡ. Кеше йәшәһә, сәғәт теле тороошонан уның күрһәткән төҙлек өлөшөн баһалай ала, тимәк, сәғәт тәүлектең миҙгелен генә билдәләй. Кешенең ғүмер ағышына ла, йәшәйеш рәүешенә лә уның бер ҡыҫылышы юҡ. Кеше йәшәмәһә, уның сәғәте лә, ваҡыты ла юҡ. Тимәк, ваҡыт - материя, йәғни, тәбиғәттәге физик есемдә тәшкил иткән матдә түгел. Ул кеше аңына ғына бәйле төшөнсә.

"Ғүмерҙе ваҡыт ағымына тапшырып йәшәү - гонаһ", тиелә Изге китаптарҙа. Көн менән төн һәм йыл әйләнәһенә миҙгелдәр алмашыныу осорон йәнә менән һиҙеп, дөрөҫ билдәләү тойғоһо Ерҙәге бар тереклектәр һәм үҫемлектәрҙең булмышына тәбиғи һалынған сифат. Был һәләт йыл әйләнәһенең тәбиғи үҙгәрештәренә яраҡлашып йәшәү, тоҡомдарын үрсетеү өсөн мөһим. Уларҙың ваҡыт үлсәме юҡ һәм булыуы шарт та түгел. Улар сәғәтһеҙ ҙә яңылышмай, йәндәренең һиҙемләүенә буйһоноп, тоҡомдарын үрсетә. Сәғәт күрһәткән ваҡыттың тереклек, үҫемлектәр өсөн әһәмиәте лә, тәьҫире лә юҡ. Улар фәҡәт тәүлек әйләнеше, тәбиғәт миҙгелдәренә буйһоноп йәшәй.

Сәғәт күрһәткән ваҡытҡа әйәреп, уға ярарға тырышып, үҙен Ер йөҙөндә иң камил аңлы һәм аҡыллы тип иҫәпләгән әҙәм балаһы ғына йәненең тәбиғи йәшәү ритмын боҙа. Сәғәт күрһәткән ваҡытҡа ярайым тип, хәүефләнә, тыныслығын юғалта, үҙенә яһалма ваҡыт сиктәре ҡуйып, тән ағзаларын, ғәзиз йәнен яфалай, үҙенә үҙе тыуҙырған яһалма ваҡытҡа яраҡлашырға мәжбүр булып, йәшәү ихтыярын ҡыҫырыҡлай.

"Йәшәү ваҡытын сәғәткә яраҡлаштырыу - хата". Аң менән йәнгә сәғәт күрһәткән ваҡыттың тәбиғи бер ҡыҫылышы ла, әһәмиәте лә юҡ. Аң менән йән үҙҙәре белгән ваҡыт үлсәмендә йәшәй, үҫә, үҙгәрә һәм хәрәкәтләнә! Тәүлек әйләнәһенә алдаҡ мәғлүмәт, сағыу күренеш, яһалма биҙәлештәргә әүрәп, уларҙың йөгөнтөһөна самаһыҙ бирелеү әҙәм затына ғына хас ғәмәл. Шул осорҙа кеше аңлы рәүештә йәшәү ваҡытын, ғүмер кисереү осорон файҙаһыҙға сарыф итә. Әҙәм балаһы аңлы рәүештә үҙенең зиһенен тарҡатып, аңын ағыулап, ғәзиз йәнен яфалауын - яҙыҡ ғәмәл икәнен аңлармы бер заман? Тағы ниндәй дәлилдәр килтереп, ниндәй аҡыллы, йөгөнтөлө һүҙҙәр әйтеп, кемдәр, ҡасан сығарға ярап икән кешелекте был аяныслы хәлдән? Әллә бөтөнләй ышаныс юҡмы...

**Урал МОСТАФИН.**

*✓ Аҫыл Шүлгән йылҡыһы тоҡомон тергеҙеү һәм үрсетеү, ғөмүмән, йылҡысылыҡты артабан үҫтереү ҙә зарур. Ҡасандыр йылҡы итен ғәрәп илдәренә ебәргән бит бөрйәндәр.*



ИНТЕРНЕТТАН



# НИ ӨСӨН ҺЫУ ЕҮЕШ?

■ Америка ғалимдары тикшеренеүҙәре күрһәтеүенсә, балыҡ һәм диңгеҙ ризыҡтары яратыусылар башҡа кешеләр менән сағыштырғанда 2,2 йылға күберәк йәшәй. 16 йыл буйына алып барылған тикшеренеүҙәрҙә 65 йәште үткән 2600 кеше ҡатнаша, табиптар уларҙың йөрәк тамырҙарын даими тикшереп торған һәм омега-3 майлы кислотаһы кимәле юғары булған кешеләр оҙағыраҡ йәшәүен асыҡлаған. Омега-3 майлы кислотаһы майлы балыҡта, диңгеҙ аҙыҡтарында күп һәм йөрәк-ҡан тамырҙары өсөн файҙалы. Балыҡ ашарға яратыусылар араһында йөрәк өйәнәгенән үлеүселәр һаны 35 процентҡа түбәнерәк. Быны өсөн аҙнаһына ике тапҡыр ғына балыҡ ризығы ашау ҙа етә.

■ Дүрт йәшлек ҡыҙҙар күп нәмәне белергә ынтылыусан була һәм белгестәр билдәләүенсә, улар көнөнә 390 һорау бирә икән. Бөйөк Британияла үткәрелгән тикшеренеүҙәрҙә 2 йәштән 10 йәшкә тиклем балалары булған 1000 әсә ҡатнашҡан. Асыҡланыуынса, иң күп һорауҙар биреү буйынса иң "көсөргәнешле" мәл иртән була. Уртаса һәр әсәй көнөнә 12,5 сәғәтлек "мейе штурмы"на дусар була. Һәр 2 минут 36 секунд һайын ул һорауға яуап эҙләү менән баш вата. Социологтар асыҡлауынса, күпселек осраҡта балалар яуап эҙләп атаһына түгел, әсәһенә бара икән. Уларҙың дүрттән бер өлөшө быны атаһының "әсәйеңдән һора" тип яуаплауынан һуң эшләй. Йылына бала яҡынса 105 мең һорау бирә. Йәше ҙурая барған һайын, балаларҙың һорауы кәмей, әммә улар ҡатмарлыраҡ була бара һәм әсәләрҙең 82 проценты уларға яуап бирә алмай. Иң йыш яңғыраған һорауҙарға түбәндәгеләр инә: "Ни өсөн һыу еүеш?", "Күләгәләр нимәнән эшләнгән?", "Күк йөҙө ҡайһы урында тамамлана?" һәм "Һыу аҫтында балыҡ нисек тын ала?".

■ Әгәр ҙә һеҙ аҙнаһына 2-3 тапҡыр әстерхан сәтләүеге ашайһығыҙ икән, икенсе типтағы шәкәр диабеты сире хәүефен кәметәһегеҙ. Был турала Бостондағы йәмәғәт сәләмәтлеге Гарвард мәктәбе хеҙмәткәрҙәре белдерә. Ғалимдар был сәтләүектең диабетҡа ҡаршы тәьҫирен күптән асыҡлаған булһа ла, был тикшеренеүҙәр һуңғы осорҙа иң эре асыш тип иҫәпләнә. Бынан тыш, әстерхан сәтләүеге онкологик сирҙәр үҫешен дә булдырмай.

■ Канада тикшеренеүселәре белдереүенсә, ыңғай фекер йөрөтөүселәр тормошта килеп тыуған көтөлмәгән хәлдәрҙе тиҙерәк һәм уңышлыраҡ хәл итә. Тикшеренеүҙәрҙә ҡатнашыусы студенттарҙы бер нисә төркөмгә бүлеп, төрлө эмоциональ характерҙағы видеороликтар күрһәткәндәр. Күнелле сюжеттар ҡараусылар классификацион һөрәттәрҙе лә тиҙерәк аңлаған, башҡа мәсьәләләрҙе лә күберәк сисеүгә өлгәшкән. Шуға ла яуаплы йәки ижади эшкә тотоноп алдынан экспертар кәйефте күтәреп алырға тәҡдим итә.

■ Теге йәки был ауырыуҙан үҙ белдеге менән дарыу һайлағанда кеше иң тәүҙә препараттың төҫөнә һәм исеменә иғтибар итә икән. Һиндостан ғалимдары әйтеүенсә, кешеләр бигерәк тә ҡыҙыл һәм алһыу таблеткаларҙы һатып алырға тырыша. Тикшеренеүҙәрҙә ҡатнашыусыларҙың 14 проценты алһыу таблеткаларҙы ҡыҙылдарына ҡарағанда татлыраҡ, тип тапҡан. Һары төҫтәге дарыуҙар - тоҙло, ә ҡыҙғылт һарылары әсерәк тойолған.

ӘЙТЕР ҺҮҘЕМ...

# БӨРЙӘН БАЙЛЫҠТАРЫ

**Йәнтөйәгебеҙҙе йәмләндереү һәм үҫтереү күп йәһәттән үҙебеҙҙән йүнселлеккә бәйле. Халыҡ әйтмешләй, тормош - ҡора белһәң генә тормош, ҡора белмәһәң - ҡормош. Донъя көтөү, көнкүреште яҡшыртыу өсөн халҡыбыҙҙың кәсеп-шөғөлдәрен тергеҙеү ҙә зарур. Мәҫәлән, әүәл Бөрйәндең Берлек сәнәғәт артелендә төрлө хужалыҡ кәрәк-яраҡтары, хеҙмәт ҡоралдары яһағандар, урында ла ҡулланғандар, ситкә лә һатҡандар. Хәҙер ҙә бит йорт-ҡаралты әйберҙәре, халыҡ ҡулланыуы тауарҙары етештереү мөмкинлектәре, уларға ихтыяж бар. Йәшәйештә, көнкүрештә һәр саҡ кәрәк нәмәләр менән сит илдәр ҙә ҡыҙыҡһыныуы ихтимал.**



## Япондарға ебәргәндәр

Иҫән сағында Иҫке Собханғолдан Хаммат Әхмәт улы Шәмиғоловтың һөйләүенсә, үткән быуаттың етмешенсе йылдарында Бөрйән сәнәғәт комбинаты ҡайын тамыры ороһо (кап) йыйған. Уны Киров өлкәһендә эшкәртеп, артабан Японияға оҙатҡандар. Йылына 150 тонна самаһы оро әҙерләгәндәр. Тамыр ороһо Баҙал, Мәсем тауҙары, Маһа туғайы ҡайынлыҡтарында бар икән. Ул әкиәттәге ғәләмәт ҙур шалҡан һымаҡ ҡалҡып тора, өҫтөндә ҡуйы шытым, үренде үҫә. Ошо ҡайын тамыры ороһонан һырлап, семәрләп, нескә һәм нәфис әйберҙәр яһағандар. Уйлаһаң, ғәжәп инде: Бөрйәндә ағас ороһо әҙерләтеп, Япония ювелир әйберҙәре яһаған, ә беҙҙең аяҡ аҫтында ятҡанды файҙаланырға йүнселлек етмәй. Ҡасан кемдеңдер нимәләр әйткәнен, ҡушҡанын, ярҙамын көтөп ятмай, үҙебеҙ хеҙмәт төрҙәрен булдырырға өйрәнербеҙ икән? Быныһы - беҙҙең ир-егеттәребеҙгә төбәлә, уйланһындар ине...

Әүәл Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы ҡабул иткән "Башҡорт халҡын тергеҙеү һәм үҫтереү" дәүләт программаһының ғәмәли саралар һәм тәҡдимдәр ҡушымтаһында билдәләнеүенсә, ауыл ерендә халыҡтың кәсеп-шөғөлдәрен һәм халыҡ хужалығының күнегелгән тармаҡтарын (йылҡысылыҡ, ҡортсолоҡ һәм башҡалар) үҫтереү урындағы идара итеү органдарына, йәғни урындағы хакимиәттәргә йөкмәтелә. Ошо программаға ярашлы, бөрйәндәрҙең боронғо шөғөлдәрен - йылҡысылыҡты, ҡортсолоҡто - нығыраҡ үҫтереү айырыуса мөһим. Ҡортсолоҡ, солоҡсолоҡ - бөрйәндәрҙең намыҫ эше. Бөрйән башҡорт балының данын бөтә донъяға танытыу - халҡыбыҙҙың мәртәбәһен арттырыу ул. Республика кимәлендә Бөрйән солоҡ ҡортон һаҡлау һәм ишәйтеү саралары күрелеү ғәйәт ҡыуаныслы күренеш булды. Шуның һымаҡ, аҫыл Шүлгән йылҡыһы тоҡомон тергеҙеү һәм үрсетеү, ғөмүмән, йылҡысылыҡты артабан үҫтереү ҙә зарур. Ҡасандыр йылҡы итен ғәрәп илдәренә ебәргәндәр. Халыҡ кәсеп-шөғөлдәрен үҫтереүгә күнел һалған тәүәккәл, йүнсел ойоштороусылар, ғәйри йәштәр, был етди эштәрҙе ғәмәлгә ашырырға булышҡан елле етәкселәр күбәйһен ине.

## Баҡыр ҙа ирекләндәр

Бөрйәнде күптәр урманлы-таулы төпкөл төбәк, айыуҙар төйәге итеп кенә күҙ алдына килтерә. Заманында Бөрйәндә ҙур баҡыр иретеү заводы булғанын әйтһәң, ғәжәп итәләр. Ғәжәпләнерлеге юҡ, Уралыбыҙ һәр төрлө ер аҫты хазиналарына бик бай. Бер нисә быуат элек мәғдән табыусылар Бөрйәндең Ырғыҙлы йылғаһы буйында ла баҡыр мәғдәне ятҡылыҡтарына юлыға. Ошо ятҡылыҡтар менән Петр Федоровичҡа (Петр III) хеҙмәт иткән, һуңынан граф дворян титулына өлгәшкән Карл Ефимович фон Сиверс (1710-1774) ҡыҙыҡһына. XVIII быуаттың уртаһында ул үҙ иҫәбенә тау-завод эше менән шөғөлләнә башлай.

Н.И. Павленконың "Рәсәйҙә металлургия тарихы...", "Башҡорт АССР-ы тарихы буйынса материалдар" (4-се том, 1-се өлөш) китаптарында яҙылыуынса, Ырымбур губернаһы Өфө провинцияһының Ырғыҙлы буйында Вознесенск баҡыр иретеү заводын төҙөүгә рөхсәт 1755 йылдың 3 августында бирелә. Мәгәр һыу көсө менән эшләйәсәк ете мейесле баҡыр иретеү заводы 1753 йылда, указ сыҡҡанға тиклем үк төҙөлә башлай. Сиверс завод төҙөүгә 1754 йылда ҡаҙнанан биш йылға алты мең һум ссуда ала. Вознесенск заводына унан 600 саҡрымда ятҡан Ҡаҙан губернаһының ете ауылынан бер мең крәҫтиән дә беркетелә. Крәҫтиәндәр 333 кешенән торған өс төркөмгә бүленә. Улар алмашлап завод, Ырғыҙлы йылғаһы буйында быуа, күмер яндырыу ҡоролмалары төҙөүҙә, баҡыр рудниктарында эшләй.

Вознесенск баҡыр иретеү заводы 1756 йылдың 24 майында эшләтеп ебәрелә. Ул ете баҡыр иретеү мейесенән, ике гармахер, ер штык, бер баҡыр ҡыҙҙырыу, бер нисә тимерселек мейестәренән, бер һуғыу сүкешенән, бер нисә һыу ҡуласаһынан һәм өрҙөргөс күректәрҙән тора. Завод быуаһы Ырғыҙлы йылғаһының тамағына яҡын урында төҙөлгән була. Заводты 450-нән ашыу рудник мәғдән менән тәьмин итә. Башҡорттар килешеү буйынса күмер яндыра, мәғдән ташый. Завод ҡарамағында уның хеҙмәткәрҙәре һәм эшселәре йәшәгән 100-ҙән ашыу йорт иҫәпләнә.

Тау эштәре менән ныҡ мауыҡҡан Сиверс 1756 йылда Нуғай даруғаһы олоҫтары башҡорттарынан 100 һумға Йыланташлы, Күкташлы, Урманташлы йылғалары буйҙарынан, 1757 йылда Себер даруғаһы Бөрйән олоҫо башҡорттарынан 235 һумға Ағиҙел, Ырғыҙлы һәм Мәнәүез йылғалары тирәләренән ер һатып ала. Купчизаҙы (акт) бығаса башҡорттарҙан киң ер биләмәләре эләктергән Ырымбур сик таможняһы директоры Иван Лаврентьевич Тимашев төҙөй. Тәүге купчий старшина Шәйле Ҡоләмбәтов, Бөрйән сотнигы Мотай Айытҡолов, Ҡыпсаҡ сотнигы Яманғол Унғаров, икенсе купчий Бөрйән старшиналары Шәйле Ҡоләмбәтов, Ҡотлоғужа Сәфәрғолов ҡатнашлығында төҙөлә.

Вознесенск заводында иретелгән баҡырҙың байтаҡ өлөшөн бәләкәй йөк кәмәләрендә Ағиҙел, унан Кама йылғалары буйлап оҙатҡандар. Баҡыр юғары сифатлы булғанлыҡтан, уны аҡса һуғыу өсөн дә ҡулланған-



***✓ Туристарҙың ялы рәсми нигеҙҙә ойошторолмағас, тәбиғәткә ҙур зыян килтерелә. Яр буйҙарындағы ағастар ҡырҡыла, туғайҙарҙа үлән тапала, консерва банкалары, араҡы шешәләре һәм башҡа ҡалдыҡ-боҫтоҡ ташлана.***



дар. Мәҫәлән, 1760 йылда етештерелгән баҡырҙың 3000 бото аҡса һуғыу өсөн Екатеринбургка, 2019 бото Мәскәү ғали йәнәптәре йортона ебәрелә. Мәгәр Сиверсты заводтың тәүге ике йылдағы эш һөҙөмтәләре һис кенә лә ҡыуандырмай. Үҙе сит илдә булыу, батша һарайынан китә алмау, теркәлгән крәҫтиәндәрҙең тыңламауы, ҡасыуы, эшкә тейешле күҙәтеү етмәү арҡаһында ҙур табыш алынмай. Завод төҙөүгә тотонолған капиталды ҡаплау өсөн Сиверс тәбиғи байлыҡтарҙы аяуһыҙ үҙләштерә, теркәлгән крәҫтиәндәрҙе рәхимһеҙ файҙалана башлай. Баҡыр иретеү арта. 1758 йылда заводта - 3113, 1759 йылда 2236 бот баҡыр иретелһә, 1760 йылда инде - 5091, 1761 йылда 5803 бот баҡыр иретелә. Теркәлгән крәҫтиәндәрҙең эштән баш тартыуы, завод етәкселегенә буйһонмауы 1762 йылда баҡыр иретеүҙең ике тапҡырға тиерлек кәмеүенә килтерә.

Крәҫтиәндәрҙең ризаһыҙлығы, сыуалышы Сиверсты хафаға һала һәм ул заводты һатырға ҡарар итә. Уны алырға һөйләшеүҙәр алып барған сауҙагәрҙәр Яков Петров менән Матвей Мясников һуңғы сиктә баш тарта. Шунан һуң Сиверс үҙенең ҡаҙна бурыстарын ҡаплау өсөн ҡаҙна идаралығына Вознесенск заводын тәҡдим итеп, Берг-коллегияға үтенес ҡағыҙы яҙа. Сенаттың докладына Екатерина II ыңғай резолюция һала һәм завод ҡаҙнаға 63129 һумға һатып алына.

Сиверс Берг-коллегияға үтенесендә завод ерҙәренең һәм урмандарының тирә-яҡҡа 30 саҡрымға һуҙылыуы, урмандарҙың 100 йылға етәсәге, завод эргәһендә яҡшы мәғдән менән 450-нән ашыу рудник булыуы, йылына 5000 бот һәм унан да күберәк баҡыр иретелеүе тураһында яҙһа ла, завод ҡаҙнаға көтөлгән табышты бирмәй, рудниктар мәғдәнгә наҡыҫланған була.

1770 йылда Ырғыҙлыға академик Иван Лепехин килеп китә. Көндәлегендә яҙыуынса, хосуси тотҡанда заводта йылына мең ботҡа саҡлы саф баҡыр иретелһә, хәҙер рудниктарҙың бөтөүе сәбәпле байтаҡҡа кәм иретелә. 1770-1772 йылдарҙа етештерелгән баҡыр йылына 1500-2000 боттан артмай. 1773-1775 йылдарҙағы Емельян Пугачев етәкселегендәге азатлыҡ хәрәкәтендә Вознесенск заводына ла ҡағылмай ҡалмай. Пугачевтың указына буйһоноп, эшселәр завод эшен ташлай, азатлыҡ хәрәкәтенә ҡушыла. Пугачев Вознесенк заводында 1774 йылдың 4-6 апрелендә була һәм етмешкә яҡын завод крәҫтиәнен үҙ отрядына ала. Әүжән заводында туптар ҡойола, Ырғыҙлыла дары яһала, Һаҡмар ҡаласығы янында еңелгәс, Пугачев Ыҡ йылғаһына, Ташлы ауылына сигенә, унан Вознесенск заводына йүнәлә. 1774 йылдың май аҙағында завод яндырыла.

Азатлыҡ хәрәкәте баҫтырылғас, Вознесенск заводы ҡайтанан тергеҙелә. 1777 йылда юлбаҫарҙар килеп баҫа һәм завод милкен талай. Бынан һуң тимерлек, күректәр, балта оҫталығы оҫтаханаһы янынан ҡорола. Ләкин төрлө ҡыйынлыҡтар арҡаһында төҙәлеш туҡтап ҡала. Ун ете йыл эшләү осоронда заводта 47145 бот саф баҡыр иретелә.

Сиверстың Берг-коллегияға яҙған хатында сағылыуынса, завод янында байтаҡ ҡына яҡшы тимер мәғдәне бар, был урында һәйбәт кенә завод булыуы ихтимал. Сиверстың һүҙҙәрен раҫлағандай, Ырғыҙлы урта мәктәбе янында бик ҙур тимер мәғдәне киҫәге ята торғайны. Күрәһең, ул ошо тирәлә табылғандыр, бәлки, завод идараһы йорто ла ошо урында булғандыр, Бөрйәндә тимер мәғдәне лә барлығын иҫбатлар өсөн мәғдән киҫәген ошонда килтергәндәрҙер...

Вознесенск заводы эшләүҙән туҡтағандан һуң тирә-яғындағы урмандар ҡаҙна урман ҡараусылары тарафынан һаҡлана. Лесничийҙың йорто элекке завод биҫтәһе урынында төҙәлә, урман ҡараусыларҙың алты өйө була. Урман ҡараусылы урынлашҡан был урынды Ырғыҙлы кордоны тип йөрөтә башлайҙар, һуңыраҡ унда йәшәргә урыҫ ғаиләләре күсеп килә, ауыл барлыҡҡа килә. Завод ҡоролмаларының төҙәлешкә яраҡлы материалдарын, кирбесен ташып бөтөрәләр. Ырғыҙлы, Алтынбей йылғаларында быуылған быуаларҙа балыҡ тоталар. Ваҡыт үтеү менән күмер әҙерләү өсөн ҡырҡылған диләнкәләрҙә йәш ҡарағайҙар үҫеп сыға.

Быуаттар үтһә лә завод ҡоролмаларының нигеҙ соҡорҙары, быуанан алынған һыу эҙҙәре, Ырғыҙлынан Көньяҡҡа ҡарай һалынған егерме биш саҡрым самаһындағы юл эҙе лә беленә. Көньяҡ Уралдың Бөрйән төйәгенең ер өҫтө лә, ер аҫты ла ҡотло, ырыҫлы. Унда барит, доломит, магнезит, мергель, һәүерташ, төҙәлөш ташы һәм башҡа мәғдән, аҫыл таштар барлығы билдәле. Хазина - йәнәштә, аяҡ аҫтында!

Әйе, был ерҙе Хоҙай һоҡланһындар, хайран ҡалһындар, ләззәт кисерһендәр, илһамланһындар, йәшәүгә ҡөҙрәт алһындар өсөн яралтҡан һымаҡ. Әкиәт иле, йәм иле! Шундай тынлыҡ, шундай хозурлыҡ! Ожмах ер, йәндәр йәнләнер ер... Шуға ла "изге урын"ға, хажға барған һымаҡ баралар. Бында - боронғо эпик ҡомартҡылар "Урал батыр"ҙа, "Аҡбуҙат"та тәбиғәттең һәм кешелектең үлемһеҙлеге һүрәтләнгән урындар, бында - тәүге кешеләр, ҡанбабалар йәшәгән Шүлгәнташ мәмерйәһе. Бында уларҙың мәңгелек ауазын, моңон ишеткәндәйһең, үлмәҫ рухын тойғандайһың. Был изге урын үҙенә тартып, саҡырып тора, торасаҡ.

2022 йылдың 9 июлендә бында туристарҙы йәлеп итерҙәй "Шүлгәнташ" тарихи-мәҙәни музей комплексы асылыуы оло ваҡиға булды. Был ғилми-тикшеренеү һәм бер үк ваҡытта ағартыу музейы ла булған бинала мәмерйә территорияһынан археологик артефакттар һаҡлағысы, лаборатория, архив һәм китапхана урынлашҡан. Музейҙың төп экспонаты - мәмерйә диуарына төшөрөлгән боронғо һүрәттәрҙең репродукциялар йыйынтығы. Уны махсус заказ буйынса француз ғалимдары әҙерләгән. Һәм тағы. Бөрйәндә күптән көткән ваҡиға - Аҡбуҙат һәйкәле асылды. Һәйкәлдең Йылҡысыҡҡан күле янында ҡуйылыуы юҡҡа түгел - "Аҡбуҙат" башҡорт халыҡ эпосында Аҡбуҙат тап ошо күл төбөнән артынан бер өйөр йылҡы эйәртеп, зил-зибәр ҡуптарып сыға...




### Туризм - табыш сығанағы

Алтмышынсы йылдарҙа яҙыусы Конторович Владимир Яковлевич икенсе тапҡыр Бөрйәнгә килә. 1967 йылда баҫылған "Бөрйән хикәйәләре" исемле китабында ул райондың социаль-иҡтисади үҫешен яҡшыртыу мәсьәләләрен яҡтыртып, Бөрйәндә туризмды ойоштороуға һәм үҫтереүгә бәйле фекерҙәре менән дә уртаҡлаша: "Иҫке Собханғол ауылының йәнә бер табыш сығанағы - туризм. Был шат күңелле кешеләрҙе ашханала ла, Ағиҙел буйында ла һыу инә торған урында ла осратаһың. Туристар йә өс бүлмәле ҡунаҡханала, йә мәктәп интернаты ятағында, йә ауыл өйҙәрендә урынлаша. Уларға күнеккәндәр. Килгән ҡыҙҙар йылға буйынан һыу инеү кейемендә генә ҡайта, ауылда уларға бер кем дә иғтибар итмәй... Шулай ҙа туризм ойошторолмаған, бында бер нисек тә туҡтатып булмаҫлыҡ тәбиғәт һөйөүселәр йөрөй. Туристарҙы бер кем дә хеҙмәтләндермәй, гидтар юҡ, бер ҡайҙа ла сувенирҙар һатылмай. Шүлгәнташ мәмерйәһен 1965 йылдан йыһазландыра башланылар, әммә ул туристарҙың ҙур ағымын ҡабул итерлек түгел. Ә бит стеналағы һүрәттәр хатта сит ил туристарының иғтибарын йәлеп итә алыр ине. Таулы Бөрйән буйынса дөрөҫ ойошторолған туризм шулай уҡ илебеҙҙең бөтә районларынан туристарҙы үҙенә тартыр, бер ыңғайҙа райондағы буш эшсе ҡулдарҙы берләштерер һәм төҙәлөшкә этәргес бирер, урындағы ауыл хужалығы аҙыҡ-түлеген һатыуҙы тәьмин итер ине. Әммә бөтәһенән элек яҡшы юлдар һалырға һәм уларҙы ҡәнәғәтләндерерлек хәлдә торорға кәрәк".

Шулай итеп, Бөрйәнде ысын мәғәнәһендә туристик үҙәккә әйләндерергә тигән ниәт бар икән, бындай мәҙәни объекттарҙы, тарихи ҡомартҡыларҙы тергеҙеүҙе дауам итергә, бындағы эштәрҙе дәүләт кимәлендә яйға һалырға кәрәк буласаҡ. "Кәрәк буласаҡ" тип ябай ғына әйтелһә лә, был бик ҡатғи талап, көнүҙәк мәсьәлә. Талап үтәлһә, Бөрйән тәбиғәтен һаҡлауға мөнәсәбәт тә үҙгәрәсәк, туризм буйынса Башҡортостаныбыҙҙың мәртәбәһе лә артасаҡ. Иң мөһиме, күптәрҙе борсоған бер хәлгә кәртә ҡуйыласаҡ: туристарҙың ялы рәсми нигеҙҙә ойошторолмағас, илгиҙәрҙәр күп йөрөгән осорҙа тәбиғәткә ҙур зыян килтерелә. Айырыуса Ағиҙел буйы тәләфләнә. Яр буйҙарындағы ағастар ҡырҡыла, туғайҙарҙа үлән тапала, консерва банкалары, араҡы шешәләре һәм башҡа ҡалдыҡ-боҫтоҡ ташлана. Әҙәп, намыҫ тигәнде онотҡан туристар ҡайҙа теләһәләр - шунда туҡтай, нимә теләһәләр - шуны эшләй, һирәк осрай торған үләндәрҙе, емешеләкте юҡ итәләр, ау менән балыҡ аулайҙар, ҡаяларҙа төрлө яҙыуҙар һәм һүрәттәр ҡалдыралар... Уларға контроль юҡ. Ә бит йәмле тәбиғәт кешеләрҙе аламалыҡтан арындырырға, сафландырырға, йәндәрен илаһи ыңғай ҡөҙрәт менән һуғарырға тейеш.

**Сәлимйән БӘҘРЕТДИНОВ.**

*УҢЫШ ҠАҘАН*



# ИЗГЕЛЕК ҺӘМ ГҮЗӘЛЛЕК ТУРАҺЫНДА ХАТТАР

## Ун етенсе хат "Бәҫенде төшөрмәй генә бәхәсләшә белеү"

Артабан, ҡаршы әйткәндә бер ҡасан да бәхәстә рөхсәт ителмәгән алымдарҙы ҡулланмағыҙ һәм түбәндәге ҡағиҙәләрҙе тотоғоҙ: 1) ҡаршы килергә, әммә ғәйепләмәҫкә; 2) "эсбауырына инергә", ҡараштары нимәгә бәйле булыуына төшөнөргә тырышмағыҙ ("һеҙгә был файҙалы булған өсөн ошо ҡараштаһығыҙ", "үҙегеҙ шундай булғанға, шулай тип әйтәһегеҙ" һ.б.); 3) бәхәс темаһынан ситкә китмәҫкә; бәхәсте аҙағына тиклем алып барып еткерә белеү кәрәк, йәғни, йә ҡаршы кешенең тезисын юҡҡа сығарғансы, йә уның хаҡ булыуын танығансы.

Һуңғы фекеремә айырыуса иғтибар иткем килә.

Әгәр һеҙ бәхәсләшкәндә үҙегеҙҙе баштан уҡ итәғәтле һәм тыныс, тәкәбберһеҙ тотһағыҙ, бәҫегеҙҙе төшөрмәйсә тыныс сигенергә юл ҡалдыраһығыҙ.

Хәтерегеҙҙә тотоғоҙ: бәхәстә кәрәк саҡта тыныс ҡына ҡаршы кешенең тулыһынса йәки өлөшләтә хаҡлы булыуын таныуҙан да матурыраҡ күренеш юҡ. Бының менән һеҙ тирә-яҡтағыларҙың ихтирамын яулайһығыҙ. Бының менән һеҙ ҡаршы фекер әйтеүсене лә килешергә ыңғайлатаһығыҙ, ҡарашын йомшартаһығыҙ.

Әлбиттә, эш һеҙҙең дөйөм ҡараштарға, әхлаҡи принциптарығыҙға (улар һәр ваҡыт иң юғары булырға тейеш) ҡағылмаған осраҡта ғына ҡаршы кешенең хаҡлы булыуын танырға мөмкин.

Кеше аумаҡай булмаҫҡа тейеш, ул оппонентына оҡшар өсөн генә, йәки, Алла һаҡлаһын, ҡурҡаҡлыҡтан, карьераһын уйлап һ.б. бирешергә тейеш түгел.

Әммә үҙеңдең дөйөм ҡараштарҙан баш тартырға мәжбүр итмәгән мәсьәләлә ҡаршы килеп тормау, йәки үҙеңдең енеүеңде бәҫһеҙләнмәй генә, бәхәстә еңелгәндән көлмәй, тантана итмәй, уның намыҫына теймәй ҡабул итеү - нисек тә матур!

Иң ҙур интеллектуаль ләззәттәрҙең береһе - оҫта һәм аҡыллы бәхәсләшеүселәрҙе күҙәтеү.

Дәлилдәрһеҙ, бер ниндәй нигеҙһеҙ бәхәсләшеүҙән дә аҡылһыҙы юҡ. Гоголдең "Мертвые души" әҫәрендә ике ханымдың һөйләшеүен иҫләйһегеҙме:

"- Ҡәҙерлем, был сыбар!
- Ах, юҡ, сыбар түгел!
- Ах, сыбар!"

Бәхәсләшкән кешенең нигеҙләнер дәлилдәре булмағанда "фекерҙәр" генә тыуа.

**Дмитрий ЛИХАЧЕВ.**



## 4 НОЯБРЯ
## ПОНЕДЕЛЬНИК
## ПЕРВЫЙ КАНАЛ

6.00, 10.00 Новости.
6.10, 1.05 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]
7.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00 "Умницы и умники". [12+]
9.45 "Слово пастыря". [0+]
10.15 Д/ф Премьера. "Минин и Пожарский". [12+]
11.15 "Михаил Задорнов. "Только русский человек..." [16+]
12.00 Новости (с субтитрами).
12.20 Спецпроект. "30 лет вместе". "Русский проект". [12+]
13.30 Х/ф "Командир". [16+]
16.05 Премьера. Творческий вечер композитора Александра Зацепина в Кремле. [0+]
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.30 Х/ф "Союз спасения". [16+]
21.00 "Время".
21.30 Т/с Премьера. "Мосгаз. Дело №10: Метроном". [16+]
22.25 Премьера. "Победа!" SHAMAN. Концерт на Красной площади. [0+]
0.00 Т/с Премьера. "Пробуждение". [0+]

### РОССИЯ 1

5.10 Х/ф "Счастье Серафимы". [12+]
9.00, 11.00, 14.00 Вести. День народного единства.
9.30 Х/ф "Огненный лис". [6+]
11.20 Большой праздничный концерт "Песни русского мира".
13.00 "Наши". Специальный выпуск. [12+]
14.30, 21.40 Местное время. Вести-Башкортостан.
14.50 "Аншлаг и Компания". [16+]
17.00, 20.00 Вести.
17.50 "Привет, Андрей!" Специальный праздничный выпуск. [12+]
22.00 Х/ф "Повелитель ветра". [12+]
23.55 Х/ф "Экипаж". [6+]
2.35 Х/ф "Кандагар". [16+]
4.25 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Доброе утро!" Концерт. [12+]**
**7.30, 18.30, 22.30, 1.45 Новости (на баш. яз.). [12+]**
**7.45, 23.30, 1.15 Золотой фонд Башкирского телевидения. [12+]**
**8.00, 15.45, 16.30 Тәмле. Мы вместе. [12+]**
**8.30 Торжественное собрание и праздничный концерт, посвященные Дню Народного единства. [12+]**
**10.00, 0.15 Т/с "Сломанные жизни". [16+]**
**11.00 Новости недели (на рус. яз.). [12+]**
**12.00 Новости СВО (на рус. яз.). [12+]**
**12.15, 15.15, 17.30 Это мы! [6+]**
**12.45 Спектакль "Ғәлиәбаныу". [12+]**
**15.00 Гора новостей. [12+]**
**16.15 Интервью. [12+]**
**17.00 Республика LIVE #дома. [12+]**
**18.00 Защитники Отечества. [12+]**
**19.00 Первый концерт Государственного ансамбля кураистов Республики Башкортостан. [12+]**
**21.00 Д/ф "Монисто". [12+]**
**21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.). [12+]**
**22.00 Тайм-аут. [12+]**
**23.00 Күстәнәс. [12+]**
**2.15 Спектакль "Необычная история в обычной деревне". [12+]**
**4.30 Бәхетнамә. [12+]**
**5.30 Счастливый час. [12+]**

## 5 НОЯБРЯ
## ВТОРНИК
## ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 3.00 Новости.
9.05 "Модный приговор". [0+]
9.55 "Жить здорово!" [16+]
10.45, 11.20 "Горячий лед". Фигурное катание. Гран-при России 2024. Этап II. [0+]
11.00, 14.00, 17.00 Новости (с субтитрами).
13.00, 14.15, 16.00, 19.00, 22.45 Информационный канал. [16+]
15.30 "АнтиФейк". [16+]
17.15 "Давай поженимся!" [16+]
18.05 "Мужское / Женское". [16+]
20.00 Т/с "Ищейка". [12+]
21.00 "Время".
21.45 Т/с Премьера. "Мосгаз. Дело №10: Метроном". [16+]
0.10 Премьера. Специальный репортаж. [16+]
1.05, 3.05 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]

### РОССИЯ 1

5.00 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 "Утро России".
9.00, 11.00, 14.00, 17.00, 20.00, 3.00 Вести.
9.30 Доброе утро, республика! [12+]
9.55 О самом главном. [12+]
11.30, 18.30 "60 минут". [12+]
13.00 "Наши". [12+]
14.30, 21.10 Местное время. Вести-Башкортостан.
14.55 Т/с "Тайны следствия". [16+]
17.30 "Малахов". [16+]
21.30 Т/с "Столыпин". [16+]
23.30 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
2.05, 3.30 Т/с "Демон революции". [16+]
4.25 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 Сәләм.**
**10.00, 23.45 Т/с "Сломанные жизни". [16+]**
**11.00, 21.00 Простые истории: жить, работать, любить. [12+]**
**11.30, 16.30, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.). [12+]**
**11.45, 13.45 Интервью. [12+]**
**12.00 Тайм-аут. [12+]**
**12.30, 5.30 Счастливый час. [12+]**
**13.30, 19.30, 22.30, 1.45 Новости (на баш. яз.). [12+]**
**14.00, 0.45 Бәхетнамә. [12+]**
**15.00 Гора новостей. [12+]**
**15.15 Городок АЮЯ. [6+]**
**15.30 М/ф "Мультфильмы". [6+]**
**16.00 Моя планета - Башкортостан. [12+]**
**16.50 Хоккей. "Сибирь" (Новосибирск) - "Салават Юлаев" (Уфа). КХЛ.**
**20.00 Сәңгелдәк. [6+]**
**20.15 Квадратные метры. [12+]**
**20.30 Историческая среда. [12+]**
**22.00 Республика LIVE #дома. [12+]**
**23.00 Башкирские каникулы. [12+]**
**2.15 Спектакль "Счастье с неба". [12+]**
**4.15 Мама. [12+]**
**4.30 Телецентр. [6+]**

## 6 НОЯБРЯ
## СРЕДА
## ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 3.00 Новости.
9.05 "Модный приговор". [0+]
9.55 "Жить здорово!" [16+]
10.45, 11.20, 14.15, 16.00, 19.00, 22.45 Информационный канал. [16+]
11.00, 14.00, 17.00 Новости (с субтитрами).
15.30 "АнтиФейк". [16+]
17.15 "Давай поженимся!" [16+]
18.05 "Мужское / Женское". [16+]
20.00 Т/с "Ищейка". [12+]
21.00 "Время".
21.45 Т/с Премьера. "Мосгаз. Дело №10: Метроном". [16+]
0.10, 3.05 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]

### РОССИЯ 1

5.00 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 "Утро России".
9.00, 11.00, 14.00, 17.00, 20.00, 3.00 Вести.
9.30 Доброе утро, республика! [12+]
9.55 О самом главном. [12+]
11.30, 18.30 "60 минут". [12+]
13.00 "Наши". [12+]
14.30, 21.10 Местное время. Вести-Башкортостан.
14.55 Т/с "Тайны следствия". [16+]
17.30 "Малахов". [16+]
21.30 Т/с "Столыпин". [16+]
23.30 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
2.05, 3.30 Т/с "Демон революции". [16+]
4.33 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 Сәләм.**
**10.00, 0.00 Т/с "Сломанные жизни". [16+]**
**11.00 Дорога к храму. [6+]**
**11.30, 16.30, 17.30, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.). [12+]**
**11.45 Криминальный спектр. [12+]**
**12.00 Дознание. [16+]**
**12.15, 13.45, 16.45, 17.45 Интервью. [12+]**
**12.30, 5.30 Счастливый час. [12+]**
**13.30, 18.30, 22.30, 2.00 Новости (на баш. яз.). [12+]**
**14.00, 1.00 Бәхетнамә. [12+]**
**15.00 Гора новостей. [12+]**
**15.15 Физ-ра. [6+]**
**15.30 М/ф "Мультфильмы". [6+]**
**16.00 Автограф. [12+]**
**17.00 Республика LIVE #дома. [12+]**
**18.00 Тормош. [12+]**
**19.00 Телецентр. [6+]**
**19.45 Ради добра. [12+]**
**20.00 Сәңгелдәк. [6+]**
**20.15 Квадратные метры. [12+]**
**20.30 Защитники Отечества. [12+]**
**21.00 Спроси у Дубовского.**
**22.00 Историческая среда. [12+]**
**23.00 "Байык-2024". Республиканский конкурс исполнителей башкирских танцев. [12+]**
**2.30 Спектакль "Не женщина - дракон". [12+]**
**4.30 Мегасело. [12+]**
**5.00 Тайм-аут. [12+]**

## 7 НОЯБРЯ
## ЧЕТВЕРГ
## ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 3.00 Новости.
9.05 "Модный приговор". [0+]
9.55 "Жить здорово!" [16+]
10.45, 11.20, 14.20, 18.05 Информационный канал. [16+]
11.00, 14.00, 17.50 Новости (с субтитрами).
15.35 "АнтиФейк". [16+]
16.05 "Давай поженимся!" [16+]
16.55 "Мужское / Женское". [16+]
19.10 Х/ф "Чапаев". К юбилею легендарного фильма". [0+]
21.00 "Время".
21.45 Т/с Премьера. "Мосгаз. Дело №10: Метроном". [16+]
22.45 "Большая игра". [16+]
23.45, 3.05 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]

### РОССИЯ 1

5.00 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 "Утро России".
9.00, 11.00, 14.00, 17.00, 20.00, 3.00 Вести.
9.30 Доброе утро, республика! [12+]
9.55 О самом главном. [12+]
11.30, 18.30 "60 минут". [12+]
13.00 "Наши". [12+]
14.30, 21.10 Местное время. Вести-Башкортостан.
14.55 Т/с "Тайны следствия". [16+]
17.30 "Малахов". [16+]
21.30 Т/с "Столыпин". [16+]
23.30 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
2.05, 3.30 Т/с "Демон революции". [16+]
4.26 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 Сәләм.**
**10.00, 0.00 Т/с "Сломанные жизни". [16+]**
**11.00 Моя планета - Башкортостан. [12+]**
**11.30, 16.30, 17.30, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.). [12+]**
**11.45, 12.15, 13.45 Интервью. [12+]**
**12.00 Новости СВО (на баш. яз.). [12+]**
**12.30, 5.30 Счастливый час. [12+]**
**13.30, 18.30, 22.30, 2.00 Новости (на баш. яз.). [12+]**
**14.00, 1.00 Бәхетнамә. [12+]**
**15.00 Гора новостей. [12+]**
**15.15 Сулпылар-2024. [6+]**
**15.45 М/ф "Мультфильмы". [6+]**
**16.00 Патриот РФ. [12+]**
**16.15 Дознание. [16+]**
**16.45 Мегасело. [12+]**
**17.45 Криминальный спектр. [16+]**
**18.00, 4.00 Йома. [6+]**
**18.50 Хоккей. "Динамо" (Минск) - "Салават Юлаев" (Уфа). КХЛ.**
**22.00, 5.00 Республика LIVE #дома.**
**23.00 Колесо времени. [12+]**
**2.30 Спектакль "На том и на этом свете". [12+]**
**4.30 Тормош. [12+]**

## 8 НОЯБРЯ
## ПЯТНИЦА
## ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00 Новости.
9.05 "Модный приговор". [0+]
9.55 "Жить здорово!" [16+]
10.45, 11.20, 14.15, 16.55 Информационный канал. [16+]
11.00, 14.00 Новости (с субтитрами).
14.40 "АнтиФейк". [16+]
15.10 "Давай поженимся!" [16+]
16.00 "Мужское / Женское". [16+]
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.40 "Человек и закон" с Алексеем Пимановым. [16+]
19.45 "Поле чудес". [16+]
21.00 "Время".
21.45 "Голос. Дети". Новый сезон. [0+]
23.25 Спецпроект. "30 лет вместе". "Фабрика звёзд". [12+]
1.15 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]

### РОССИЯ 1

5.00 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 "Утро России".
9.00, 11.00, 14.00, 17.00, 20.00 Вести.
9.30 Доброе утро, республика! [12+]
9.55 О самом главном. [12+]
11.30, 18.30 "60 минут". [12+]
13.00 "Наши". [12+]
14.30, 21.10 Местное время. Вести-Башкортостан.
14.55 Т/с "Тайны следствия". [16+]
17.30 Прямой эфир. [16+]
21.30 "Ну-ка, все вместе!" [12+]
23.55 "Истории Большой Страны". [12+]
1.00 Х/ф "Холодное блюдо". [12+]
4.35 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 Сәләм.**
**10.00, 0.30 Т/с "Сломанные жизни". [16+]**
**11.00 Йома. [6+]**
**11.30, 16.30, 17.30, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.). [12+]**
**11.45 Криминальный спектр. [12+]**
**12.00, 13.45, 17.45, 21.15 Интервью. [12+]**
**12.15 Ҡурай даны. [12+]**
**12.30, 5.30 Счастливый час. [12+]**
**13.30, 18.30, 22.30, 2.15 Новости (на баш. яз.). [12+]**
**14.00, 1.15 Бәхетнамә. [12+]**
**15.00 Гора новостей. [12+]**
**15.15 Тирмәкәй. [6+]**
**15.30 М/ф "Мультфильмы". [6+]**
**16.00 Аль-Фатиха. [6+]**
**16.45 Ради добра. [12+]**
**17.00 Республика LIVE #дома. [12+]**
**18.00 Башҡорттар. [6+]**
**19.00 Честно говоря. [12+]**
**19.45 История одного села. [12+]**
**20.00 Сәңгелдәк. [6+]**
**20.15 Квадратные метры. [12+]**
**20.30 Мегасело. [12+]**
**22.00 СВОих не бросаем. [12+]**
**22.15 Письма солдатам. [12+]**
**23.00 Ете егет. [12+]**
**0.00 Ҡурай-шоу. [12+]**
**2.45 Спектакль "Семь девушек". [12+]**
**4.15 Вопрос + Ответ = Портрет. [6+]**
**5.00 Хазина. [12+]**

## 9 НОЯБРЯ
## СУББОТА
## ПЕРВЫЙ КАНАЛ

6.00 Телеканал "Доброе утро. Суббота".
9.00 "Умницы и умники". [12+]
9.45 "Слово пастыря". [0+]
10.00 Новости.
10.15 Д/ф "Без единой фальшивой ноты". К 95-летию Александры Пахмутовой". [12+]
11.05 Поехали! [12+]
12.00 Новости (с субтитрами).
12.15 "Наше всё". [12+]
13.05 "ПроУют". [0+]
14.00 Х/ф "Петровка, 38". По бестселлеру Юлиана Семенова. [12+]
15.40 "Горячий лед". Фигурное катание. Гран-при России 2024. Этап III. [0+]
16.55 "Кто хочет стать миллионером?" [12+]
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.20 Вечер, посвященный 95-летию Александры Пахмутовой. [12+]
21.00 "Время".
21.35 "Клуб Веселых и Находчивых". Высшая лига. [16+]
0.00 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]

### РОССИЯ 1

5.00 Утро России. Суббота.
8.00 Местное время. Суббота.
8.35 "По секрету всему свету".
9.00 "Формула еды". [12+]
9.25 "Пятеро на одного".
10.10 Сто к одному.
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 Вести.
11.50 "Доктор Мясников". [12+]
12.55 Судьба человека с Борисом Корчевниковым. [12+]
14.30, 20.50 Местное время. Вести-Башкортостан.
14.50 "Парад юмора". [16+]
17.50 "Привет, Андрей!" [12+]
21.00 "Большая Жизнь". Юбилейный вечер Александры Пахмутовой. Прямая трансляция из Большого театра.
22.50 Х/ф "Жизнь прекрасна". [12+]
3.15 Х/ф "Любовь на два полюса". [16+]
4.58 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 Доброе утро! [12+]**
**7.30, 18.30 Новости (на баш. яз.). [12+]**
**7.45 Мегасело. [12+]**
**8.30 Аль-Фатиха. [6+]**
**9.00 Ҡурай даны. [12+]**
**9.15 Квадратные метры. [12+]**
**9.30 Новости СВО (на рус. яз.). [12+]**
**9.45 СВОих не бросаем. [12+]**
**10.00 М/ф "Мультфильмы". [6+]**
**10.30 Әкиәтсе. [6+]**
**10.45 Преград. Net. [6+]**
**11.00 Гора новостей. [6+]**
**11.15 Ат уйнатып. [12+]**
**12.00 Елкән. [6+]**
**12.30 Ете егет. [12+]**
**13.30, 5.30 Башҡорттар. [12+]**
**14.00 Дарю песню. [12+]**
**16.00 Колесо времени. [12+]**
**17.00 Спектакль "Аҡ ҡалфаҡ". [12+]**
**18.50 Хоккей. "Торпедо" (Нижний Новгород) - "Салават Юлаев" (Уфа). КХЛ.**
**21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.). [12+]**
**22.00, 6.00 Республика LIVE #дома. [12+]**
**22.30, 3.00 Новости недели (баш. яз.). [12+]**
**23.15 "Байыҡ-2024". Республиканский конкурс исполнителей башкирских танцев. [12+]**
**0.15 Караоке по-башкирски. [12+]**
**0.45 Юбилейный концерт Сагидуллы Байегет. [12+]**
**3.45 Спектакль "Эх, друг Байтимер!" [12+]**

## 10 НОЯБРЯ
## ВОСКРЕСЕНЬЕ
## ПЕРВЫЙ КАНАЛ

6.00, 10.00 Новости.
6.10, 1.15 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]
6.50 Играй, гармонь любимая! [12+]
7.35 "Часовой". [12+]
8.05 "Здоровье". [16+]
9.10 "Непутевые заметки" с Дмитрием Крыловым. [12+]
9.30 "Мечталлион". Национальная Лотерея. [12+]
10.15 "Жизнь своих". [12+]
11.05 "Повара на колесах". [12+]
12.00 Новости (с субтитрами).
12.15 Д/ф Премьера. "Ген высоты-2. Гора всех гор". [12+]
13.25 "Видели видео?" [0+]
14.20 Д/ф "Русский самородок". К 105-летию со дня рождения Михаила Калашникова". [16+]
15.10 "Горячий лед". Фигурное катание. Гран-при России 2024. Этап III. [0+]
16.40 Д/с Премьера. "БРИКС. Горизонты будущего: Иран". [16+]
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
19.00 Премьера. "Точь-в-Точь". [16+]
21.00 "Время".
23.00 "Что? Где? Когда?" Осенняя серия игр. Финал. [16+]
0.10 Спецпроект. "30 лет вместе". "Русский проект". [12+]

### РОССИЯ 1

5.00, 1.40 Х/ф "Мой чужой ребёнок". [12+]
6.40 М/ф "Смотрим мультфильмы".
7.20 "В кругу друзей".
8.00 Местное время. Воскресенье.
8.35 "Когда все дома с Тимуром Кизяковым".
9.25 Утренняя почта с Николаем Басковым.
10.10 Сто к одному.
11.00, 14.00, 17.00 Вести.
11.30 Большие перемены.
12.30 "Истории Большой Страны". [12+]
13.25 Т/с "Фантазёр". [12+]
14.30 Вести. Местное время.
15.00 Х/ф "Доктор Счастье". [12+]
17.50 "Песни от всей души". [12+]
20.00 Вести недели.
22.30 Москва. Кремль. Путин.
23.00 Воскресный вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
3.24 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 Доброе утро! [12+]**
**7.30 Новости (на баш. яз.). [12+]**
**7.45 Тормош. [12+]**
**8.15 Ради добра. [12+]**
**8.30 Күстәнәс. [12+]**
**9.00 Ҡурай даны. [12+]**
**9.15 Мама. [12+]**
**9.30 Новости СВО (на баш. яз.). [12+]**
**9.45, 21.15, 6.45 Специальный репортаж. [12+]**
**10.00 М/ф "Мультфильмы". [6+]**
**10.30 Тирмәкәй. [6+]**
**10.45 Городок АЮЯ. [6+]**
**11.00 Гора новостей. [6+]**
**11.15 М/с "Нурбостан сәйәхәте". [6+]**
**11.30 Зерно. [6+]**
**12.00 Сулпылар-2024. [6+]**
**12.30 Новости недели (баш. яз.). [12+]**
**13.15, 4.45 Башкирские каникулы. [12+]**
**14.00 Дарю песню. [12+]**
**14.45 Дорога к храму. [6+]**
**15.15 Честно говоря. [12+]**
**16.00 Концерт Айгуль Сагинбаевой. [12+]**
**18.30 Мегасело. [12+]**
**19.15 Әлләсе... [12+]**
**20.00 Патриот РФ. [12+]**
**20.15 Квадратные метры. [12+]**
**20.30 Автограф. [12+]**
**21.00 Дознание. [16+]**
**21.30, 6.00 Новости недели (на рус. яз.). [12+]**
**22.30, 5.30 Республика LIVE #дома. [12+]**
**23.00 Спектакль "Банкрот или Свои люди - сочтёмся". [12+]**
**1.00 Золотой фонд Башкирского телевидения. [12+]**
**1.30 Колесо времени. [12+]**
**2.30 Ете егет. [12+]**
**3.30 Моя планета - Башкортостан. [12+]**
**4.00 Вопрос + Ответ = Портрет. [6+]**

## НАМАҘ ВАҠЫТТАРЫ

*1446 һижри йыл.*

| Ноябрь (Йомадиәл әүүәл) | Иртәнге намаҙ | Ҡояш ҡалҡа | Өйлә намаҙы | Икенде намаҙы | Аҡшам намаҙы | Йәстү намаҙы |
|---|---|---|---|---|---|---|
| 4 (2) дүшәмбе | 6:42 | 8:27 | 13:30 | 15:42 | 17:30 | 19:16 |
| 5 (3) шишәмбе | 6:44 | 8:29 | 13:30 | 15:40 | 17:28 | 19:14 |
| 6 (4) шаршамбы | 6:46 | 8:31 | 13:30 | 15:39 | 17:27 | 19:13 |
| 7 (5) кесе йома | 6:48 | 8:33 | 13:30 | 15:37 | 17:25 | 19:11 |
| 8 (6) йома | 6:50 | 8:35 | 13:30 | 15:35 | 17:23 | 19:09 |
| 9 (7) шәмбе | 6:52 | 8:37 | 13:30 | 15:33 | 17:21 | 19:07 |
| 10 (8) йәкшәмбе | 6:54 | 8:39 | 13:30 | 15:32 | 17:19 | 19:06 |

*"Башҡортса дини календарь"ҙан алынды.*

БАШ ЭШЛӘТМӘК

# РӘШИТ НАЗАРОВТЫҢ ТЫУЫУЫНА - 80 ЙЫЛ



**Рәшит Сәйетбаттал улы Назаров 1944 йылдың 1 ноябрендә Башҡорт АССР-ының Ауырғазы районы Төрөмбәт ауылында тыуған.**

Рәшит Сәйетбаттал улы шиғырҙарҙы бик иртә яҙа башлай, 11 йәшендә тәүге шиғыр юлдарын дәфтәр битенә теркәй. Ул ауылда ун класс тамамлап, колхозда эшләй, 1963-1966 йылдарҙа Ватан алдындағы бурысын үтәй. 1962 йылдан башлап шағирҙың шиғырҙары, нәҫерҙәре, хикәйәләре республика матбуғаты биттәрендә баҫыла башлай. Ә "Таңды ҡаршылау" исемле тәүге шиғырҙар йыйынтығы 1965 йылда Назар Нәжми мөхәррирлегендә донъя күрә.

Армияла хеҙмәт иткән йылдарында Рәшит Назаров "Әсә һүҙҙәре" тип исемләнгән билдәле шиғырҙар циклын яҙа. СССР-ҙың халыҡ артисы, композитор Заһир Исмәғилев ошо төркөмгә ингән әҫәрҙәргә музыка яҙып, Глинка исемендәге оло премияға лайыҡ була.

Йәшен ялтлап һүнгән кеүек ҡыҫҡа, әммә яҡты ижади ғүмер йәшәгән шағир ул Рәшит Назаров. Башватҡысты уның ижадына арнайбыҙ.

## УЙЛАНЫУ

*Ун һигеҙ йәш тула миңә, ун һигеҙ йәш...*
*Аҙ ғүмерме? Юҡ, үҙемсә, байтаҡ ҡына.*
*Үтелгәнгә хәҙер мин күҙ һаламын бары*
*Ҡалын йылдар томалығын айҡап ҡына.*

*Йөрәккәйем ун һигеҙ йыл тибеп тора,*
*Ғүмеремә йәшәү көсөн биреп тора,*
*Тамырҙарҙа, тынғы бирмәҫ юлсы төҫлө,*
*Ун һигеҙ йыл ҡайнар ҡандар йөрөп тора.*

*Эштәр ләкин күпме генә башҡарылған,*
*Йылдар буйы ни тиклем аҙ юл барылған,*
*Йөрәгемде тишеп сыҡҡан байтаҡ көндәр*
*Ҡайһы саҡта һиҙелмәй ҙә уҙғарылған.*

*Ун һигеҙ йыл, был йылдарҙа ҡайнар ҡаным*
*Аҙмы юлдар үтте икән тамырымда?*
*Яҡшы беләм: мин хәҙергә үтмәгәнмен*
*Ошо юлдың яртыһының яртыһын да!*

*Ун һигеҙ йыл, тик ун һигеҙ йомғаҡ булып,*
*Бөгөн бына күҙ алдыма килеп баҫты.*
*Һәм киләсәк: "Тиҙ атла, тиҙ, йәнем!" - тиеп,*
*Миңә хеҙмәт менән тулы киң юл асты.*

16.02.1962




**Йәмилә ШӘРӘФЕТДИНОВА төҙөнө.**

**42-се һандағы сканворд яуаптары.**

**Горизонталь буйынса:** Сибай. Белорет. Ҡосаҡ. Ну. Өс. Өбөрө. Бәләбәй. Дәф. Кер. Өйөрө. Учалы. Тик. Ҡот. Атлас. Атай. Трюм. Мысыр. Лиана. Арҡа. Умыртҡа. Ҡомаҡ. Ишембай. Салауат.

**Вертикаль буйынса:** Дүртөйлө. Нефтекама. Күмертау. Бөрө. Мари. Сбруй. Солоҡ. Ҡамыр. Тайм. Стәрлетамаҡ. Рампа. Тоҡ. Йот. Өйө. Аймаҡ. Йорт. Рота. Өфө. Сарыҡ.

СӘНҒӘТ КӨНДӘЛЕГЕ

## М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры

**4 ноябрь "Бәхет хаҡы"** (Х. Мөҙәрисова), музыкаль мелодрама. 18.00 16+
**5 ноябрь "Ҡара йөҙҙәр"** (М. Ғафури). 16+
**6 ноябрь "Һинһеҙ килгән яҙҙар"** (З. Ҡадирова), мелодрама. 16+
**7 ноябрь "Джут. Һуңғы йәйләү"** (О. Жанайдаров), драма. 16+
**8 ноябрь "Ул бит кисә ине"** (А. Әхмәтғәлиева), лирик комедия. 12+
**9 ноябрь "Бөйрәкәй"** (Т. Ғарипова), драма. 18.00 16+

## М. Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры

**4 ноябрь "Сказание о семи батырах"** (Д. Йосопов), фэнтези. 11.00 6+
**7 ноябрь "Аҡмулла"** (З. Бураҡаева), ҡисса. 13.00 6+
**8 ноябрь "Хужа Насретдин мажаралары"** (Л. Соловьев, В. Виткович), комедия. 12+
**9 ноябрь "Айболит и Бармалей"** (К. Чуковский), мюзикл. 12.00 0+
**"Яҙмышымдың икенсе бүлеге"** (Н. Саймон), трагикомедия. 18.00 16+

## Башҡорт дәүләт ҡурсаҡ театры

**4 ноябрь "Красная шапочка"** (Д. Гараева). 12.00, 15.00 0+
**7 ноябрь "Лиса-сирота"** (О. Штырляева). 18.00 0+
**8 ноябрь Премьера! "Русалочка"** (В. Щербакова, В. Аношкин). 19.00 12+
**9 ноябрь Премьера! "Русалочка"** (В. Щербакова, В. Аношкин). 12.00, 15.00 12+
**10 ноябрь "Муха-цокотуха"** (К. Чуковский). 12.00, 15.00 0+

## Х. Әхмәтов исемендәге Башҡорт дәүләт филармонияһы

**7 ноябрь "Йөрәгемдә һайрай һандуғас"**, Нәркәс Сиражетдинованың концерты. 6+
**8, 9 ноябрь "Осенний JAM"** джаз фестивале концерттары. 6+
**9 ноябрь "Музыкаль интерактив"** 4-7 йәшлек балалар өсөн Морат Йәноҙаҡов. 11.00 0+
**10 ноябрь "Мөхәббәт иле"**, эстрада концерты. 18.00 6+

## Салауат дәүләт башҡорт драма театры

**5 ноябрь Премьера! "Һөйөү көсө"** (Т. Дәүләтбирҙина), мелодрама. 12+
**8 ноябрь "№13"**, (Р. Куни), суперкомедия. 16+
**9 ноябрь "Диңгеҙ. Утрау. Хазина"** (Д. Сәлимйәнов), пираттар тарихы. 13.00 6+

## А. Мөбәрәков исемендәге Сибай дәүләт башҡорт драма театры

**6 ноябрь "Тапшырылмаған хаттар"** (С. Әбдрәхимова), мелодрама. 16+
**7 ноябрь "Доктор"** (М. Икрамова), комедия. 12+
**8 ноябрь "Беҙҙең байлыҡ"** (А. Сәсәнбаев), комедия. 12+

## Стәрлетамаҡ дәүләт театр-концерт берләшмәһе

**4 ноябрь "Маленькая история о Маленьком Муке"** (С. Астраханцев), әкиәт. 12.00 0+
**7 ноябрь "Премьера! "Мөхәббәт һәм күгәрсендәр"** (В. Гуркин), комедия. 12+
**10 ноябрь "Наследники музыкальных династий"**, музыкаль-әҙәби лекторий. 12.00 0+
**"Ҡарауыл! Атай өйләнә?"** (Б. Рацер, В. Константинов), комедия. 18.00 12+

## БР Милли музейы

**7 ноябрь "Һеңлекәш"** фильмы күрһәтелә. 14.00 6+
**8 ноябрь "Рәсәй тарихында немецтар"** күргәҙмәһе асыла. 14.00 12+

МӘҘӘНИ МАЙҘАН

# МОСТАЙҘЫ ХӘТЕРЛӘП...

**Башҡортостандың халыҡ шағиры, совет һәм башҡорт әҙәбиәте классигы, драматург һәм йәмәғәт эшмәкәре Мостай Кәримдең тыуыуына 105 йыл тулыу айҡанлы республиканың Милли йәштәр театрында шағирҙың "Ҡара һыуҙар" поэмаһы буйынса спектаклдең премьераһы булды.**

Спектакль башланыр алдынан Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров тамашасыларҙы һәм театр коллективын Мостай Кәримдең 105 йыллығы менән ҡотланы. "Барыбыҙҙы ла күренекле шәхес, башҡорт халҡының улы, бөйөк шағир Мостафа Сафа улы Кәримовтың тыуыуына 105 йыл тулыуы унайынан ихлас ҡотлайым. Күптәребеҙҙең тормошонда ул һоҡланғыс эҙ ҡалдырҙы тип әйткем килә. Унын менән аралаша һәм эшләй алыуым менән мин үҙемде бик бәхетле кеше тип иҫәпләйем. Ул бөйөк шағир ғына түгел, ул бөйөк гражданин, ғәжәйеп кеше, сағыу йәмәғәтсе һәм сәйәси эшмәкәр булды. Шуныһы мөһим: уның мираҫы бөгөн дә һаҡлана. Хөрмәтле Әлфиә Мостай ҡыҙы, бөтәбеҙ исеменән һеҙгә эшмәкәрлегегеҙ өсөн рәхмәт белдерәм. Һеҙ Мостай Кәримдең мираҫын һаҡлап ҡалыу, башҡорт телен үстереү, йәш актерҙарға, ошо театрға ярҙам итеү өсөн күп эш башҡараһығыҙ", - тине Радий Хәбиров һәм дәүләт наградаларын тапшырҙы.

Шағирҙың ҡыҙы Әлфиә Кәримова ла театр коллективын премьера менән ҡотланы. Милли йәштәр театры - беҙҙең ғаилә өсөн икенсе йорт, Мостафа Сафа улы йәш режиссерҙар һәм актерҙар эшләгән театрҙы бик ярата ине, тип билдәләне ул.

"Ҡара һыуҙар" поэмаһы драма театрында беренсе тапҡыр сәхнәләштерелә, быға тиклем Башҡорт опера һәм балет театрында Салауат Низаметдиновтың шул уҡ исемле операһы ҡуйылғайны. Хәл-ваҡиғалар Бөйөк Ватан һуғышынан һуңғы осорҙа бара. Яу ҡырында хәбәрһеҙ юғалған һөйгән йәре өсөн йөрәк түрендә күпме йылдар ҡәҙерле хистәр һаҡлаған тол ҡатын сыҙамлығы хаҡындағы фажиғәле хикәйәт ул.

# ЯҠТАШЫБЫҘ РУХЫ ЙЫЙҘЫ

**Мәләүез районы Корнеевка ауылында күренекле яҙыусы, йәмәғәт эшмәкәре Булат Рафиҡовтың тыуыуына 90 йыл тулыуға арналған "Хәтер булып әйләнеп ҡайтам..." тип исемләнгән кисә үтте.**



Булат Рафиҡовтың баҡыйлыҡҡа күсеүенә 26 йыл үтһә лә, рухы йыл һайын тыуған Дәүләткол ауылына, уның талантын, ижадын хөрмәт иткән яҡташтары янына ҡайта һәм уларҙы берләштереүен дауам итә. Был юлы ла сарала ҡатнашыусылар әҙиптең ватансылыҡ һәм тормошҡа һөйөү өлгөһө менән һуғарылған ижадының сикһеҙ тәрән донъяһына сумды, хәтирәләре менән уртаҡлашты.

Мәләүез районы хакимиәте халыҡ таланттарын үстереү, ижад иткәндәрҙе дәртләндереү маҡсатында 1999 йылда Булат Рафиҡов исемендәге премия булдырҙы. Ул ике йылға бер тапҡыр тапшырыла. Быға тиклем ошо исемгә 22 талантлы әҙәбиәт, мәҙәниәт һәм сәнғәт эшмәкәре лайыҡ булды. Быйыл Булат Рафиҡов исемендәге премияға Рәсәйҙең һәм Башҡортостандың Журналистар союзы ағзаһы, ҡала һәм районың почетлы гражданы Юнир Аҙнағолов, биҙәү-ҡулланма ижады оҫтаһы Фәнисә Бикбаева, педагогия хеҙмәте ветераны Гөлнур Семенова, кәсепсе Ғәйнулла Рахманғолов лайыҡ булды. Юрматы ырыуы ҡор башы Риф Иҫәнов ҡулынан ауыл биләмәһенең әүҙем кешеләре Маҡтау грамоталары алды.

**Гөлиә ШАҺИҒӘЛИНА.**

# КИНО ТӨШӨРӨҮГӘ - АҠСА

**2024 йылдың 19 июленән 19 августына тиклем Фонд 2024 йылда кинематография өлкәһендәге проекттарға ярҙам итеү өсөн Башҡортостан Республикаһы Башлығы гранттары конкурсына ғаризалар ҡабул итте. Йәмғеһе 15 ғариза килде.**

Еңеүселәр иҫәбендә - республиканың биш ойошмаһы, уларҙың проекттары 50 миллион һумға баһаланды. Шуларҙың өсәүһе тәүге тапҡыр Башҡортостан Республикаһы Башлығы гранттары фонды конкурстарында еңеүсе булды. Еңеүселәр 4 тулы метражлы фильм һәм бер анимация сериалы төшөрә. Гранттың максималь суммаһы түбәндәгесә: тулы метражлы фильм йәки сериал - 15 миллион һум; ҡыҫҡа метражлы фильм - 5 миллион һум. "Кинематографияны үҫтереү конкурсы икенсе йыл үткәрелә. Республикала кинематография индустрияһына ярҙам итеү бик мөһим, сөнки ул мәҙәни киңлекте үстерә һәм төбәктең ыңғай имиджын формалаштыра. Яңы проекттар тамашасыларҙың иғтибарын йәлеп итер, талантлы режиссерҙарға һәм сценаристарға үҙ идеяларын тормошҡа ашырыуға мөмкинлек бирер тип көтөлә", - тине фондтың конкурс комиссияһы ағзаһы, мәҙәниәт министры урынбаҫары Илнур Мөхийәнов.

Еңеүселәр: "Әлифба: һандар һәм ваҡыт" йәнһүрәттәр сериалы, ул 3-7 йәшкә тиклемге балаларҙы башҡорт теленә өйрәтә; Балалар учреждениеларында, шул иҫәптән етем балалар өсөн тәғәйенләнгән "Беҙҙе ҡалдырмағыҙ" нәфис фильмы. Яҙыусы Айгиз Баймөхәмәтов повесы буйынса балалар йортонда тәрбиәләнгән үсмерҙәрҙең драматик тарихы; "Бер яндан осҡан уҡтар" нәфис фильмы реаль хәл-ваҡиғаларға нигеҙләнгән. Ваҡиғалар беҙҙең көндәрҙә бара. Беренсе фильмдар 2025 йылдың 1 декабрендә сығасаҡ.

ТЕЛҺӨЙӘР

# МӘЛӘКТӘЙ САФ ҠАТЫН

**Китап һөйөүселәр ҡайһы бер әҫәрҙә үҙҙәре өсөн бөтөнләй таныш түгел һүҙҙәргә тап була. Мәғәнәләрен һүҙлектәрҙән асыҡлаусы ныҡыштар ҙа бар. Беҙҙең дә иҫәп шундай төпсөр, маҡсатлы заттарҙан ҡалышмау.**

**Мыр.** Емеште, япраҡты һәм башҡа нәмәне ашап, тишеп йөрөгән төрлө ҡорт, ҡарышлауыҡ. *Мыр баҫыу. Маҡыҡ шәлгә мыр төшмәнен.*

**Һыу мыры** - дымлы урында була торған ваҡ ҡына бер көнлөк себен. *Һаҙлыҡта һыу мыры йонсота. Һыу мыры күҙгә керәп бара.*

**Мыр һымаҡ булыу** - иҫәпһеҙ күп булыу. *Ямғырҙан һуң бәшмәк мыр һымаҡ булып ҡалҡҡан. Ә тау итәгендә еләк мыр булып түшәлеп ята.*

**Мәләкә** - эш барышында үҙләштерелгән оҫталыҡ; тәжрибә. *Ҙур мәләкә. Яңы технологиялар өлкәһендә мәләкә алыу.*

**Мәләү.** Үлән тамырын ҡаҙа торған үткер осло таяҡты белдергән һүҙ. *Унайлы мәләү. Мәләү менән дегәнәк тамырын ҡаҙыу.*

**Мәләк.** "Фәрештә" һүҙе урынына "мәләк" тигәне лә тура килеүен иҫтә ҡалдырайыҡ. *Нурлы шәфҡәттән яралған бер мәләктәй саф ҡатын (Ш.Бабич). Ғишыҡ мәләктәре.*

**Мәрҙән, мәрҙәс.** Аҫыл ир-егет тигән мәғәнәне һәм хуплағанды, ҡеүәтләгәнде белдергән һүҙҙәр. *Халыҡ еңеүсене "Мәрҙән!" тип маҡтай. Бәйгелә "Һай, мәрҙәс!" тигән һүҙҙәр яңғырап тора.*

**Шулай итеп, туған телдә уҡыу, яҙышыу, аралашыу уны белеүҙә мәләкәне байытыр.**

**НУРБИКӘ әҙерләне.**

АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡикәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# АҠЫЛҺЫҘҘАН МАҠТАЛҒАНСЫ... аҡыллынан бер тиргәл

Бер ҡатындың ире үлһә, алтмыш ҡатын ҡайғырыр, бер ирҙең ҡатыны үлһә, алтмыш ҡатын ҡыуаныр.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

Бәхетле осраҡлыҡтарға бәйле кешене бер ваҡытта ла бәхетле тип иҫәпләмә.

**(Луций Сенека).**

Мөхәббәтһеҙ өйләнмә, сәбәпһеҙ ғашиҡ та булма.

**(Аноним).**

Ғәфү итә белеү - азатлыҡҡа һәм артабан йәшәргә мөмкинлек ул.

**(Ханна Арендт).**

Донъяла мөлә килеп еткән, өлгөргән идеянан да ҡаҡшамаҫыраҡ бер ни ҙә юҡ.

**(Виктор Гюго).**

Кешенең тәғәйенләнеше низә? Кеше булыуҙа!

**(Станислав Лец).**

Тәмле булған урында татлыны ла табырһың.

**(Петроний).**

Йәшәлгән йылдар ғына аҡыл килтермәй, ҡайһы саҡта ул үҙенән-үҙе килеп тыуа.

**(Елена Гарро).**

**Шулай итеп, тағы бер аҡыл: "Көтөүсе бер кешене үпкәләтә. Ә уныһы көтөүсегә бик ныҡ асыулана һәм унан үс алырға ҡарар итә. Ул был көтөүсенең халыҡ йәшәгән урындан алыҫта көтөү көткәнен, уның менән берәй бәлә-ҡаза булһа, уға ярҙамға килеүсе булмаҫын яҡшы аңлай. Шуға ла был кеше көтөүсе өсөн соҡор ҡаҙырға була. Ҡараңғы төшөп, төн булғас, ул үҙенең яуыз уйын тормошҡа ашырыуға тотона. Үҙе ҡаҙа, үҙе көтөүсенең соҡорға төшөп, ҡайһылыр ағзаһын имгәтерен, йә һәләк булырын, бик тә булмаһа, был соҡорға малдары осоп төшөрөн күҙ алдына килтереп, кинәнес кисерә. Кинәнестән, үс ҡандырыуҙан дәртләнеп, тағы ла ҡыҙыуыраҡ һәм тәрәнгәрәк төшөп ҡаҙа башлай. Бына таң нарыны беленә. Шунда был кеше ҡапыл теге татлы уйҙарынан арына һәм... аптырап китә: ул соҡорҙо шул тиклем тәрән итеп ҡаҙыған һәм унан кемдеңдер ярҙамынан тыш сығыу мөмкин түгел...**

**Шуның өсөн, уйыңдан ғына булһа ла башҡаларға соҡор ҡаҙыр алдынан иҫеңдә тот: соҡор ҡаҙған ваҡытта барыбер иң тәүҙә уға үҙеңә төшөргә тура киләсәк бит, ә сыға алырһыңмы һуң?.."**

"Киске Өфө" гәзитен ойоштороусы:
Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте
Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы
№ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

1 582218 911006 24043

Баш мөхәррир:
Гөлфиә Гәрәй ҡыҙы ЯНБАЕВА.
Мөхәррират:
Сәриә ҒАРИПОВА,
Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ,
Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА,
Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы:
450005, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1
Беҙҙең сайт: www.kiskeufa.ru
E-mail: kiskeufa@mail.ru
ЯСЙ "СПУТНИК-ЮГ" типографияһында баҫылды. Тел.: 8 (967) 744-77-33. (453400, БР, Дәүләкән ҡалаһы, Мәжит Ғафури ур., 4 й., 203 офис).

Телефондар:
Баш мөхәррир 253-25-44
Хәбәрселәр 252-39-99
Матбуғат таратыу 252-39-99

Ҡул ҡуйыу ваҡыты -
31 октябрь 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 14 сәғәт 30 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте 253-25-44 телефоны буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.

«Киске Өфө»нөң индексы – ПР905

Тиражы - 2750
Заказ - 1912